✓ *Хөрмәтле уҡыусыбыҙ, гәзитебеҙ менән дуҫлашырға саҡырабыҙ һәр көндә. Уның һеҙҙе рухлы ла, сәмле лә, ғәмле лә итеренә иманыбыҙ камил. 2009 йылдың икенсе ярты йыллығына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 294 һум 84 тингә, 50673 индекслыһына (льготалыһына) 282 һум 66 тингә яҙыла алаһығыҙ. Артабан да бергә йәшәйек, бергә уйлайыҡ, бергә шатланайыҡ!*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

9-15 МАЙ
(ҺАБАНАЙ)
2009 ЙЫЛ

№19 (333)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**“Ни шагу назад!”**

Был фарман нисек яҙылған?




2

**Ил ағаһы**



7

**Башҡорт балы**



8-9

**Был хаҡта яҙыуы ауыр,**
яҙмайынса ла ярамай....



10

**ТВ программа**

14

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Һеҙҙең күңелегеҙҙә Бөйөк Ватан һуғышы менән бәйле ниндәй хәтирәләр йәшәй?

*Лилиә НАФИКОВА, пенсионер:* Һуғыш бөткәндә, миңә әле 7 генә йәш ине. Атайым Вәлиәхмәт Ғәйнуллин һуғыштан иҫән-һау ҡайтҡас, уны бөтә ғаиләбеҙ менән ҡаршылап, бик ҙур шатлыҡ кисергәнебеҙ хәтергә уйылып ҡалған. Атайымдың һуғыш хәтирәләренән иң иҫтәлеклеһе - генерал Шайморатовтың үлемен үҙ күҙҙәре менән күреүе. "Дебальцево станцияһы эргәһендә ҡаты алыштар барҙы. Беҙ, утыҙлаған һалдат, әле яңы ғына яуып үткән ҡырпаҡ ҡар өҫтөндә ятабыҙ. Ҡамауҙан сығыу өсөн һис бер әмәл ҡалманы кеүек, ҡайҙа барһаң да фашистарға тап булаһың. Беҙҙең эргәлә генә бер түбә бар ине, генерал Шайморатов шул ҡалҡыулыҡҡа табан аты менән сабып уҙҙы. Әммә тап шул саҡта атыу тауыштары яңғыраны, үлемесле яраланған генерал атынан ҡолап төштө..." - тип хәтерләр ине атайым. Бер туған Ғәлиәхмәт ағайым да Берлинғаса етеп, һуғыш ғәрәсәтендә иҫән ҡалды, әле Стәрлетамаҡ ҡалаһында йәшәй. Һуғыш ветерандарына иҫәнлек-һаулыҡ, күтәренке байрам кәйефе теләйем.

*Юнир САЛАУАТОВ, пенсионер:* Миңә 14-15 йәш булғанда, йәғни 60-сы йылдарҙа, ни эшләптер, яугирҙар тураһында аҙ һөйләй торғайнылар, улар үҙҙәре лә һуғыш хәлдәре тураһында һөйләргә әүәҫ булманы. Күрәһең, ошо касафатты татыған кешегә һуғышты хәтергә алыу ҙа еңелдән булмағандыр. Фронтовиктарға Л. Брежнев генсек булған йылдарҙа ғына иғтибар һәм ихтирам артты. Олатайым Салауатов Мөтиғулла Беренсе бөтә донъя һуғышында рядовой һалдат булған кеше һәм уға граждандар һуғышында ла ҡатнашырға тура килә. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында, йәше оло булғас, уны хеҙмәт фронтына ебәрәләр. Икенсе олатайым һуғыштан ҡулын имгәтеп ҡайтты, әммә ундай яра алғандарға ул саҡта пенсия ла түләнмәй ине. Әсәйем һуғыш йылдарында Бөрйән районының Фрунзе исемендәге колхозында эшләгән. Уларҙың төп бурысы - колхоз малын ҡарау, уларҙы кәметеүгә юл ҡуймау була. Бала-саға, ҡыҙ-ҡырҡын, йәй буйына бесән әҙерләп, ошо бурысты намыҫ менән үтәп сыға. Уларға беҙҙең көндәрҙә хеҙмәт ветераны булып, хөкүмәт тәғәйенләгән пенсияға рәхмәтле булып йәшәү насип булды. Тағы ла күңелгә уйылып ҡалған бер нәмә тураһында әйтмәй булдыра алмайым. Һуғышта бик күп йәш ир-егеттәр ятып ҡалғас, ауылдарҙа тол ҡатындар күп ине. Әммә улар бирешмәне, ҡайһы берҙәре, нисек тә булһа ғаилә ҡороп, бала тапты, уларҙы тәрбиәләп үҫтерҙе. Ошондай ғаиләләр ҙә ауылды һуғыш касафаты килтергән балаһыҙлыҡтан йолоп ҡалып, уны юҡҡа сығыуҙан ҡотҡарыуға ҙур өлөш индергәндер, тип уйлайым.




## БЕҘ - ЕҢЕҮСЕЛӘР ТОҠОМО!

*Еңелмәнек һуңғы яуҙа ла беҙ,*
*Беҙ Еңеүсе халыҡ тоҡомо.*
*"Еңелмәскә!" тигән "Әлифба"ны*
*Тарих һабағынан уҡыныҡ.*

*ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...*

# ИҢ ТӘМЛЕ БУТҠА

**Бөйөк Еңеү көнөндә миңә дүрт кенә йәш булған. Шуға ҡарамаҫтан, һуғыш, немец, Гитлер, Берлин тигән һүҙҙәр хәтергә һеңеп ҡалған.**

Әсәйемдәр Аҡҡош ауылы янындағы баҫыуҙа тары сәсә ине. Беҙ, бер тиҫтерҙәр, күмәкләп улар янына барабыҙ. Унда төшкөлөккә нимә булһа ла бешерәләр һәм беҙ ҙә улар янында тамаҡ туйҙыра инек. Ул көндө беҙ, күрәһең, ир-тәрәк килгәнбеҙҙер, әсәйемдәр ялға туҡтамайғайны әле. Биҡкол ауылы яғынан йән-фарман сабып килеүсе һыбайлы күренде. Бригадир Мәрүәр инәй икән. Ул атынан төшкәс тә кешеләргә йыйылырға ҡушып, һабан төрәненә һуҡты. "Беҙҙекеләр еңгән! Гитлер дөмөккән! Еңеү, балалар! Һуғыш бөткән!" тигән һүҙҙәр бөгөнгөләй ҡолаҡ төбөндә яңғырап тора.

"Еңеү, балалар! Еңеү, әхирәткәйҙәрем! Ял итегеҙ, иртәгә сәсеп бөтөрөрбөҙ, күп ҡалманы ла инде. Полномуш та (уполномоченный, элек сәсеү, урып-йыйыу осоронда колхозға ебәрелгән район вәкиле) Шишмәгә ҡайтып китте. Күп итеп бутҡа бешереп, байрам итәйек", - тигәс, аттарҙы тышап, сиҙәмгә ебәрҙеләр. Сәскестәрҙәге тоҡтарҙан тары алып, Тәнзилә әбейҙәрҙең ишек алдында өс килелә тары төйөп, ярма яһанылар. Ферманан һөт алып килеп, ҙур ҡаҙанға бутҡа бешерергә ҡуйҙылар.

Был ваҡытта ололарҙың нисек шатланғанын яҙып ҡына ла аңлатып булмай. Уны аңлау өсөн ошо йылдарҙың шаһиты булырға кәрәктер. Бейештеләр, йырланылар, илаштылар, бер-береһен йыуаттылар. Һауынсы Шакирә әбей йырға әүәҫ, бәйет сығарырға бик оҫта ине. Эх, уның таҡмаҡтарын яҙып алыуҙы ғына булманы. Иҫтә ҡалған бер нисәһен генә килтерәм:

Немец килә маҡтанып,
Ултырып алған тан(ы)кка.
Беҙгә ҡаршы һуғышҡандар
Янһын мәңге тамуҡта.
Күпме ғазап, бәлә-ҡаза
Килтерҙе хәсис Гитлер.
Һине тапҡан ата-әсәң,
Әҙәм түгел, ә эттер.
Әҙәм аҡтығы Гитлерҙың,
Ярҙамсыһы Гебб(е)льс.
Дүрт баламды етем итте,
Ҡәһәр һуҡҡан иб(е)лес.
Элек ине - һеҙҙеке,
Берлин хәҙер беҙҙеке.
Гитлер тигән ҡәбәхәт,
Ояһында дөмөктө.

Түңәрәкләп табын ҡороп, ашарға ултырттылар. Беҙгә лә, балаларға ла, туҫтаҡҡа һалып, бутҡа бирҙеләр. Шамил менән уны һә тигәнсе ашап бөттөк, тағы ла өҫтәнеләр. Рәхәтләнеп, туйғансы ашаныҡ, ул шундай тәмле булды...

Балалыҡ йылдары, Бөйөк Еңеү көнө шулай хәтерҙә ҡалған минең. Күпме йылдар үтте, һыуҙар аҡты, ниндәй генә аштар ашалманы. Бөйөк байрам етә башлаһа, тылдағы хеҙмәт батырҙары - әсәйҙәр иҫкә төшә. Улар бешергән тары бутҡаһы иң тәмле ризыҡ булып иҫтә лә, телдә лә ҡалған...

**Ғәлийән ТӨХФӘТУЛЛИН.**
**Шишмә районы**
**Түбәнге Хәжәт ауылы.**

✓ *Истихар намаҙын уҡығас, хәҙрәт йоҡларға ята һәм төшөндә Аллаһы Тәғәләнең, совет ғәскәрҙәре тағы ла бер аҙымға ғына сигенһә, һуғыш Гитлерҙың еңеүе менән тамамланасағы хаҡындағы иҫкәртеүен аңғарта.*



*ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ*

**1942 йылда Сталинға, Аҡһаҡ Тимерҙең мавзолей-ҡәберен асыу һуғыш башланыуға сәбәпсе булған, тигән мәғлүмәт еткерәләр. Йәш сағында дини белем алған Сталин был хәлгә осраҡлы күренеш тип ҡарамай һәм тәрән борсолоу кисерә.**

# "НИ ШАГУ НАЗАД!"

## Был фарман нисек яҙылған?





Сталин бөйөк хәрби етәксе Аҡһаҡ Тимерҙе ҡайтанан ерләү, мавзолейын тәртипкә килтереү өсөн 1 миллион һум аҡса бүлергә фарман бирә, шунда уҡ консультация өсөн Ислам динен тәрән белгән берәр инсанды табып килтерергә бойора. Ярҙамсылары Сталинға башҡорт халҡының рухи короле Зәйнулла ишандың улы мөфтөй Абдрахман хәҙрәт Рәсүлевтың кандидатураһын тәҡдим итә. Был хаҡта Асҡын районының Ҡашҡа ауылында йәшәүсе 85 йәшлек Ғәйзуллин Әғзәм Ғәйзулла улы һөйләгәйне. Әғзәм Ғәйзуллинды ул төбәктә ололап, хөрмәтләп Аҡ бабай тип атап йөрөтәләр. Уға илебеҙҙең барлыҡ төбәктәренән тиерлек кәңәш, башлаған эштәренә фатиха биреүен һорап киләләр. Аҡ бабай Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, күп тапҡырҙар яраланған, яуҙа уң ҡулын юғалтҡан. Ул йәшлегендә бик күп арҙаҡлы мосолмандар, шул иҫәптән Зәйнулла ишан Рәсүлев әл Нәҡшбәндиәнең улы Абдрахман Рәсүлев менән дә таныш була. Аҡ бабай, һөйләүҙәре буйынса, 1946 йылда ул хәрби госпиталдә ауыр яраларын һауыҡтырып, тыуған яғына ҡайтып килгәнендә Европа һәм Себер мосолмандары дини идаралығы мөфтөйө Абдрахман хәҙрәткә һуғыла. Хәҙрәт уға бик ҡыҙыҡлы ваҡиға хаҡында бәйән итеп, 1945 йылда донъя күргән "Ислам дине" тигән китап бүләк итә.

Хәҙер теге ваҡиға хаҡында. 1942 йылда фашистар Волгаға яҡынлай. СССР бик ауыр хәлдә тороп ҡала, сөнки Гитлер Волгаға үтә ҡалһа, быҒаса нейтралитет һаҡлаған илдәр фашистар яғында Советтар Союзына ҡаршы һуғышырға әҙер тора. Бына шундай саҡта Абдрахман хәҙрәт Юғары хәрби командующий И. В. Сталиндың ставкаһына килтерелә. Сталин хәҙрәткә Икенсе донъя һуғышының артабанғы ваҡиғаларын нисегерәк күҙаллауы хаҡында һорау бирә. Абдрахман хәҙрәт Сталиндың һорауына яуап биреү өсөн төндә махсус истихар намаҙы башҡарырға, шунан һуң Аллаһы Тәғәләнең яуабын ишетер өсөн ятып йоҡларға тейешлеге хаҡында белдерә.

Истихар намаҙын уҡығас, хәҙрәт йоҡларға ята һәм төш күрә. Төшөндә Аллаһы Тәғәләнең, совет ғәскәрҙәре тағы ла бер аҙымға ғына сигенһә, һуғыш Гитлерҙың еңеүе менән тамамланасағы хаҡындағы иҫкәртеүен аңғарта. Иртәгеһен хәҙрәт Сталинға төшөндә күргәндәрен һөйләп биргәс, Юғары хәрби командующий тарихта "Ни шагу назад!" тип аталған киң билдәле директиваһына ҡул ҡуя.

Ошо ярҙамы һәм СССР мосолмандарын фашизмға ҡаршы изге һуғышҡа әйҙәгәне өсөн Сталин Абдрахман хәҙрәткә ярҙам йөҙөнән дин тотоусыларҙың йолаларын башҡарыуҙа бер аҙ ташламалар яһай, ошо юҫыҡта 1945 йылда "Ислам дине" тигән китап сығарырға рөхсәт бирә. Әйткәндәй, был китап Сталиндың Указы буйынса сығарылған берҙән-бер дини китап иҫәпләнә.

"Һеҙ Аллаһы Тәғәләнең мәрхәмәтен тойғанығыҙ булдымы?" тип һораным мин Аҡ бабайҙан. "Аллаһы Тәғәләнең иң ҙур мөғжизәһе - Уның барыбыҙға ла мәрхәмәтле булыуында. Ә һуғышта иһә Аллаһы Тәғәлә миңә атыусы немец снайперының йөрәгенә шул мәрхәмәтлекте индерҙе, ул мине атып үлтермәне, ҡулымды ғына яраланы...", - тип яуапланы ул.



**Сәғит ИСМӘҒИЛЕВ.**

*ШАҢДАУ*

# ҺУҒЫШ ҠЫНА ҠУПМАҺЫН...

## ә ҡалған ауырлыҡтарҙы еңербеҙ

**Еңеү байрамы яҡынлашҡан көндәрҙә һәр саҡ яңыра торған хәтирә был. Үҙгәртмәй, биҙәмәй генә иҫтәлек итеп яҙырға булдым әле шуны.**

Васек исемле студент менән мине Прибалтикаға, "Янтарный" тип аталған ҡасабаға диплом алды практикаһына, гәрәбәләрҙән ювелир биҙәүестәр эшләү һөнәрен өйрә-нергә ебәрҙеләр. Барып етеп, дөйөм ятаҡҡа урынлашҡас, Рига ҡалаһынан практикаға килгән ҡыҙҙар Инара менән Инга исемле латыш студенттары менән дуҫлашып алдыҡ. Төрлө цехтарҙа шөғөлләнһәк тә, ашханаға, дөйөм ятаҡҡа бергә йөрөйбөҙ. Бер аҙна ваҡыт үттеме, юҡмы, йома көнө бер ҡатын минең эргәмә килеп: "Һеҙ Мәскәү ҡалаһында уҡыйһығыҙмы? Минең исемем Люба", - тип, миңә һүҙ ҡушты ла шунан: "Әйҙә, мин һине бөгөн өйөмә ҡунаҡҡа алып ҡайтам. Ашхана ризығы биҙҙереүсән ул," - тип өҫтәне (Был 1966-67 уҡыу йылы ине. Әлеге йәштәргә һөйләһәң ышамаҫтар ҙа әле. Кешеләр араһында шундай йылы мөнәсәбәттәр, бер кем бер кемдән дә шикләнмәй, тик изгелек хөкөм һөргән йылдар ине). Апайҙың саҡырыуынан баш тартмай ризалаштым. Ул ике бүлмәле фатирҙа йәшәй икән. Ире, ике улы менән танышып, ҡунаҡ булып, һыйланып, дөйөм ятаҡҡа ҡайттым. Был Люба исемле апай мине ниңә ҡәҙерләй икән, тигән уй, әлбиттә, башымдан һыҙылып үткеләй. Шулай дуҫлашып, йома һайын тигәндәй ҡунаҡҡа йөрөп, ике айлыҡ практикабыҙ ҙа үтеп бө-төп бара.

Һүҙ араһында бер аҙнанан ҡайтып китәсәгебеҙҙе, шулай уҡ ҡунаҡсыллығы, йомартлығы өсөн рәхмәт һүҙҙәремде Люба апайға әйттем. Апай бер аҙға өндәшмәй торҙо ла тын ғына: "Һиңә генә һөйләр серем бар, тыңла. Ун ете йәшлек кенә ҡыҙыҡай сағымда Виктор исемле егеткә кейәүгә сығырға бер аҙна ғына ваҡыт ҡалған көндәрҙә Бөйөк Ватан һуғышы башланып китеп, тормошобоҙҙағы бөтә хыялдарыбыҙҙы селпәрәмә килтерҙе. Виктор яуға китте. Һуңыраҡ мин дә яуға киттем һәм "тимер юлдары" ғәскәренә эләктем. Ул ҡайҙа ла, мин ҡайҙа - һуғыш юлдарында нисек табышаһың. Еңеү килгәс, эй эҙләнем Викторҙы, эй көттөм, әммә таба алманым. Йәшлек йылдары үтеп бара, тип, утыҙ йәшкә етеп барғанда кейәүгә сыҡтым. Үҙең күрәһең-дер, инде оло йәшкә етеп барһам да, улдарыма 12-15 йәш кенә. Иремдән йәшереп кенә почтаның "До востребования" бүлеге аша Викторҙы эҙләүемде дауам иттем. Бына күптән түгел уның иҫәнһау Мәскәүҙә йәшәүе хаҡында хәбәр килде. Ниндәй шатлыҡлы хистәр кисереүемде һүҙҙәр менән генә аңлатырлыҡ түгел. Хатта өйөмә ҡайтҡас, йә бер һауытты, йә икенсеһен ҡулымдан төшөрөп ебәрәм. Ирем һәйбәт кеше, үҙең һиҙгәнһеңдер, ул көлдө лә: "Әбекәйем, бөгөн бик йонсоу күренәһең", - тип шаяртыу менән сикләнде. Һинең Мәскәүҙә уҡыуыңды ишеткәс, бойомға ашмаҫ хыялдар йөҙәтә башланы. Әгәр мин Мәскәүгә барһам, поездан ҡаршы алып, ҡунаҡханаға тиклем оҙатып ҡуя алырһыңмы?" "Люба апай, әлбиттә. Бының бер ниндәй ауырлығы ла юҡ бит", - тип илай яҙып әйттем. Ә Люба апай хәтирәләрен һөйләгәнсе уның бөтә ҡулъяулығы күҙ йәштәренә сыланып бөткәйне инде.

Бер айға яҡын ваҡыт та үтмәне, "Ҡаршы ал. Люба апай" тип яҙылған телеграмма алдым. Әммә Мәскәүҙә ҡунаҡханаларға урынлаштырырлыҡ түгел икән. Таксиға ултырып, бөтә ҡаланы урап сыҡтыҡ. Шунан мин: "Люба апай, беҙҙең дөйөм ятаҡтың мөдире һәйбәт кеше, беҙҙә туҡтарға рөхсәт итер ул", - тип уны үҙебеҙгә алып ҡайттым. Икенсе көн иртән иртүк адресы буйынса Викторҙың фатирын эҙләп таптыҡ. Апай яҡындағы бәләкәй баҡсала ҡалды, мин ишек аҫҡан иргә: "Виктор Иванович бында йәшәйме? Һеҙҙе баҡсала Люба апай көтөп тора", - тип әйттем. Әле һаман да аптырайым Виктор ағайҙың үҙен тотоуына, бик күп йылдар үтеп китһә лә, һис онотолмай һаҡланғанмы икән Люба апайҙың исеме? Саҡ ҡына ҡаушау менән: "Ун минуттан сығырмын", - тине илле йәшкә етеп барған, сәстәренә сал төшкән ир. Викторҙы Люба апай янына оҙаттым да: "Апай, мин ҡайтам, адресымды белһегеҙ, көтөрмөн", - тип әйтеп ҡайтып киттем. Был тетрәндергес, ике ғашиҡтың егерме йылдан ашыу ваҡыт үткәс табышыу мәлен ҡарап торорға ҡыйманым.

Люба апай ул көндө беҙгә килмәне. Борсолманым. Виктор Иванович Люба апайҙы Мәскәүҙә аҙаштырмаҫ. Ә бер аҙнанан һуң хат алдым. "Башҡорт ҡыҙы, рәхмәтемде яҙырға ниндәй генә юғары һүҙҙәр теҙһәм дә, әҙ булыр. Виктор мине фронтовик дуҫтары аша ҡунаҡханаға урынлаштырҙы. Ҡайғылы-үкенесле, шатлыҡлы тойғолар менән ике көн һиҙелмәй ҙә үтеп китте. Һин уйлама, Виктор - ҡатынына, мин иремә хыянат итмәнек. Мин ун ете йәшлек оялсан ҡыҙыҡай, Виктор миңә ҡағылырға ла ҡыймаған егет халәтендә инек. Был йәшлегебеҙгә ҡайтыу байрамы булды. Һуғыш тамамланһа ла Виктор, өс йылдан ашыу бер госпиталдән икенсеһенә күсә-күсә, ауыр яраһынан һауыға алмай йонсоған. Мине эҙләгән. Таба алмағас: "Ҡатын-ҡыҙҙар ғаилә ҡорһа, фамилияларын үҙгәртә бит", - тип төңөлгән. Башҡорт балаһы, ҡунаҡҡа кил. Мин һиңә саҡырыу ҡағыҙы һалырмын. "Янтарный" ҡасабаһы диңгеҙ ярында, ил сигендә урынлашҡан, саҡырыуһыҙ үткәрмәйҙәр. Люба апайың". Апайҙың хатына "Килермен", тип яуап яҙғайным да, ҡыҙыу диплом яҡлау, һуңынан тыуған илемә ҡайтыу, яуаплы заказдар өҫтөндә эшләү, адресһыҙ йәшәү йылдарында апайҙың адресын юғалттым.

**Шулай итеп...**

**Бик күптәр өсөн Яңы йыл - иң яратҡан байрам, ә минең өсөн Бөйөк Еңеү байрамы иң беренсе урында тора. Быйыл да "Георгий" таҫмаһын иң түргә элеп ҡуйҙым - һәр саҡ илебеҙ өсөн, яугирҙар өсөн ғорурланыу хисе өҫтәп торһон. Әле магазинда, почтала оло йәшкә еткән халыҡты тыңлаһаң, тормош ауырлығы тураһында бер аҙ фекерләп алалар ҙа, һүҙҙәрен: "Һуғыш ҡына ҡупмаһын!" тип бөтөрә улар. Эйе, шулай булһын. Ҡалған ауырлыҡтарҙы бөтә ил менән еңербеҙ.**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов бар республика халҡын, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын Бөйөк Еңеү көнө менән ҡотланы.

✓ Өфө ҡала округы Советы рәйесе Ирек Ниғмәтуллин һәм Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын һәм тыл хеҙмәтсәндәрен, баш ҡала халҡын Бөйөк Еңеүҙең 64 йыллығы менән ҡотланы.

✓ Башҡортостан Республикаһы хәрби комиссары Тимофей Азаров йыйылыу пунктында журналистар менән осрашты һәм Рәсәй Ҡоралды Көстәренә хәрби хеҙмәткә саҡырыу кампанияһы барышы тураһында һөйләне. Билдәләнелеүенсә, быйылғы яҙғы саҡырыуҙа Башҡортостандан 10900 егет хәрби хеҙмәткә саҡырыласаҡ. Ә ил буйынса яҙғы саҡырылыу планы 305 мең кеше тәшкил итергә тейеш. Хәрби комиссар әйтеүенсә, армияға алыныусылар һаны йылдан-йыл арта барасаҡ. Шуға ла хәрби комиссариаттар алдына ҡуйылған бурыс та ҡатылана: улар егеттәрҙе хәрби хеҙмәткә әҙерләргә тейеш.

✓ Башҡортостан Республикаһы биләмәһендә юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген, пассажирҙар ташыуҙа төрлө һәләкәттәрҙе иҫкәртеү маҡсатында 10 майға тиклем Бөтә Рәсәй "Автобус" оператив-иҫкәртеү операцияһының тәүге этабы үтә. Республиканың дәүләт автоинспекцияһы Өфө халҡына юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен тупаҫ боҙоусы, иҫерек килеш автобус йә маршрут такси йөрөтөүсе шоферҙар хаҡында хәбәр итеүҙәрен һорап мөрәжәғәт итә. Мәғлүмәтте 233-27-31 (БР буйынса Эске эштәр министрлығы ЮХХДИ идаралығының дежур бүлеге) йәки 02 телефондары буйынса хәбәр итергә кәрәк.

✓ Донъяла сусҡа киҙеүе таралыу сәбәпле, Республика эпидемиологтары халыҡты сит илдәргә сығыуҙан тыйылып торорға саҡыра. Әйтеүҙәренсә, вирустың республика биләмәһенә эләгеү ҡурҡынысы әлегә юҡ, шулай ҙа һаҡланыу сараларын күреү ҡамасауламаясаҡ. Киҙеү осраҡтары күҙәтелгән илдәр менән тура-нан-тура бәйләнеш булмаһа ла, республика кешеләренең унда ялда йә командировкала булыуы бик мөмкин. Әлеге ваҡытта хәүефле вирусҡа юлды ябыу маҡсатында республикала ла бар саралар күрелә.

✓ 15 майҙа Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында танылған йырсы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Мәғфирә Ғәлиева үҙенең дуҫтарын һәм мондаштарын йыя.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# БЕР НӘМӘ ЛӘ ҮҘГӘРМӘГӘН ТӨҪЛӨ,

## йәки Һуғыш һуғыштан нимәһе менән айырыла икән?

**Ишеткәнһегеҙҙер? Күргәнһегеҙҙер? Рәсәй телевидениеһы беҙҙә Еңеү көнө менән бик үҙенсәлекле итеп ҡотланы. "Яҙҙың ун ете миҙгеле"н беҙгә бүләк итте ул. Инде бер нисә тиҫтә йыл яҙ һайын ҡараған киносериал түгел ул хәҙер. Хәйер, тәү ҡарашҡа бөтәһе лә элеккесә кеүек. Шул уҡ тыныс һәм аҡыллы Штирлиц. Мәрәкә генә ҡыланған Мюллер. Йылмаяҡ Шелленберг. Гитлер һәм Сталин. Берлин һәм Берн. Бер юлы ике баланы күтәреп алған Кетрин Кэт. Яуыз "эсэс"тар. Әммә нимәһелер үҙгәргән төҫлө. Ысынлап та. Ул кинофильм бит хәҙер элеккесә аҡлы-ҡаралы түгел. Төҫлө. Буягандар "Яҙҙың ун ете миҙгеле"н. Төрлө-төрлө төҫтәргә. Әлбиттә, төҫлө ҡәләм ярҙамында ғына түгел. Компьютерҙы ла эшкә ҡушҡандар. Хәҙер мин "СС" офицерҙарының беләктәрендәге свастика төшөрөлгән таҫмаҡның төҫөн беләм. Башҡа иһә бер нәмә лә үҙгәрмәгән. Бөтәһе лә 36 йыл элек кеүек. Вячеслав Тихонов та йәш әле. Олег Табаков иһә малай кеүек кенә. Рәсәй телевидениеһы иһә буялған киносериалды пыр туҙҙырып рекламалай.**

Был кинофильмды ошолайтып "матурлау" кемгә кәрәк булды икән, тип уйлайым. Аптыранам. Аҡлы-ҡаралы кино кемгә оҡшамағандыр инде? Баш режиссер Лиознованы күрһәтәләр. Ул ҡаршы түгел һымаҡ. Ҡыуанып ултыра. Ә бына Санкт-Петербургтағы бер төркөм ветерандар был эшкә ҡаршы сыҡҡан икән. "Петербург һәм Ленинград өлкәһе коммунистары" төбәк-ара ойошмаһы кинофильмдың төҫөн үҙгәртеү менән шөғөлләнеүселәрҙе яуаплылыҡҡа тарттырып, күргән мораль зыян өсөн суд аша 1 миллиард һум алмаҡсы.

Тәүҙә төҫләндерәһегеҙ, тиҙәр улар. Шунан йәш быуынға оҡшайбыҙ, тип, уларҙың "заман телендә" яңынан тауыш яҙҙыра башларһығыҙ әле, тип белдерәләр икән. Ысынлап та, Штирлиц "Хайль!" тип әйтер урынына йәштәрҙең "олбан" телендә түрәләрҙе сәләмләй башлаһа, ә? Уйлаһаң, ундай мәғәнәһеҙлеккә юл ҡуйылмаҫ һымаҡ тойола. Хәйер, беҙҙең илдә теләһә нимә булыуы ихтимал. Рәсәй телевидениеһы "Яҙҙың ун ете миҙгеле"нән тыш, "Алышҡа тик "карттар" ғына бара" тигән кинофильмды ла буяған, имеш. Тиҙҙән күрһәтәсәк.

Сүтәки, йәмәғәт, кино, Владимир Ильич Ленин фекеренсә, сәнғәттәр араһында иң мөһимдәренең береһе. Әлбиттә, ул, беренсе сиратта, пропаганда һәм агитация хаҡында уйлаған. Әммә бынан тыш кино, ысынлап та, юғары сәнғәт. Рәссам, композитор, шағир, йәки яҙыусының әҫәре кеүек шәхси ижад емеше түгел. Ә сценарий авторы, режиссер, оператор, рәссам, композитор, актерҙар, ассистенттар, ярҙамсылар, тағы ла әллә күпме кеше менән бергә ижад ителгән әҫәр. Берләктә тыуҙырылыуы, ижад ителеүе уның ҡиммәтен, баһаһын бермә-бер арттырып ҡына ебәрә. Уны төҫлө фильмға әүерелдереү (хатта, баш режиссер рөхсәте менән булһа ла) билдәле рәссам Казимир Малевичтың "Ҡара квадрат"ын (халыҡҡа аңлайышлы һәм яҡыныраҡ булһын өсөн, әлбиттә) йәйгор төҫтәренә буяп ҡуйыу менән бер түгелме? Хәтерләүемсә, 1973 йылда, йәғни, "Яҙҙың ун ете миҙгеле" донъя күргән осорҙа, төҫлө фильмдарҙы төшөрөү күптән конвейерға һалынғайны. Тимәк, уны ижад итеүселәр кинофильмды махсус рәүештә һуғыш осорондағы кинохроника кадрҙарына яҡынайтыу өсөн аҡлы-ҡаралы итеп төшөргән булғандыр? Был, әйтәйек, Лев Николаевич Толстойҙың "Һуғыш һәм солох" романын бер ни тиклем ҡыҫҡартып, ҡайһы бер урындарын алып ташлап нәшер итеү, йәки ошо әҫәр нигеҙендә (бары тик йәш быуынға аңлайышлы булһын өсөн тип кенә!) комикс һүрәттәрен төшөрөү түгелме икән?

Хәйер, кино нимә ул? Бүстәк. Кинофильмдың элекке вариантын DVD-дискыларына ла табып була. Ал да рәхәтләнеп ҡара. Һинә бөрөү ҙә ҡамасауламаясаҡ. Тарихты матурлай башлаһалар, йәш быуынға аңлайышлыраҡ булһын тип уның ҡайһы бер биттәрен һылап-һыйпап, биҙәп-матурлап ҡуйһалар, нишләрбеҙ икән? Халҡыбыҙ хәтерендә ҡалған иң ауыр, ҡан ҡойошло, меңәрләгән китаптарҙа, йөҙәрләгән кинофильмдарҙа, шиғыр-поэмаларҙа тәфсирләп һәм тасуирлап һөйләнелгән һәм яҙылған һуғыштың нимәһен үҙгәртергә мөмкин икән, тип уйлайһығыҙмы? Бик теләһәң, мөмкин икән шул.

Ғөмүмән, беҙҙең элекке Ватаныбыҙ (СССР, тимәксемен) һуғышыуға әүәҫ булған икән, тигән һығымтаға килдем әле. Граждандар һуғышына күсеп киткән беренсе бөтә донъя һуғышын иҫәпкә алмаған хәлдә лә. Фин һуғышы, Халхин-Голдағы бәрелеш, Бөйөк Ватан һуғышы, Советтар Союзы ғәскәрҙәренең һәм хәрби кәңәшселәренең Корея ярымутрауындағы хәрби конфликтта һәм Америка-Вьетнам һуғышында ҡатнашыуы, Дамань утрауындағы ҡыҫҡа ваҡытлы һуғыш, ниһайәт, Афған һуғышы һәм яңы Рәсәй тарихындағы беренсе граждандар һуғышы - Чечня. Бынан тыш, Советтар Союзының хәрби кәңәшселәре Анголала, Сомалиҙа, Иракта, Кубала, Сирияла, хатта Ирландияла ("Ирландия республика армияһы" тигән террористик ойошмала) ярҙам күрһәткән.

Советтар Союзының 74 йыл "ғүмере" эсендә - 9 һуғыш. Һигеҙ йылға бер. "Тыныслыҡ һөйөүсе" тип көнө-төнө тәкрарлаған дәүләтебеҙ иң һуғышсаны булып сыҡты түгелме? 1917 йылдан алып 1991 йылға тиклем нисә йыл ғына тыныс шарттарҙа йәшәүебеҙ хаҡында уйланғанығыҙ булманымы? Туғыҙ һуғыштың береһе генә - Бөйөк Ватан һуғышы - ысынлап та азатлыҡ өсөн көрәш һәм ысын мәғәнәһендәге бөтә халыҡ һуғышы булды. Ҡалғандары иһә Советтар Союзы үткәргән халыҡ-ара сәйәсәттең әҙемтәләре. Дөрөҫөрәге, дипломатия урынына мылтыҡ ҡулланыу. Шуныһы ла бар - Бөйөк Ватан һуғышынан башҡа бер генә хәрби конфликтта ла Советтар Союзы еңеүгә өлгәшә алманы. Икенсе бөтә донъя һуғышы донъя ҡоролошон үҙгәртеү, яңы биләмәләргә, колонияларға эйә булыу, территорияларҙы киңәйтеү, ғөмүмән, иҡтисади мәсьәләләрҙе хәл итеү маҡсатында башланған булһа ла Советтар Союзы сиктәрендә ул Бөйөк Ватан һуғышына әүерелде. Был атама тәүге тапҡыр Иосиф Сталиндың 1941 йылдың 3 июлендә яңғыраған Өндәмәһендә ҡулланылған булған. Ә, әйтәйек, Афған конфликтын ватан һуғышы тип атап буламы? Ә Чечнялағы һуғыштарҙы? Бәлки, чечен халҡы өсөн ул ысынлап та ватан өсөн барған һуғыш булғандыр. Әммә беҙҙең өсөн - юҡ.

Ҡасандыр совет республикалары булған, бөгөн үҙ аллы дәүләттәргә әүерелгән территорияларҙың һәр береһендә тиерлек Бөйөк Ватан һуғышына һәм Еңеү көнөнә үҙенсәлекле ҡараш, башҡаларҙан айырмалы фекер. Һуғыш осоронда тулыһынса дошман ғәскәрҙәре аҫтында ҡалған Украина, Белоруссия, Латвия, Литва һәм Эстония был һуғышты һәм Бөйөк Еңеүҙе төрлөсә баһалай.

СССР-ҙың хоҡуҡи варисы булған Рәсәйҙә лә эштәр бик шәптән түгел. Подъездары, стеналары тулыһынса фашист свастикаһы менән "биҙәлгән" торлаҡ йорттарҙы күргәнем бар. Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Воронежда, Рәсәйҙең башҡа ҡайһы бер көнбайыш ҡалаларында баш күтәргән ҡулдарын өҫкә ташлап, "Хайль!" тип ҡысҡырып, "нацмен"дарҙы туҡмап үлтереп йөрөгән урыҫ фашистары кинофильмда түгел, ысынбарлыҡта бит.

Улай ғына ла түгел, Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булыусылар хөрмәтенә Советтар Союзы замандарында уҡ илдең һәр бер ҡалаһында һәм ауылында урынлаштырылған һәйкәл-обелискылар бөгөн емерек, насар хәлдә. Бөтәһе лә түгел, әлбиттә. Әммә, бар. Шул емерелгән обелискыларға ҡарап үҫкән быуын "Алға! Ватанды һаҡларға!" тигән оранға нисегерәк яуап бирер икән? Атаһын һөймәгәндә, улы һөймәҫ, тигәндәй, ҡартаталарының иҫтәлеген үлемһеҙ батырлыҡтарын оноҡҡан һәм онотторорға маташҡан дәүләткә ни ышаныс бар инде...

Һәм һуғыһы. Бөгөн дәүләт ҡиммәлендә төрлө быуын ветерандарын бер таҡтаға ҡуйып ҡарау бара. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары менән Афған һуғышы һәм һуңғы йылдарҙа хатта Чечня конфликтында ҡатнашыусылар барыһы ла хәрби конфликттарҙа ҡатнашыусылар статусына эйә булып бара. Дөрөҫмө был? Ябай һалдат күҙлегенән сығып ҡарағанда-дөрөҫ. Тегеләр ҙә, былар ҙа ҡан ҡойған, йәнен-тәнен йәлләмәй алышҡан. Тегеләр ҙә, былар ҙа батырлыҡ күрһәткән. Дәүләткә биргән хәрби антын тоғро үтәгән, изге бурысын икеләтә-өслөтә ҡайтарған. Сәйәсмәндәрҙең, дәүләт етәкселәренең ҡарарҙары өсөн улар яуап бирмәй бит. Ә шулай ҙа Афғанстан ише мәғәнәһеҙ һуғыштарҙа артабан ҡатнашмаҫ, Чечня ише ҡан ҡойоштарҙы ҡабатламаҫ өсөн уларға тейешле баһаны бөгөндән үк биреп барыу мотлаҡ. Бойҙайҙы кәбәктән айырыу кәрәк, тимәк. Юғиһә, Рәсәй ғәҙәтендәгесә, бер үк "тырмаға" ҡабат-ҡабат баҫасаҡбыҙ ҙа баҫасаҡбыҙ. Башыбыҙ тамам ярылғансы.

Кинофильмдарға килгәндә инде, уларҙың мөхәббәт тураһындағыларын ғына төҫлө итеп төшөрөргә кәрәк. Яҡты ҡояш, сағыу сәскәләр, аяҙ күк, һылыу ҡыҙҙарҙың гүзәллеге үҙҙәренең тәбиғи төҫтәрендә күренһен өсөн. Ә һуғыш тураһындағы кинофильмдар иһә тик аҡлы-ҡаралы ғына булһын. Мәңгелек алышты - Аҡ менән Ҡараның, Яуызлыҡ менән Изгелектең көрәшен асығыраҡ һынландырыр өсөн.

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Рәсәйҙә әсәлек капиталының күләме 312162 һумғаса арттырылды. Индексациялау 2009 йылдың 1 ғинуарынан башҡарыласаҡ. БР буйынса Пенсия фонды бүлексәһенән хәбәр итеүҙәренсә, әсәлек капиталы сертификаты алғандарҙың барыһы ла, шулай уҡ аҡсаны йорт төҙөүгә йә һатып алыуға тотонол өлгөргәндәр ҙә өҫтәмә 12,4 мең һумға иҫәп тота ала.

✔"Парктар маршы" сараһы сиктәрендә "Асылыкүл" операцияһы старт алды. Уны Дәүләкән районы хакимиәте менән берләктә БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы үткәрә. Акция күл тирәһендәге экологик хәлгә йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итеү һәм Асылыкүлде бысраныуҙан һаҡлауҙы ойошмаларға булышлыҡ итеү маҡсатында ойошторола. Башҡа саралар менән бергә күл тирәһен таҙартыу эштәренә 100-ләп кеше йәлеп ителәсәк.

✔Быйыл беренсе кварталда Республика халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәге 14-18 йәштәге 4800 ҡыҙ һәм егетте эшкә йәлеп иткән. Ваҡытлыса эшкә урынлашҡандар араһында инвалидтар, етемдәр һәм эске эштәр органдарында иҫәптә торғандар бар. Эш таба алмаған 217 өлкән кеше лә ваҡытлыса эшкә урынлаштырылған.

✔Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһында медицина ярҙамының махсуслаштырылған төрө - телемедицина үҙәге булдырылды. Был - ауырыуҙарҙы диагностикалауҙа юғары квалификациялы белгестәр ярҙамына теләгән ваҡытта мөрәжәғәт итеү мөмкинлеге тигән һүҙ. Яңы үҙәктә хатта Мәскәүҙең һәм илдең башҡа төбәктәренең билдәле белгестәре менән консультация ойоштороп буласаҡ.

✔Башҡортостанда "Хәүефһеҙ йорт, хәүефһеҙ подъезд, хәүефһеҙ фатир" иҫкәртеү операцияһы старт алды. БР буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, был операцияға меңләп хоҡуҡ һаҡлау органы хеҙмәткәре тәғәйенләнгән, улар халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барырға, шәхси мөлкәтте һаҡлау буйынса күрһәтелгән хеҙмәт төрҙәре тураһында мәғлүмәт бирергә тейеш.

✔9-19 майҙа Стамбулда "Йәшлек көндәре" тип аталған Театр коллективтарының халыҡ-ара фестивале үтә. Был сарала Башҡортостандан Милли йәштәр театры "Диләфрүҙгә дүрт кейәү" спектакле менән ҡатнашасаҡ.

✓ *Рәсәй Федерацияһының Енәйәт Кодексының 322-се "Законһыҙ миграция ойоштороу" статьяһына ярашлы, суд закон боҙоусыны 2 йылға тиклем иркенән мәхрүм итергә, йәиһә ҙур күләмдә штраф һалырға тейеш.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## БЕҘҘЕКЕЛӘР - ЯРЫМ ФИНАЛДА

**Юҡ, беҙҙекеләр өсөн донъя беренселегендә ярым финалға сығыу (күп хоккей уйыны белгестәре фараз итеүенсә) һис тә еңел булманы.**

Беренсе осорҙа уйындың 0:0 иҫәбе менән тамамланыуы ла Белорусь йыйылма командаһының үтә етди дәғүәсе булыуын гәмәлдә иҫбат итте. Ә инде икенсе осорҙоң тигеҙ иҫәп менән (3:3) бөтөүе юлаевсыларҙың тренерҙарын хәүефләндерҙе генә. Улар ҡапҡасы Илья Брызгаловты юлаевсы Александр Еременко менән алмаштырырға мәжбүр булды. Алмаштырыу бик урынлы булып сыҡты, белорустар күпме генә тырышһа ла, ҡапҡаны “аса” алманы. Ә өсөнсө осор барышында Рәсәй командаһының иң яҡшы уйынсыһы Илья Ковальчук 4-се, йәғни еңеү шайбаһын индерә алды.

Рәсәй хоккейсыларына ярым финалға сығыу плей-офф серияһының беренсе матчында еңел булманы. Быны шулай буласағын баш тренер В. Быков алдан уҡ әйткәйне инде. Уның белорустарҙың нисә тапҡыр инде донъя чемпионатында чемпион булған фин хоккейсыларын отоуы беҙҙе һағайтырға, белорус уйынсыларының плей-офф серияһына килеп етеүен осраҡлы хәл, тип ҡарамаҫҡа, тип иҫкәртеүе юҡҡа түгел.

Белорусь йыйылма командаһы менән ифрат көсөргәнешле уйын донъя беренселегендә, бигерәк тә плей-офф серияһында бик ғәҙәти, нормаль хәл булыуын тағы бер тапҡыр иҫбат итте.

Ярым финал, ә инде 10 май көнө финал матчтарында ла юлаевсылар тағы ла тырышыраҡ, ҡыйыуыраҡ һәм оҫтараҡ уйнаһындар, тип теләйбеҙ.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## ТӘРТИП БОҘОУСЫЛАР... КӘМЕМӘЙ

**Быйыл өс ай эсендә Башҡортостан Республикаһы буйынса Федераль миграция идаралығы тарафынан миграцион теркәүгә 15 меңдән ашыу сит ил граждандары ҡуйылған. Былтырғы менән сағыштырғанда республикаға килеүсе миграннтарҙың әҙәйеүе күҙәтелә. Был, әлбиттә, донъялағы иктисади көрсөк менән дә бәйле.**

Мигранттар һаны кәмеү менән, ҡыҙғаныска ҡаршы, улар араһында тәртип боҙоусылар һаны кәмемәй. Апрель аҙағында республиканың миграция хеҙмәткәрҙәре тарафынан 300-ҙән ашыу объект тикшерелгән, 200-гә яҡын протокол төҙөлгән. Бигерәк тә сит ил граждандары араһында Рәсәйгә инеү, йәшәү һәм миграцион теркәүгә тороу тәртиптәрен һанға һуҡмау кеүек осраҡтар киң таралған. Мәҫәлән, миграция хеҙмәткәрҙәре Нефтекама ҡалаһының бер предприятиеһында 4 Ҡытай граждандары эшләп йөрөүен асыҡлаған. Әммә был гастарбайтерҙар тикшереүселәргә эшләүгә һәм республикала законлы йәшәүгә рөхсәт биреүсе бер документ та күрһәтә алмай. Бындай осраҡта иң тәүҙә закон алдында предприятие директоры яуап бирәсәк, сөнки ул документтары тейеш булмаған сит ил граждандарын эшкә алырға тейеш түгел. Рәсәй Федерацияһының Енәйәт Кодексының 322-се "Законһыҙ миграция ойоштороу" статьяһына ярашлы, суд закон боҙоусыны 2 йылға тиклем иркенән мәхрүм итергә, йәиһә ҙур күләмдә штраф һалырға тейеш. Былтыр Өфөлә ошоға оҡшаш осраҡ теркәлгәйне, яңыраҡ суд үҙенең шәхси йортон төҙөүгә 5 сит ил граждандарын законһыҙ рәүештә йәлеп иткән хужаға 40 мең һум штраф һалырға, тигән ҡарар сығарҙы.

**Салауат ХИЛАЛОВ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Бөрйән районы баш ҡалабыҙҙан алыҫ ятһа ла, тормош ағышын үҙ иңендә ихлас тойоп, заман менән бергә йәнәш атлай. Бында йәшәүсе халыҡта мәҙәниәткә, белемгә ынтылыш көслө. Бына әле лә республикала беренселәрҙән булып бөрйәндәр районындағы талантлы балаларҙы барланы, уларҙың нимәгә һәләтле булыуын тағы бер тапҡыр һынаны һәм күңелдәрен үҫтерҙе.**

# ҺӘЛӘТЛЕ БАЛАЛАРҘЫ...

## ваҡытында үҫтерә белеү кәрәк

Район мәктәптәренең уҡыу алдынғылары, төрлө кимәлдәге олимпиада һәм конкурстарҙа, спорт ярыштарында еңеүселәр йыйылған "Һәләтле йәштәр - илебеҙҙең киләсәге" тигән форум Йәштәрҙең башланғыстарын үҫтереү йылына арналған иң күркәм сараларҙың береһе булып ҡалыр, моғайын. Быны тамашаға йыйылған халыҡ та, шулай уҡ килгән ҡунаҡтар ҙа раҫланы.

Район мәктәптәре, балалар баҡсалары ойошторған бай йөкмәткеле күргәҙмәләр теҙмәһе һәр кемдең иғтибарын йәлеп итте. Иҫке Монасип мәктәбенең һынлы сәнғәт уҡытыусыһы Сабит Бикмәтовтың үҙенең һәм уҡыусыларының ҡул эштәре, Байназар мәктәбенең милли кейемдәре, Ғәлиәкбәр мәктәбенең "Бал ҡортонроң балы бар, балға тиклем наҙы бар" фотостенды, Яуымбай мәктәбенең станоктарҙа һуғылған балаҫтары был төбәктә ысын оҫталар, алтын ҡуллы кешеләр йәшәүен, иң мөһиме, балалар ҡулы менән халҡыбыҙҙың борондан килгән һөнәр өлгөләре тергеҙелеүен раҫланы. Байназар мәктәбенең "Азамат" өлгөлө бейеү ансамбле сығышы юғары профессиональ кимәлдәге сәнғәт өлгөһө менән ҡыуандырҙы. Й.Ш. Иҫәнгәлин етәкселегендәге ҡурайсы балалар сығышын һәр кем иҫе китеп ҡарап ултырҙы. Әбделмәмбәт мәктәбенән Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, һәүәҫкәр композитор Миннур Ҡасимова етәкләгән вокаль ансамбленд сығышы, "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәренең йыры сарağа сағыу биҙәк өҫтәне.

Һәр бер сабый тәбиғәттән талантлы булып тыуа. Педагогтың төп бурысы шул талантты ваҡытында күрә, үҫтерә, дөрөҫ йүнәлеш бирә белеү. Был йәһәттән район уҡытыусыларына һүҙ тейҙерерлек түгел. Улар тәрбиәләгән уҡыусылар район кимәлендә генә түгел, ә республика кимәлендә төрлө ҡаҙаныштар яулай. Һәләтле балаларҙы дәртләндереү маҡсатында яҡшы уңыштарға өлгәшеүсе уҡыусыларға район хакимиәте башлығы стипендияһы түләнә. Аҫҡар урта мәктәбенән Гөлйөҙөм Кинйәбаева, Байназар урта мәктәбенән Фирҙәүес Аҫылбаева, Ғәҙелгәрәй мәктәбенән Гөлфинә Йәнһүҙина, Яңы Собханғол урта мәктәбенән Ләйсән Теләүбаева лайыҡ ошо стипендияға. Уҡыуҙа, спортта юғары уңыштарға өлгәшкән уҡыусылар йыл да Яңы йыл байрамы алдынан уҙғарыла торған Президент шыршыһы байрамында ҡатнаша. Ана шулай ваҡытында талантларын күреп дәртләндерһәк, дөрөҫ йүнәлеш бирһәк, киләсәктә был уҡыусылар тағы ла ҙурыраҡ уңыштарға өлгәшер, бейегерәк үрҙәр яулар.

**Шулай итеп, тәүге тапҡыр уҙғарылған форум-осрашыуҙың артабанғы дауамын күрергә аҙһын. Бындай осрашыуҙарҙа уҡыусылар күңеленә өмөт, хыял, үҙ-үҙенә ышаныс орлоҡтары һалына. Ошо орлоҡтар артабанғы тормош юлында изге шытымдар бирә. Ошо йәһәттән ҡарағанда, был сараны ойоштороусылар үтә мөһим эш башҡарҙы.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## ХӘСТӘРЛЕККӘ ЛАЙЫҠТАР

**"Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары тураһында хәстәрлек күреү, уларҙың социаль проблемаларын хәл итеү, адреслы ярҙам күрһәтеү - беҙҙең төп бурысыбыҙ, - тине журналистар менән осрашыуҙа Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов. - Инвалидтар һәм Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға медицина ярҙамы күрһәтеү ҡаланың дауалау-профилактика учреждениелары эшенең өҫтөнлөклө йүнәлеше һанала".**

2009 йылдың 1 ғинуарына ҡарата бирелгән мәғлүмәттәр буйынса, Өфөнөң һаулыҡ һаҡлау системаһы учреждениеларының диспансер күҙәтеүендә 1243 инвалид һәм 2043 һуғыш ветераны иҫәптә тора. Улар 260 урынға иҫәпләнгән стационар ярҙам күрһәтеүсе махсус ҡала госпиталендә, шулай уҡ ҡаланың дауалау учреждениеларында булдырылған махсус палаталарҙа ла дауаланыу үтә ала. Аврора һәм Батыр урамдары киҫелешендә ветерандар өсөн тағы ла бер госпиталь төҙөү ҡаралған.

Һуғыш ветерандарын кәрәкле дарыуҙар менән тәьмин итеү ҙә мөһим мәсьәләләрҙең береһе һанала. Өфө халҡына социаль хеҙмәт күрһәтеү үҙәктәре бушлай фатир йыйыштырыу, аҙыҡ-түлек менән ярҙам итеү, театрҙарға йөрөтөү кеүек акциялар үткәреп тора.

БР буйынса Пенсия фонды бүлексәһе, БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, баш ҡалала 256 600 пенсионер йәшәй. Уларҙың 3906-һы - Бөйөк Ватан һуғышы ветераны һәм инвалидтар, 2-һе - Советтар Союзы Геройы, 171 кеше "Блокадалы Ленинградта йәшәүсе" билдәһе менән бүләкләнгән, 4175 кеше - Бөйөк Ватан һуғышында һәм хәрби хәрәкәттәрҙә һәләк булыусыларҙың ғаилә ағзаһы, 6763 хәрби хәрәкәт ветераны, 23 Социалистик Хеҙмәт Геройы, 4 Хеҙмәт Даны орденының тулы кавалеры, 17 тыл хеҙмәтсәне иҫәпләнә.

Ветерандарҙың торлаҡ хәлен яҡшыртыу буйынса ла даими эш алып барыла. Былтыр 49 ветеранға фатир бирелһә, быйыл 64 ветеранға фатир аҫкыстары тапшырылды.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә баш ҡала халҡының ОРВИ һәм грипп менән ауырыу осраҡтары тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Быйыл эпидемик осорҙа төрлө финанс сығанаҡтары иҫәбенә ошо ауырыуҙарға ҡаршы 190 мең кешегә, предприятие һәм ойошмалар аҡсаһы иҫәбенә 65 мең кешегә, шулай уҡ ҡала округы хакимиәте бүлгән 2 миллион һумға тағы ла 25 мең кешегә прививка эшләнгән.

✓Өфөлә тағы бер эшҡыуарлыҡ мәктәбе асыласаҡ. Ошондай уҡ мәктәптәр Ишембай, Туймазы райондарында, Күмертау, Октябрьский, Нефтекама ҡалаларында эшләй. Өфөләге эшҡыуарлыҡ мәктәбендә уҡырға теләүселәр 15 майға тиклем анкета тултырырға һәм үҙенең эшҡыуарлыҡ идеяһын яҡларға тейеш. Анкетаны Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 10-сы йорт, 27-се бүлмә адресы буйынса алырға була. Белешмәләр өсөн телефон: 251-57-11.

✓Апрелдә Рәсәйҙең эре ҡалаларында торлаҡ йорттарға хаҡтар төшөүе күҙәтелде. Мәҫәлән, 500 меңдән ашыу халыҡ йәшәгән иң эре 35 ҡала бер кв. метр торлаҡ хаҡы 42700 һум тәшкил итте. Ә Өфөлә бер кв. метр торлаҡ хаҡы 42 мең һум тора һәм ул был күрһәткес менән Рәсәй буйынса 19-сы урынға сыҡты. Бер квадрат метр өсөн 33 мең һумға тиклем төшкән ҡалаларҙа тотороҡлолоҡ һаҡлана һәм хаҡтар башҡаса төшөрөлмәйәсәк, ти экспертар.

✓Республикала эшһеҙлек буйынса пособие арта бара. Ғинуарҙа ул 2131 һум булһа, февралдә - 2294 һум, март аҙағында 2437 һум тәшкил иткән. Был хеҙмәткә һәләтле халыҡтың йәшәү минимумы күләменең 57 проценты тигән һүҙ. Тәүге кварталда эшһеҙлек буйынса пособиены 41,5 мең кеше алған.

✓Еңеү паркында Советтар Союзы Геройы генерал Таһир Кусимовтың таш һыны урынлашасаҡ урынға нигеҙ ташы һалынды.

✓БР Хөкүмәтенең 2007 йылдағы бойороғо менән 1 майҙан 30 сентябргә тиклем ҡала яны тимер юл транспортында йөрөүсе социаль ярҙамға мохтаж айырым категория граждандарға 50 процентлы ташлама ҡаралған. Льготалы билеттарҙы тимер юл транспорты кассаларында алырға мөмкин.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МИЛЛӘТЕМДЕҢ РАДИОҺЫ...

## алдынғы булһын

**"Башҡортостан" радиоһының "Юлдаш" каналы тапшырыуҙарын олоһо ла, кесеһе лә яратып тыңлай. 7 майҙа үткән Радио көнө алдынан республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә йәшәүсе даими тыңлаусыларға "Һеҙ ниндәй мәғлүмәт сараһына өҫтөнлөк бирәһегеҙ? Радиола барған тапшырыуҙар һеҙгә ниндәй фәһем бирә, улар һеҙгә йәшәргә ярҙам итәме, әллә бошондорамы?" тигән һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек.**



**Хәмиҙә БАРЛЫБАЕВА, Өфө ҡалаһы:** Мин гәзит-журнал уҡый алмайым, сәләмәтлегем насар, ә "Юлдаш" каналын асылғанынан алып, туғыҙынсы йыл тыңлайым. Баштараҡ журналистарҙың тәжрибәһе лә етешһеҙерәмдәй ине, әммә йәйлап шымарҙылар, оҫталыҡтары артты. Даими тыңлаусы булараҡ, ҡайны берәһененң тел байлығына, фекер киңлегенә һоҡланып ҡуям.

Элек йышыраҡ үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ғына ҡайнаһаҡ, хәҙер донъя яңылыҡтарын да бирә башланылар - был бик яҡшы, был тыңлаусының аң кимәлен генә тәрбиәләп ҡалмай, алға китеш тә бирә. Һәр саҡта ла тик ыңғай хәбәрҙәр генә һөйләйҙәр, киләсәккә ышандыра беләләр.

Үҙем халҡым өсөн янып йөшәүселәрҙең береһе булараҡ, милләтемдең радиоһы алдынғы, ә унда эшләгән кешеләре лә тик алға ынтылышлы һәм юғары аңға эйә булырға тейеш, тип уйлайым һәм шундай киң ҡарашлы егет-ҡыҙҙарҙы хөрмәт итәм. Нияз Алсынбаев халыҡ өсөн кәрәк нәмәләр эшләй, Зөлфиә Рәхмәтуллинаның һәр күренешкә үҙ ҡарашы бар, әле "Аулаҡ"ты алып барыусы Марсель Вәхитов менән Марсель Байдәүләтов та журналист, алып барыусы булараҡ ныҡ үҫте. "Юлдаш"тарҙың барыһын да байрамдары менән ҡотлайым, уңыштар теләйем.

**Флүрә ЯМАЛЕТДИНОВА, Ҡыйғы районы:** Илдә булған яңылыҡтарҙы тәүҙә радионан тыңлайым, өлгөрмәй ҡалһам, аҙаҡтан гәзиттән уҡыйым. Телевизорҙы ҡарарға, гәзитте уҡырға ваҡыт кәрәк, ә радионы эш эшләп йөрөгәндә лә тыңларға була.

Ҡасан, ниндәй тапшырыу булыуын белеп бөткәнбеҙ, һәр кем үҙ зауығына ҡарап, һайлап тыңлай ала. Мәғлүмәтте бит ул кем һөйләүенә ҡарап та ҡабул итәһең. Үҙем тел уҡытыусыһы булараҡ, кем үтемле итеп һөйләй белә, шуныһына иғтибар итәм. Тапшырыуҙарҙы әҙерләүселәр йәш кенә булһалар ҙа, беҙҙең кеүек ололарға ла илһам бирерлек, йөрәгенә үтеп инерлек мәғлүмәтте ҡайҙан табалар икән, тип аптырайым ҡайһы берҙә. Уларҙың барыһына ла һаулыҡ, ғаилә бәхете теләйем, тағы ла батырыраҡ булһындар.

**Рәфҡәт ҒИБӘҘӘТОВ, Әбйәлил районы:** Үҙебеҙҙең "Юлдаш" радиоһы булмаһа, йәшәүе бигерәк күңелһеҙ булыр ине. Уны телен яратҡан һәр кеше тыңлайҙыр, тип уйлайым. Эшкә барғанда, ҡайтҡанда үҙемде ҡыҙыҡһындырған бар һорауҙарға ла яуап алып өлгөрәм. Һауа торошо тураһында мәғлүмәт, төрлө белгестәр менән кәрәкле әңгәмәләр, файҙалы кәңәштәр, балалар өсөн тапшырыуҙар бик фәһемле. Байрамдары мөбәрәк булһын, барыһына ла һаулыҡ һәм ижади уңыштар теләйем.

**Галина СУФИЯНОВА, Яңауыл ҡалаһы:** Мин үҙем милләтем буйынса удмурт булһам да, "Юлдаш" радиоһын бик яратам, хәҙер телевизор ҡарағаным да юҡ. Алып барыусыларҙың һәр береһен тауыштарынан танийым, бигерәк тә "Ҡунаҡ өйө" оҡшай, уны бер тапҡыр ҙа тыңламай ҡалдырғаным юҡ. Донъя көткәндә радио төбөндә генә ултырып булмай, шуға ла һуңғы ваҡытта кеҫә телефонына ҡолаҡсындар ҡуйып ебәрәм дә, баҡсала эшләгәндә, себештәр тәрбиәләгәндә лә радио тыңлап йөрөйөм. Башҡа радио тыңлаусылар менән дуҫлашып та бөттөк, Ҡырғыҙ-Миәкәнән Рәзифә Сафина, Өфөнән Минзилә Яҡупова менән аралашып, байрамдарҙа берберебеҙҙе ҡотлашып йәшәйбеҙ. Береһен дә айырып әйткем килмәй, "Юлдаш"тарҙың - тоғро юлдаштарымдың барыһын да байрамдары менән ҡотлап, иң изге теләктәремде еткерәм. Ҙур рәхмәт уларға.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

## ЕТЕ РАЙОН

* * *

**СОВЕТ РАЙОНЫның йәш хоккейсылары Воронежда үткән Бөтә Рәсәй йәш хоккейсылар ярыштарында ҡатнашты.**

Райондың М.М.Азаматов исемендәге балалар хоккей клубының йәш хоккейсылары "Алтын шайба" клубы ойошторған был ярыштың бөтә этаптарын да уңышлы үтеп, илдең көслө командалары араһында беренсе урын яулауға өлгәште.

* * *

**КИРОВ РАЙОНЫның 1-се һәм 46-сы дауаханаларында һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә мәғлүмәт системаларын индереү маҡсатында пилот проекттары сафҡа инделәрде. Дауаханалағы яңы ҡоролмалар менән танышыу өсөн БР Президенты Мортаза Рәхимов та килде.**

Бында ойошторолған электрон регистратура аша хәҙер ауырыуҙар табиптарға телефон йәки интернет аша яҙыла, әгәр ҙә кәрәкле табип юҡ икән, электрон система, икенсе дауаханаларҙың белгестәренә лә йүнәлтмә бирә ала. Ошондай проекттарҙы тиҙҙән ҡаланың башҡа дауаханаларына ла ҡуйыу ҡаралған.

* * *

**КАЛИНИН РАЙОНЫнда яңыраҡ асылған "Шаҡша" сауҙа-йәрминкә комплексы уңышлы эшләй башланы.**

Йәрминкә Өфө-Шаҡша автомобиль юлы буйында урынлашҡан. Ул көн һайын иртәнге 9-ҙан киске 20 сәғәткә тиклем һатып алыусыларҙы хеҙмәтләндерә. Бында аҙыҡ-түлек, баҡса инвентарҙәре, төҙөлөш материалдары һәм яҡын-тирә райондарҙан килтерелгән һөт аҙыҡтары, ит, йәшелсә-емеш һатып алырға була. Тиҙҙән бында автомобиль ҡуйыу урыны, флористика үҙәге һ.б. төҙөү ҙә ҡаралған.

СОБХАНАЛЛА!

## ФАТИРЛЫ БУЛДЫЛАР

**Баш ҡалабыҙҙа һуңғы өс йылда ғына 83 һуғыш ветеранына фатир асҡыстары тапшырылғайны. Быйыл, Бөйөк Еңеүҙең 64 йыллығын байрам иткән көндәрҙә иһә, беҙҙең еңеүсе яугирҙарыбыҙға 64 фатир бүленде. Шулар араһынан 6 фатирға Өфөнөң Дим биҫтәһендә йәшәүсе ветеран-яугирҙар лайыҡ булды. Дим районы хакимиәте башлығы Зыфар Ҡасим улы Хәкимов һәр ветерандың йортона барып, уларға тантаналы рәүештә яңы фатирға сертификаттар тапшырҙы.**

Сал сәсле, йөҙҙәрен һанап бөткөһөҙ һырҙар баҫҡан өләсәйҙәр һәм олатайҙар бындай бәхетте ололарға ғына хас баҫалҡылыҡ һәм моңһоу ҡыуаныс менән ҡабул итте. Кемдер тамағына килеп ҡыҫылған төйөр арҡаһында өнһөҙ ҡалды, кемдер рәхмәттәр уҡып, йортона килеп тулған ҡунаҡтарҙың күҙҙәренә баҡты.

"Беҙ күргәнде башҡа берәү ҙә күрмәһен. Еңеү көнө беҙҙең өсөн оло байрам ғына түгел, ә яу ҡырҙарында ҡалған фронтташ дуҫтарыбыҙҙы иҫкә алыу ваҡыты ла ул. Ошондай бәхетте улар ҙа күрә алһа ине", - тип көрһөндө Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Ғәни Ғабдулла улы Бәшәрев. Ул фронтҡа ун алтыһын яңы тултырып, 1943 йылда алына. Уны Свердловск ҡалаһында урынлашҡан танк училищеһына уҡырға ебәрәләр. Хәрби әҙерлек үткәс, Ғәни Ғабдулла улы II Белорус фронтына маршал Рокоссовский етәкселеге аҫтындағы танкылар гәскәренә эләгә. Бөйөк Еңеүҙе Берлинда ҡаршылай. "Һуғыш тамамланһа ла барыбер тыныс түгел ине әле. Еңеү көнөн байрам итеп ултырғанда ҡайҙандыр ҡапыл фашист танкыһы килеп сығып, илленән ашыу кешенең ғүмерен ҡыйҙы. Ниндәй ҡурҡыныстарҙы үтеп сығып, тыныс тормошта инде иркен тын алам тигәндә, фронтташтарымдың шулай ғүмерҙәре өҙөлөүе беҙҙе ныҡ тетрәндерҙе", - тип һөйләне беҙгә ветеран.

- Өфө ҡала округы хакимиәтенә беҙҙе шундай ҙур бүләк менән шатландырғаны өсөн сикһеҙ рәхмәтлебеҙ! - тине һәр ветеран шатлығы менән уртаҡлашып. Утлы һуғыш йылдарында аҙымлап еңеүгә, тыныслыҡҡа атлаған ветерандарыбыҙға түләр бурысыбыҙҙың был бәләкәй бер өлөшө генә. Тәү сиратта беҙ



был бурысты һүнмәҫ хәтер, һанһыҙ юғалтыуҙар менән яуланған Тыныслыҡты һаҡлау менән ҡайтарырға тейешбеҙҙер. Шулай булыр ҙа.

**Гөлсинә МИРЗИНА.**

## Б Ә Л Ә К Ә Й Ҡ А М У С

## Азияның билдәле шарлауыҡтары



Был китға шарлауыҡтары тураһында беҙ бер нәмә лә ишеткәнебеҙ булмаһа ла, уның һәр илендә тиерлек шарлауыҡ бар, улар тураһындағы риүәйәт-легендалар телдән-телгә күсеп йөрөй.

Көньяҡ-Көнсығыш Азияның иң ғәжәйеп бер илендә, Таиландтың иң көньяғында, һыу ағымы филдең һуҡҡы тешенә оҡшағаны өсөн Нга-Чанг атамаһын йөрөткән шарлауыҡ урынлашҡан. Билдәле булыуынса, бында йәшәгән халыҡ филдең һуҡҡы тешенә табына һәм был исемде шарлауыҡ урынлашҡан ҡурсылыҡ та алған.

Азияның тағы ла бер бейек шарлауығы Һиндостанда, Шаравати йылғаһында урынлашҡан. Ул - Гепсоппа шарлауығы, "уктан ярылған" тигәнде аңлата. Боронғо һинд эпосы "Рамаяна"ла Рама тылсымлы йәйәнән уҡ атып, Ерҙе тишә һәм ер аҫты батшалығының һыуҙарын иреккә сығарып, йылғаға башланғыс бирә. Дүрт каскадтан торған 255 метрлыҡ шарлауыҡ бик матур, шуға ла ул шағирҙар теленән төшмәй. Һәр каскадтың үҙенең исеме бар: беренсеһе, араларындағы иң матуры Аҡһыл йөҙлө сибәр, уны икенсе төрлө Һиндостан королеваһы тип тә йөрөтәләр, икенсеһе - Ракета, өсөнсөһө - Йәйгор, дүртенсеһен, иң көслөһөн Илаҡ тип атайҙар. Ямғырҙар ваҡытында шарлауыҡта һыу күп тапҡырға арта.

Төркмәнстандың көньяҡ сигендәге Копетдаг тау теҙмәләрендә ҙур булмаған шарлауыҡ - Кыр-Гыз - Ҡырҡ Ҡыҙ урынлашҡан. Легенда буйынса, бик борон заманда бер төркмән ауылына дошман яуы һөжүм итә. Был ваҡытта бар ирҙәр ҙә яуҙа булыу сәбәпле, ауылда ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ һәм бала-саға ғына тороп ҡалған була. Ҡырҡ ҡыҙ ҡылыс менән ҡораллана һәм дошмандан тыуған ауылдарын һаҡлау өсөн яуға күтәрелә. Тиңһеҙ алышта ҡыҙҙарҙың барыһы ла һәләк була, уларҙың ҡаны көслө тулҡын булып дошмандарҙы йыуа. Шулай итеп Кыр-Гыз шарлауығы барлыҡҡа килә.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# КЕШЕ - БЕР ТАМСЫ ҠАН ҺӘМ...

## мең төрлө икеләнеүҙәр



* * *

Бер көн Мансур хәлифте себен тешләй. Бик асыуланып, ул күренекле дин ғалимы Йәғәфәр әс-Садиҡҡа мөрәжәғәт итә:

- Эй, Абдулла улы! Ни өсөн Алла себенде булдырған?

Имам Йәғәфәр былай тип яуап бирә:

- Мин-минлектәре артыҡ ҙурайып киткәндәргә үҙ урынын күрһәтер өсөн!

* * *

Бер билдәле яҙыусынан уның шәхси автомобиле булыу-булмауы тураһында һорағандар. "Эйе, мин унда һуңғы юлымда барасаҡмын", - тип яуап биргән ул ныҡлы ышаныс менән.

* * *

Әбү-Хөмәйрәнән һорағандар:

- Иртәгә үлерегеҙҙе белһәгеҙ, нимә эшләр инегеҙ?

- Мин белем алыуымды дауам итер инем, - ти ул артыҡ күп уйлап тормайынса.

* * *

Бер фәйләсуфтән һорағандар:

- Был донъяла нимәгә эйә булыу иң еңеле?

- Хыялға. Сөнки ул һәммәбеҙҙә лә бар.

* * *

Бер фәйләсуфтән һорағандар:

- Был донъяла иң ҡатмарлыһы нимә?

Ул былай тип яуап бирә: "Һүҙ. Сөнки уны ҡайһы саҡ аңлауы бик ауыр, шулай уҡ аңлатыуы ла еңел түгел..."

* * *

"Мин үлемдән ҡурҡам, шуға ла уны яратмайым", - тигән кешегә Хәсән Басрый былай тип әйткән: "Һин уны үҙеңдән һуң байлығыңды ҡалдырырға тейеш булғаның өсөн яратмайһың. Әгәр байлығың һинән алда барһа, һин уның артынан сабыр инең".

* * *

Бер көн иманлы Рабиғанан һорағандар:

- Кешенең Аллаһы Тәғәләнең ихтыяры менән ҡәнәғәтме-түгелме икәнлеген нисек белергә, ул Хаҡ Тәғәлә ебәргәндәр менән ҡәнәғәтме?

Ул былай тип яуап биргән:

- Кешегә ҡыуаныстар һәм бәләләр килгәндә генә быны асыҡ белергә була: шатлыҡ мәлендә кеше Хаҡ Тәғәләгә рәхмәт белдерә, ҡыйғылы мәлендә - күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй, ә үҙе кисергән хәлдәрҙән фәһем-һабаҡ ала.

* * *

Бер көн Сәғәҙей Ширазиҙан һорайҙар:

- Нимә ул кеше?

Уның яуабы:

- Бер тамсы ҡан һәм мең төрлө икеләнеүҙәр.

* * *

Бер ғалимдан ҡайҙан белем алыуы тураһында һорағандар икән, ул:

- Һуҡырҙарҙан, сөнки алда ни булғанын тикшермәй тороп, улар бер аҙым да атламай, - тип яуап биргән.

* * *

Абу Дарда ярлылыҡҡа зарланған ҡатынына: "Түҙ, беҙҙең алда шундай бейеклек буласаҡ, ә унда йөгө ауыр булмағандар ғына менә ала", - тигән.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**1945 йылдың данлы 9 май көнө - фашист илбаҫарҙарын Еңеү көнө, ваҡыт ағымының ҡотолғоһоҙ ҡанундарына ярашлы, алыҫлашҡандан-алыҫлаша бара һәм ул замандаштарыбыҙ тарафынан тик бер оло тарихи ваҡиға сифатында ғына ҡабул ителә. Ваҡыт аяуһыҙ, һәм беҙ үҙебеҙҙең ошо тарихи ваҡиғаларҙа ҡатнашҡан һуңғы ветерандар менән аралашып йөшәүебеҙҙе онотмаҫҡа тейешбеҙ. Уларҙың иң йәш тигәндәре лә 80-ен тултыра хәҙер. Шуның өсөн Өфө ҡала госпиталендә һуғыш ветерандарының һаулығын яҡшыртыу өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләргә тырышалар. "2008 йылда госпиталдә 5033 кеше дауаланһа, уларҙың 1211-е Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтары һәм ветерандары, 1407-һе тыл хеҙмәтсәндәре ине. Быйылғы йылдың I кварталында тағы ла 1242 кеше дауаланыу курстары үтһә, хәҙерге мәлдә стационарҙа 125 һуғыш ветераны табиптарҙың даими иғтибары һәм ентекле дауаһы менән файҙалана. Беҙҙең төп бурысыбыҙ - хөрмәтле ветерандарҙың ҡаҡшаған һаулығын төҙәтеү, уларҙың ҡалған ғүмерен мөмкин тиклем сәләмәтерәк итеү, рух-кәйефтәренең күтәренкерәк булыуына өлгәшеү", - ти госпиталдең баш табибы Хәлил Мостафин. Ошо госпиталдә дауаланған ветерандар менән осрашҡанда улар яңынан йәшлек йылдарын, дәшһәтле һуғыш дәүерен иҫкә төшөрөп, хәтирәләре менән уртаҡлашты. Иң аптыраҡаны ла шул булды: әйтерһең дә, ветерандар өсөн ҡартлыҡ юҡ, улар үҙҙәренең дәртле һәм хисле һүҙҙәре менән күңелде биләнә. Һүҙ - ветерандарға:**

# ЯҘМЫШЫБЫҘҒА ЯҘҒАНЫН КҮРЕП...

## хәҙер рәхмәтле булып йәшәйбеҙ

**Ҡәүи ЗАРИПОВ, 94 йәштә, Өфө ҡалаһында йәшәй:** 1914 йылда Илеш районының Юлдаш ауылында тыуғанмын. Беҙҙең быуын иңенә тормоштоң күп ауырлыҡтары төштө, шулай ҙа беҙ бирешмәнек, илебеҙгә бирелеп хеҙмәт иттек. Миңә хәрби хеҙмәттә ике тапҡыр булырға тура килде. Ҡыҙыл армияға 1936 йылда саҡырылдым, 1938 йылда хеҙмәт срогын тултырып, тыуған яҡтарға ҡайттым. Әммә тыныс шарттарҙа оҙаҡ йәшәргә яҙмаған икән. 1941 йылдың декабрендә фронтҡа оҙаттылар. Элекке хеҙмәтемдәге кеүек үк, тимер юл ғәскәрҙәренә тәғәйенләндем. Һуғыштың башынан аҙағына тиклем 75-се тимер юл тергеҙеү батальонында хеҙмәт иттем. Алғы һыҙыҡта булмаһаҡ та, тимер юлдарын дошман самолеттары бер туҡтауһыҙ тиерлек бомбаға тота, артиллерия уты аҫтында ҡалған саҡтар ҙа аҙ булманы. Улар емерә, шартлата, ә беҙ тиҙ арала юлды төҙәтәбеҙ, рельстарҙы яңынан һалабыҙ, техниканы ремонтлайбыҙ. Тимер юл мастерскойынан көнө-төнө сыҡмай эшләгән саҡтар булды. Тәүҙә Үҙәк, һуңынан 2-се Белорус фронты ғәскәрҙәре составында хәрәкәт иттек. "Варшаваны азат иткән өсөн", "Кенигсбергты алған өсөн" һәм башҡа хәрби миҙалдар менән бүләкләндем. 1946 йылдың декабрендә демоблизацияландым. Һуғыштан аҙаҡ та еңел булманы, күп ауырлыҡтар кисерҙек. Һаулыҡ ҡаҡшап, 5 операция уҙғарҙым, барыбер бирешмәнем. Рухың ныҡ булһа, ғүмерең дә оҙон була. Әсмәйем, тартмайым, Аллаға шөкөр, Мөнирә апайың менән инде 60 йыл бергә ғүмер кисерәбеҙ. Йәштәр ҙә беҙҙең быуындан өлгө алып, тырыш булһын, илгә фиҙакәр хеҙмәт итһен ине.

**Мөнирә ЗАРИПОВА, хеҙмәт ветераны, Ҡәүи бабайҙың тормош юлдашы:** Һуғыш ваҡытында мин Өфө фанера комбинатында эшләнем, оборона заводы булмаһа ла, йыш ҡына беҙҙе казарма хәленә күсерә инеләр. Беҙҙең предприятиела етештерелгән фанера самолет ҡанаттары өсөн ебәрелә ине, беҙ уны махсус паромға үҙебеҙ тейәп оҙата инек. Бындай көндәрҙә өйгә ҡайтыу юҡ, фанера өҫтөнә ятып, серем итеп алған булабыҙ. Ҡәүи бабайығыҙ менән ике бала үҫтереп, юғары белемле иттек, хәҙер ейәндәребеҙ, ике бүләбеҙ бар инде. Бына ошо госпиталдә табиптар бик һәйбәт ҡарай, төрлөсә дауалайҙар, шулар арҡаһында иҫән-һаубыҙ, уларға рәхмәтлебеҙ. Әммә күңелдә ҡырған бер нәмә бар: фатирыбыҙ бик бәләкәй, 49 йыл элек үҙ башланғысыбыҙ менән төҙөлгән иҫке һәм уңайлыҡтары булмаған йортта торабыҙ. Хәлебеҙҙе тикшерергә килгән комиссиялар ҙа ошоно раҫлап китте. Тик Калинин районы хакимиәтенә яҙған ғаризаларыбыҙға: "Һеҙҙең йәшәр урынығыҙ бар, башҡа фатир бирелмәйәсәк", - тип кенә яуаплайҙар. Һуғыш ветерандары йылдан-йыл аҙая бара бит, уларҙы тере саҡтарында ҡәҙерләү кәрәктер.

**Ғирфан ЯҠУПОВ, 82 йәштә, Яңауыл ҡалаһы:** Мин 1926 йылғымын, Яңауыл районының Иҫке Ҡуҙаш ауылында тыуып үҫтем. Беҙҙең йылғыларҙы 1943 йылда фронтҡа ала башланылар, әммә мин буйға бик бәләкәй булғас, тәүге наборға эләкмәй ҡалдым. Икенсе наборҙа армияға алынып, запастағы артиллерия полкына эләгеп, бер аҙ хеҙмәт иткәндән һуң, беҙҙең полкты Алыҫ Көнсығышҡа ебәрҙеләр. Японияға ҡаршы һуғыш хәрәкәттәрендә ҡатнашырға тура килде. Әйтергә кәрәк, бында Көнбайыш фронтында сынығыу алған, бик юғары күнекмәле һәм һуғыш алып барыу тәжрибәһе булған хәрби частар өҫтөнлөк итте. Улар шул тиклем йылдам һәм етеҙ хәрәкәт итте, уларҙың һөжүменә япон частары бер нисек тә ҡаршы тора алманы. Һөжүм итеүсе алдынғы частар артынан хатта беҙҙең артиллерия ғәскәрҙәре саҡ-саҡ өлгөрә ине. 9 августа башланған һуғыш хәрәкәттәре 3 сентябрҙә 1 миллион һалдаты булған Квантун армияһының тулыһынса тар-мар ителеүе менән тамамланды.

Һуғыш тамамланғас, 180 һалдатты һайлап алып, Юғары Баш Командование резервының 73-сө зенит дивизияһына хеҙмәт итергә ебәрҙеләр. Шулай итеп, Камчатка-ла 6 йыллап хәрби хеҙмәттә булырға тура килде. Өйҙән бер туҡтауһыҙ хаттар килә, тере ҡалғандар күптән ҡайтып бөткән икән. Беҙ дивизияның штаб начальнигынан һорай башланыҡ, демобилизацияға ҡасан бойороҡ булыуы тураһында. Бойороҡ бер йыл элегерәк булһа ла, беҙҙе ҡайтармай тотҡандары билдәле булды. Шунан, кем үҙ аҡсаһына билет ала, шуға ҡайтырға рөхсәт итә башланылар. Бында хеҙмәт иткәндәргә ул заман өсөн ҙур ғына аҡса түләнә ине.

Һуғыштан һуң 36 йыл буйына нефть сығарыу эше менән шөғөлләндем, беҙгә Арлан нефть ятҡылығын тәү башлап файҙаланыуға тапшырыу насип булды. Тормош юлдашым менән 3 ҡыҙ, 1 ул үҫтерергә насип булды, улар белем алып, бик матур тормош ҡорҙо. Ошо ирекле тормош өсөн бик күп кеше ғәзиз башын һалды, Иҫке Ҡуҙаштан да яуға киткәндәрҙең байтағы кире әйләнеп ҡайтманы. Әсәйемдең бер юлы өс ҡустыһы һуғышта һәләк булды. Ул замандағы халыҡ берҙәмлеге, рухи ныҡлыҡ, ил етәкселәренең ойоштороу һәләте булмаһа, дошманды еңә алмаҫ инек. Илде тарҡатыу өсөн күп кәрәкмәй. Шулай ҙа киләсәккә өмөт бар: бына мин тыуып үҫкән ауылда ла колхоз тарҡалманы, йәштәр ҙә ауылда йәшәргә, ныҡырға тырыша. Беҙгә, ветерандарға, ҡәҙер-хөрмәт етерлек, шуға ризабыҙ. Беҙҙе бик һәйбәт дауалаған, иғтибарлы шәфҡәт туташтарына, табиптарға, госпиталь етәкселәренә рәхмәттән башҡа әйтер һүҙ юҡ.

**Рифмир ҠУДАШЕВ, 80 йәштә, Өфө ҡалаһында йәшәй:** Һуғыш башланғанда мин бала ғына инем әле. Өфөлә йәшәй инек, һәм беҙ, һуғыш осоро малайҙары, Пионерҙар йортондағы хәрби түңәрәккә бик теләп йөрөнөк. Уны тамамлағас, беҙгә мәктәптәрҙә хәрби эшкә өйрәтеү хоҡуғы биргән инструктор таныҡтмаһы тапшырҙылар. Беҙгә ни бары 14-15 йәш, шулай ҙа нисек тә булһа фронтҡа барыу, фашистарға ҡаршы һуғышта ҡатнашыу теләге көслө. Военкоматҡа барһаҡ, кире бороп сығаралар. Өс малай һөйләшеп килештек тә, хәрби эшелондарға эләгеп, фронт-

ҡа ҡасып китергә булдыҡ. Килеп сыҡманы, сөнки тикшереү көслө, беҙҙе эшелондарҙан төшөрөп, кире ҡайтарып ебәрәләр. Шулай ҙа беҙ фронтҡа эләгеүҙән икенсе юлын таптыҡ: һуғышҡа китеүсе призывниктар менән бергә вагон-теплушкаға инеп ултырып, Мәскәү аша Ленинградҡа барып төштөк. Призывниктарҙы ҡаршы алыусылар алып китте, ә беҙ урамда тороп ҡалдыҡ. Кешеләрҙән белешеп, диңгеҙ флотына хеҙмәткә ебәрә торған пунктты эҙләп таптыҡ. Бер офицерға үҙебеҙҙең кем һәм ҡайҙан килеүебеҙҙе аңлатҡас, ул беҙҙе корабль экипаждары өсөн яуаплы хәрби начальникка алып инде. Беҙ үҙебеҙҙең башланғыс хәрби белемебеҙ булыуы, хәрби флотта өлкәндәргә ярҙамсы булып хеҙмәт итергә теләүебеҙҙе белдерҙек. Бәхетебеҙгә күрә, был командир беҙҙе юнга вазифаһына алырға риза булды, һәм шулай итеп, беҙ "Октябрь революцияһы" линкоры экипажына хеҙмәткә алындыҡ.

1944 йылдың ғинуарында фашистар Ленинград фронтында контрһөжүмгә күсергә әҙерләнә башлай. Беҙҙең разведчиктарға немецтарҙың 14 ғинуарҙа иртән 9 сәғәт 30 минутта психик атакаға күтәреләсәктәре тураһында мәғлүмәт билдәле була. Фашистарҙың бер юлы ике полкы ғәләмәт ҙур хәрби оркестр уйнаған марштар аҫтында тептекә баҫып, һөжүм итеп, Ленинградты һаҡлаусыларҙың ҡотон алырға теләй. Беҙҙең кораблдә лә "әҙерлек №1" иғлан ителде. 14 ғинуарҙа 9 сәғәт 15 минутта флот артиллерияһы дошман позицияларын көслө утҡа тота башланы. Беҙҙең корабль төп калибрлы орудиеларҙан ут асты: снарядтарҙың калибры 312 мм, һәр береһенең ауырлығы 571 кг. 4 башнялағы һәр орудие үҙ сираты буйынса ғына ата. Аҙаҡ билдәле булыуынса, беренсе залп дошмандың хәрби оркестрын пыран-заран туҙҙырып ташлаған, икенсе залп та һөжүмгә күскән фашистарҙың беренсе һәм икенсе рәттәре араһына эләгеп, уларҙы ҙур юғалтыуҙарға дусар иткән. Шулай итеп, фашистарҙың психик атакаһы кире ҡағылды, беҙҙең ғәскәрҙәр һөжүмгә күсте. Ғинуар аҙағында Ленинград блокадаһы тулыһынса алып ташланды. Был операция өсөн мин тәүге хәрби наградаға - "Хәрби хеҙмәттәре өсөн" миҙалына лайыҡ булдым.

Һуғыш тамамланғас, офицерҙар курсына ебәрҙеләр. Лейтенант званиеһында демобилизацияландым. 1954 йылдан 1989 йылға тиклем Өфөлә "Прогресс" заводында эшләнем. Әле лә ветерандар хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашырға тырышам.

**Сәйфулла МӘЖИТОВ, 90 йәштә, Ғафури районынан:** Мин Ғафури районының Яңғыҙҡайын ауылында тыуғанмын. Һуғышҡа тиклем Стәрлетамаҡ педтехникумын тамамлап, Мәсетле районында мәктәптә уҡыттым, РОНО инспекторы булып эшләнем. 1940 йылда хәрби хеҙмәткә саҡырылғас, Брест тарафтарына сик һағына эләктем. Һуғыштың тәүге көнөндә үк ауыр контузия алдым. Ҡамауҙа ҡалып, әсирлек ғазаптарын кисерергә яҙған икән. Ике тапҡыр ҡасһам да, ҡотолоп булманы, ахырҙа Варшава янындағы Седльце лагерына барып эләктем. Бындағы йәшерен ойошма ярҙамында бер төркөм әсирҙәр ҡасыу әмәлен таба алдыҡ. 40 көн буйына урмандар буйлап ҡасып бара торғас, иҫән ҡалған дүртәүебеҙ белорус партизандарына барып юлыҡтыҡ. Партизандар "батя" тип атап йөрөгән Советтар Союзы Геройы Г. М. Линьков отрядына диверсия төркөмөнә алдылар. Минә фашистарҙың алты эшелонын шартлатыуҙа ҡатнашыу насип булды. 1944 йылда беҙҙең отряд регуляр Ҡыҙыл Армия сафтарына ҡушылды. 1945 йылда һуғыш бөтөргә бер аҙна ваҡыт ҡалғас, Дрезден ҡалаһы янында яраланып, Еңеү көнөн госпиталдә ҡаршыланым. Хәрби хеҙмәттәрем өсөн II дәрәжәләге Дан, I, II дәрәжәләге Ватан һуғышы ордендары менән бүләкләндем. Белоруссиялағы бер мәктәптә беҙҙең партизан отрядының музейы бар, шунда бер нисә мәртәбә ҡунаҡҡа барып ҡайтырға ла яҙҙы. Һуғыштан һуң Мәсетле, Салауат районындарында мәктәптә, үҙемдең тыуған яғымда методист-инспектор булып эшләп, 53 йыллыҡ педагогик стаж тупланым. Әле лә мәктәптәрҙә эстетик тәрбиә буйынса лекциялар уҡып йөрөйөм, ошо айҡанлы Мәғариф министрлығының премияһына лайыҡ булдым.



**Борис ӘХМӘТЙӘНОВ, 89 йәштә, Өфө ҡалаһында йәшәй:** Тыуған ерем - Әлшәй районының Ниғмәтулла ауылы. Ғаиләбеҙҙә 6 малай үҫтек, барыбыҙ ҙа һуғышта ҡатнаштыҡ, ике туғаныбыҙ һәләк булып ҡалды. Минә һуғыштың иң ауыр мәлендә яуға инергә тура килде. 1941 йылдың 8 августында Полтава янында һуғышҡа керҙек. 1943 йылда ҡаты яралар булыу сәбәпле, запас полкка күсерелгәнсе байтаҡ яу юлдары үтелде. Һуғыштың бер көнө лә әллә күпме кешенең ғүмерен өҙә, минә лә бик ҡаты алыштарҙа ҡатнашып, иҫән ҡалырға яҙған икән.

Әле лә хәтеремдә, 1942 йылдың 2 майында дивизия командиры бойороғо менән дошмандың терәк пунктын юҡ итеү бурысы йөкмәтелгән йыйылма төркөм тупланды. Мине ул саҡта дошман тылына ебәрелә торған диверсия төркөмдәренә командир итеп ҡуя торғайнылар. Был юлы ла әлеге төркөмгә мине етәксе итеп тәғәйенләнеләр. Быға тиклем дошмандың терәк пункты урынлашҡан бейеклек янында беҙҙең байтаҡ һалдат һәләк булды, танкылар яндырылды. Төнөн бер яндырылған танк аҫтына шыуышып килеп, дошман позицияларын 6 көн дауамында күҙәтеп яттыҡ. Немецтарҙың алты блиндажы булғанлығы асыҡланды, терәк пунктының схемаһын төҙөп, дивизия командирына тапшырҙыҡ. Алдан ҡорған план буйынса төн уртаһында 12 яугир дошман блиндаждары янына тауыш-тынһыҙ барып етеп, бер үк ваҡытта гранаталар ташлап, автоматтарҙан ата-ата, бейеклекте ҡулға төшөрҙөк. Байтаҡ ҡына немец һалдаты әсирғә эләкте. Уларҙы теҙеп алып китер мәлдә генә фашистарҙың "секрет"ҡа ҡуйылған пулеметы телгә килде. Пуляларҙың тәүге очереды әсир немец һалдаттарына ла, минең аяҡтарға ла килеп тейҙе. Автоматым менән боролған ыңғайға, пулемет ияһынан ата башланы, мин яраланып йығылдым. Иптәштәрем плащ-палаткаға һалып, һөйрәп алып ҡайтты.

1942 йылда госпиталдән сыҡҡас, мине мотоцикл батальонының бер взводына командир итеп тәғәйенләнеләр. Шул батальон менән минә Харьков эргәһендә яманаты сыҡҡан ҡамауҙа булырға тура килде. Буденный, Ворошилов, Тимошенко граждандар һуғышы заманындағы рейдты ҡабатларға булған. Беҙ Харьковты урап уҙып, унан 120 км алыҫлыҡтағы Красногорскиға тиклем барып еттек. Әммә беҙҙең ғәскәр үҙе ҡамауҙа ҡалды, элемтә өҙөлдө, ойошҡан рәүештә командалыҡ итеү булманы. Һөҙөмтәлә һәр кем нисек булдыра ала, шул рәүешле ҡамауҙан сығыу юлын эҙләне. Беҙ Донец йылғаһына килеп етеүгә, бензин бөттө, мотоциклдарҙы атып, эшлектән сығарып киттек. Донец йылғаһын йөҙөп сығырға тура килде, йөҙә белмәгән байтаҡ һалдат шунда батып үлде. Нальчик эргәһендәге һуғыштарҙа тағы ла яраланып, госпиталдә ятып сыҡтым. Аҙағыраҡ минә 18-се армияның 5-се танк бригадаһының мотоуҡсылар батальоны командиры вазифаһында Кубанды, Ҡырымды азат итеү операцияларында ҡатнашырға тура килде. Керчты азат иткәндән һуң яралар асылғас, мине дауаларға ебәрҙеләр. Һуңынан Юғары Баш Командованиеһы резервына күсерелеп, офицерҙар курсына ебәрелдем. Ил алдындағы хеҙмәттәрем өсөн ике Ҡыҙыл Йондоҙ, ике Ватан һуғышы ордендары, башҡа хәрби миҙалдар менән бүләкләндем.

Һуғыштан аҙаҡ Ригала айырым хәрби округта офицерҙар курсында, полк мәктәбендә уҡыттым, 1965 йылда полк командиры вазифаһынан отставкаға сыҡтым. Ригала 25 йыл радиозаводта эшләнем, һәм унан Өфөгә күсеп ҡайтырға мәжбүр булдым. Аллаға шөкөр, бында фатир бирҙеләр. Ике ҡыҙым Ригала, улым Санкт-Петербургта йәшәй, 4 ейәнем, 2 бүләм бар. Яҙмышыбыҙға яҙғанын күреп, илебеҙгә тоғро хеҙмәт итеп, беҙгә ҡарата булған хөрмәт-ҡәҙергә рәхмәтле булып йәшәйбеҙ хәҙер ҙә.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**яҙып алды.**

*СОБХАНАЛЛА!*

# ИЛ АҒАҺЫ



**Мәҡәләмде шулай атауымда ысын мәғәнәһендә хаҡлыҡ бар. Һүҙем иҫ китмәле тормош юлы үткән, уның әсеһен дә, сөсөһөн дә үҙ елкәһендә татыған, данлы хеҙмәт, шанлы яу юлы үткән, ләкин бирешмәгән, әле лә үҙенең намыҫылай ап-аҡ сәстәрен бөхтә итеп тарап, ҡупшы, һалмаҡ ҡына баҫып халыҡ араһына сығыусы Сәхиулла олатай Арыҫланбаев хаҡында. Эйе, эйе, ул һәр ваҡыт ауылдаштары менән аралашып, яңылыҡтары менән уртаҡлашып, шатлыҡтары булһа - ҡыуанып, ҡайғыларына бергә көйөнөп, аҡыллы кәңәштәрен биреүсе ил ағаһы.**

Сәхиулла Йосоп улы 1916 йылда Юлдыбай ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Артабан - башланғыс һәм урта мәктәптә, механизаторҙар курсында уҡыу, сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү башланғас, ошо хәрәкәткә ҡушылып, беҙҙең яҡтарға килеп, Аҡтау ауылында төпләнеү. 1937 йылдың октябрь айында Сәхиулла олатай хәрби хеҙмәткә алына һәм... 1948 йылдың апрелендә генә хеҙмәт срогын тамамлай. Сәхиулла олатай 51-се Ҡыҙыл Перекоп уҡсылар дивизияһында хеҙмәт итә, ауыр һуғыш юлдарын үтә. Смоленск йүнәлеше, Мәскәү яны оборонаһы, дошманды өнөнә тиклем баҫтырыу - ошо ваҡиғалар тураһында Сәхиулла олатай күҙ йәштәре аша һаран ғына теҙә. Бөйөк Еңеүҙе ул Таллинн ҡалаһында ҡаршылай. Ауылға ҡайтып, ғаиләһе менән тыныс, матур ғүмер итеү, балалар үҫтереү хыялына өмөт саткылары уяна шул мәл, тик "йыландың үлгәндә лә ағыуы ҡала", тигәндәй, фашизм яһиллыгы бөтмәй әле. Уны тамырынан ҡоротоу өсөн тағы өс йыл хеҙмәт итергә тура килә. Сәхиулла Арыҫланбаев өлкән сержант дәрәжәһендә 1948 йылда ғына ауылға ҡайтып төшә һәм ең һыҙғанып эшкә тотона, механизатор һөнәре төп шөғөлөнә әүерелә.

Бынан өс-дүрт йыл элек йәйге матур бер иртәлә сауҡалыҡта уның бесән сабып йөрөүен күрергә насип булды. Фашист та, унан һуңғы аслы-туҡлы тормош та, иртәнән ҡара кискә тиклем колхоз эше лә олатайҙың көсөн алмаған икән әле, тип һоҡландым шул саҡ. Бөгөн уның күкрәген "Сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереү", "Атҡаҙанған механизатор" значоктары биҙәй. Шулар араһында иң ғорурланып таҡҡаны - II дәрәжә "Бөйөк Ватан һуғышы" ордены һәм бихисап миҙалдары.

Олатай өсөн май айы икеләтә шатлыҡлы осор. 1 майҙа 93 йәше тулһа, 9 майҙа балалары менән 64-се Еңеү яҙын ҡаршылаясаҡ. Ил ағаһына тағы ла әллә күпме яҙ һөйөнөстәрен кисерергә насип булһын.

**Рәшиҙә БАЙРАМҒОЛОВА.**
**Баймаҡ районы Аҡтау ауылы.**

*✓ Ҡырағай бал ҡорттары борон ағас ҡыуыштарында, тәбиғи ояла тиҫтә йылдар буйы йәшәгән, батман-батман булыр бал туплаған. Бындай табышҡа юлыҡҡан кеше үҙен бик бәхетле тойған.*



*БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ*

Тауыш бир!

# БАШҠОРТ

## Һутта - Илаһ ҡөҙрәте

Уй-хыялдарың менән ғаләмдәргә ашһаң, йыһандарҙа йөҙһәң дә, иң хозуры, хайран иткәне, арбағаны - ғәзиз ер! Тәбиғәт тылсымы ғәжәп: ниндәй генә үҫемлектәр үҫмәй, гөлсәскәләр балҡымай, емеш-еләк өлгөрмәй?.. Еркәйебеҙ - йәннәт, үҙе бер мөғжизә! Кешенең йәме, йәне, сәләмәтлеге, оҙон ғүмере өсөн унда барыһы ла бар.

Күк һыуы менән ҡойонған, ысығынан сафланған, ҡояш нурҙарынан наҙланған сәскәләргә бал ҡорттары ҡуна, илаһи һутшәрбәт һура һәм хуш-еҫ аңҡытып торған йорттарына ташый. Һутта иһә - Илаһ ҡөҙрәте, тәнде һәм йәнде һауыҡтырыу, йәшәртеү тылсымы. Бал ҡорттары бар ғилемде белеп тыуа, тиеүҙәре раҫтыр, күрәһең. Көнитмештәре - үрнәк, фәһем, ризыҡтары - им, шифа, асыл-булмыштары - серйомғаҡ...

Оҙаҡ йылдар ҡортсолоҡ менән шөғөлләнеүселәр, бал ҡорттарының ҡылыҡ-ғәҙәттәрен күҙәтеүселәр уларҙың хәрәкәттәр, өндәр, еҫтәр ярҙамында аңлашыуын яҡшы беләә. Эҙәрмән ҡорттар ҡайҙа һут, һитә барлығын байҡау өсөн сәфәр ҡыла. Хөр урынды тапҡас, был хаҡта улар бик ентекләп эшсе ҡорттарға аңлата: ҡайһы тарафта, ниндәй алыҫлыҡта икәнен, ризыҡтың күпмелеген... Мәғлүмәт ғәмәлдә бейеү аша еткерелә. Эҙәрмән бал ҡорто кәрәҙ буйлап, йә һул, йә уң яҡҡа йүгереп, боролоп, түңәрәк яһап бейей. Был ҡыуаныслы хәбәр килтергән бал ҡорто бейеүе була ла инде.

Был күренештең асылы тәбиғәткә, үҫемлектәр донъяһына һәм йәшәүҙе дауам итеүгә ҡөҙрәт биргән ризыҡ табыуға бәйле. Балдың тылсымы - үҫемлектәрҙең күҙәнәктәренән сыҡҡан, һабаҡтарынан, япраҡтарынан йөрөгән, сәскәләр үрсеү өсөн бүлгән һут-шыйыҡсанан. Тап ошо илаһи һеркәләнеү мәлендә бал ҡорттары сәскәләрҙән һут йыя һәм уны эшкәртеп, йәғни биҙҙәрендәге ферменттар менән байытып, һыуын айырып, шифалы бал хасил итә.

## Ҡырағай бал ҡорто һәм солоҡ балы

Көньяҡ Урал төйәгендә, Башҡорт иленең тау-урмандарында ла донъяны йәнләндереп һәм йәмләндереп ҡырағай бал ҡорттары гөжләп, выжлап торған. Ағас ҡыуыштарына ояланған был ғәжәп бөжәктәрҙең балын татыу, артабан солоҡтар соҡоп, уларҙы бағыу, аҫрау боронғо башҡорттарҙың яратҡан шөғөлө булған. Солоҡ хужалыҡтары барлыҡҡа килеп, һәр хужа солоҡ ағасына үҙ тамғаһын киртҡән. Оя бал ҡорттарына уңайлы шарттар тыуҙырып, йылыны һаҡларлыҡ итеп яһалған. Ояға һыуһар, айыу йөгонмаһын өсөн ауыҙ яғына туҡмаҡ эленгән. Бал ҡорттарына яҙғы байҡауҙа күстәр өҫтәлмә туҡландырылған, буш солоҡтар өсөн кәрәҙ алынған. Көҙгө байҡау мәлендә артыҡ бал йыйылған, оялар, күстәр ҡышлауға әҙерләнгән. Хәҙерге ваҡытта башҡорт бал ҡорто ағас ҡыуыштарында, солоҡтарҙа, түмәр умарталарҙа һәм таҡта умарталарҙа Бөрйән, Белорет, Ишембай, Йылайыр, Күгәрсен, Мәләүез төйәктәрендә һаҡланған һәм аҫрала.

Ҡырағай бал ҡорттары борон ағас ҡыуыштарында, тәбиғи ояла тиҫтә йылдар буйы йәшәгән, батман-батман булыр бал туплаған. Бындай табышҡа юлыҡҡан кеше үҙен бик бәхетле тойған. Бер риүәйәттә сағылыуынса, ҡара урманда ҡорт ҡунған урынды ҡарап йөрөүсе берәү ғәләмәт ҙур ағас ҡыуышын шәйләп, өҫкә үрмәләгән, ояның эсенә үк инеп киткән һәм биленән балға батҡан. Ҡуйырған балдан ысҡына алмай харап булам тигәндә, уны айыу ҡотҡарған.

Халҡыбыҙҙың "Ҡуңыр буға" эпосының бер вариантында алып сыҡҡан аҙығы бөткән Таңдысаға ағас ҡыуышлығындағы бал йөрәгенә көс-ҡеүәт өҫтәгән ризыҡ була: "Таңдыса тағы ла бик күп юл үтеп, тамам асыға башлай, зыулашып йөрөгән бал ҡорттарына осрай. Күтәрелеп ағасҡа ҡараһа, тумыртҡа тишегенән ҡорттар осоп сығып йөрөй. Үрелеп ағасҡа менә башлай, бер ҡыуыраҡ ботаҡҡа тотонғанда, ботаҡ айырылып китә. Шул урындан юлаҡланып бал ағып төшә. Солоҡтоң эсе тулы күптәнге аҙау бал икән. Таңдыса туйғансы бал ашай".

Башҡорт иле, башҡорттар тураһында яҙған ҡайһы бер тикшеренеүселәр хатта башҡорт атамаһын баш ҡорт йәғни баш ҡортсо төшөнсәһе менән бәйләй һәм халыҡтың төп кәсепшөғөлөн сағылдыра, тип фараз ҡыла. "Рәсәй дәүләтендә көн күргән бөтә халыҡтар һәм уларҙың көнкүреш йолалары, ғәҙәттәре, кейемдәре, торлаҡтары, дини инаныуҙары һәм башҡа ҡомартҡылары яҙмаһы"нда (1793 йыл) И. Г. Георги башҡорттар үҙҙәре төшөндөрөүенсә, башҡорт атамаһы ҡорт ҡараусы тигәнде аңлатыуын яҙа. 1847 йылда "Ырымбур губернаһы ведомостары"нда "Башҡорттарҙың атамаһы тураһында" тигән мәҡәләһендә В.Юматов: "Башҡорттар үҙҙәрен башҡорт, йәғни ҡорт ҡараусы аҫабалар, бал ҡорттары хужалары, ти. Бәлки, был уларҙың хәҙерге Башҡортостан биләмәләренә күсеүенә бәйлелер", - тип яҙа.

Башҡорт халҡының арҙаҡлы улы, бөтә донъяға танылған шәрҡиәтсе Әхмәтзәки Вәлиди Туған йәш сағында солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ менән бик ихлас шөғөлләнгән. Был уның "Хәтирәләр" китабында сағылған: "Ауылыбыҙ умарта тотоу, бал йыйыу һәм "әсе бал" тип аталған эсемлекте эсеү менән тирә-йүнгә билдәле ине... Апрель аҙаҡтарында бал ҡорттары менән мәшғүл булдыҡ, йөҙҙән



ашыу умартанан торған баҡсабыҙ ауылыбыҙҙан дүрт саҡырым алыҫлыҡта урынлашҡайны. Унда аласыҡ - йәйләү өйө һәм ҡышын умарталар һаҡлау өсөн ыҙма бар ине. Шулай уҡ бейек ағастарҙың өҫкө ботаҡтары араһында урынлаштырылған, бал ҡорто күстәрен ҡундырыу өсөн ҡарағай ағастарына уйылып эшләгән солоҡтарыбыҙ ҙа булды. Улар йөҙ саҡырымға тиклем алыҫлыҡта төрлө ерҙә, төрлө тарафта урынлашҡайны. Апрелдә боронғо ата-бабаларҙан мираҫ булып ҡалған был солоҡтарҙың, ҡырағай бал ҡорто ҡунһын өсөн, эсен таҙалап, балауыҙ һалыу эше башҡарыла. Быларҙы мин ҡустым Нурмөхәмәт һәм Ибраһим Ҡасҡынбай исемле дуҫым менән берлектә эшләй торғайным. Ибраһимдарҙың солоҡтары ла беҙҙеке кеүек күп ине...

Июндә, был ваҡыт умартасылыҡта биләм ҡарау тип аталған эш иң зауыҡлы һанала. Солоҡтарға ҡорт күстәренең осоп килеп урынлашыу-урынлашмауын йәиһә ҡырағай бал ҡорто күстәренең яңы айырылғандарының был ояларҙы ни дәрәжәлә ҡабул итеү-итмәүен ат өҫтөндә ултырған килеш күҙәтәһең. Беҙҙең милкебеҙ иҫәпләнгән солоҡ ағастары тауҙарҙа йәки үҙәндә булғанлыҡтан, көнөнә һыбай килеш иң күбе утыҙ-ҡырҡ саҡырым юл үтеп, ун-ун биш ояны ҡарап сығырға мөмкин. Йылына ни бары ун биш көн дауам иткән биләм ҡарауға мин дуҫым Ибраһим Ҡасҡынбай менән бергә сыға торғайным... Көҙ еткәс, умарталарҙы ҡышҡылыҡҡа ыҙмаларыбыҙға мин урынлаштырҙым. Бал ҡорттары мине һис саҡмаҫтар, уларға дуҫ икәнлегемде белерҙәр ине...

Ауылда күп итеп бал шарабы эшләнелә торғайны. Исламда рөхсәт ителгән был шарапты бәғзе башҡорт имамдары ла эсте. Беҙгә әҡрәбә тейеш бер имам ине, үрҙә уны Әһел мулла тип телгә алғайным. Ул халыҡтан ғөшөргә бал алып әсетеп эсә торғайны...

Мин көҙөн тауҙарҙағы солоҡ балдарын үҙ ҡулым менән йыйып, уларҙы һатып, бер аҙ аҡса тупламайынса, бал ҡорто ояларын ҡышлыҡ ыҙмаларға урынлаштырмайынса, тәүге ҡар яуғас, мылтыҡ һәм ыласын алып, урмандарға тауҙар араһына һыбай китеп, ҡор, ҡырғауыл һәм ҡуян һунарына сыҡмайынса, мәҙрәсәгә китмәй торғайным...

Үрек буйында ҡалдыҡ, бында ла солоҡтарыбыҙ бар ине. Уларҙың бер нисәһен үҙем уйғайным, бер нисәһе ағайым Вәли мулланан ҡалған. Шул йылда, ҙур бер ырыҫ кеүек, солоҡтарға ҡырағай ҡорт күстәре күп ҡунды. Илле солоҡтоң утыҙ бишенә ҡунғандыр. Быны иһә урындағы башҡорттар минең өсөн бер бәхет билгеһе булараҡ юраны. Мин дуҫтарымдың береһе менән тау һәм үҙәндәрҙә төрлө урындарҙа урынлашҡан солоҡтарҙан бал йыйҙым, сөнки атайым был солоҡтарҙан алған балдың бөтәһен дә һатып, үҙемә аҡса әҙерләргә рөхсәт иткәйне. Балды шул тирәгә килгән татар сауҙагәрҙәренә һаттым. Фәрәй мулланың ҡатыны, балдың ҡараҡ төҫтәгеләрен айырып, шарап эшләне, дуҫтарым менән бында бер нисә көн күңел асҡандан һуң ауылға ҡайтып, Ҡазанға табан юлға сыҡтым...

Сентябрҙә ағас олондарындағы солоҡтарҙан бал йыйыу менән шөғөлләнеп, уларҙы баҙарҙа һатып, апаруҡ аҡса тупланым. Әйтеүемсә, атайым был бал аҡсаһын миңә бирҙе. Быйыл да солоҡтарға күп ҡорт ҡунды. Быны атайым: "Һин уҡыуыңды, һис шикһеҙ, уңышлы дауам итерһең, сөнки минең ғүмеремдә беҙҙең солоҡтарға был ҡәҙәр ҡорт ҡунғаны юҡ ине", - тип яҡшыға юраны. Мин Алағуян Тамағы ауылына килгәндә, беҙҙең ул тарафтағы солоҡтарыбыҙҙағы балды Ибраһим йыйып та ҡуйғайны. Минең тарихи китабым сығыуға иң ныҡ һөйөнгәне Ибраһим дуҫым булды". Күрәһегеҙ, Әхмәтзәки Вәлиди Туған солоҡсолоҡ, умартасылыҡ шөғөлө тураһында ҡыҙыҡлы ла, фәһемле лә итеп, аманат һымаҡ яҙып ҡалдырған.

Ҡырағай бал ҡорттары тәбиғи мөхиттә үҙ ихтыярҙарынса йәшәй, кәрәк мәлдә осош яһай, ҡышын ҡаты һыуыҡтарға ла бирешмәй. Улар эшкә өлгөр, сәскәләргә шат һәм ғәмәлдә донъяларына әҙәм заттарының йыш ҡыҫылыуынан, борсоуынан азат. Ризыҡтары ла ғәҙәттәге умарта балынан айырыла. Солоҡ балы һоро йәшелһыу төҫмөрләнешле ҡуңыр көрән төҫтә, балауыҙ, һитә, һеркә менән ҡушымталы, татлыраҡ һәм хуш еҫлерәк. Белгестәрҙең фекеренсә, ул өлгөргәнерәк, тәбиғи матдәләргә, микроэлементтарға, аминокислоталарға байыраҡ. Мөһим үҙенсәлеге - ферменттар күплегендә, һыу, сахароза аҙлығында, кислоталылыҡ түбәнлегендә. Шуға ла башҡорт солоҡ балының даны бөтә донъяға билдәле. Хатта ул күккә ашып, ғаләм киңлектәренә сығып, "Мир" орбиталь станцияһында Рәсәй космонавтарына туҡлыҡлы тәғәм булды.

Башҡорт солоҡ ҡортон өйрәнеү өсөн СССР Фәндәр академияһы профессор Г.А.Кожевников етәкселегендә 1929 йылда Башҡортостандың Бөрйән районына экспедиция ойоштора. Ике йыл буйы ентекле тикшеренеүҙәр алып барып, ул йыйылған материалдар нигеҙендә ҡыҙыҡлы һығымталар яһай. Бөрйән солоҡ ҡорто метисланмаған, йәғни башҡа ҡорттар менән ҡушылмаған, саф тоҡомло һәм, профессор Кожевников ғилми билдәләмә биреүенсә, "тарихҡаса булған" бик боронғо бал ҡорто. Уның үҙенсәлектәре шундай. 1. Бал



*✓ Башҡорт балы - башҡорт халҡының илгә, милләткә ҡот, дан-шөһрәт килтергән тылсымы. Тәбиғи матдәләренең төрлөлөгө, шифаһы, им-дауа үҙенсәлектәре, туҡлыҡлығы, тәме буйынса донъяла уның тиңе юҡ.*

# БАЛЫ

ҡорттары үҫеп ултырған ҡарағайҙарҙың һәм ҡарағастарҙың ерҙән ун биш-егерме метр бейеклектәге солоҡтарында йәшәп, ҡышын 40-45 градус температуралы һыуыҡтарҙы ла бына тигән үткәрә һәм өшөмәй, туңмай тиерлек. 2. Солоҡ ҡорттары юғары продуктлы. Ҡорт бағыусы, һәйбәт ҡышлауҙы тәьмин иткән аҙыҡ запасы ҡалдырып, солоҡ күсенән бер миҙгелдә ике ботҡа хәтлем кәрәҙле бал ала. 3. 1928-1929 йылдарҙа рамлы умарталарға күсерелгән солоҡ бал ҡорттары күстәре Ғәҙелгәрәй ауылында Ш.Сәғитов, Яңы Монасипта Н.Буранов умарталыҡтарында ҡарар-ҡарамаҫ торошта ла һәр оянан бишәр ботҡа тиклем бал биргән. 4. Солоҡ ҡорттарында һәм уларҙың тоҡомдарында сереү (гнилец), нозематоз ауырыуҙары юҡ. Уларҙың организмы зарарлы сирҙәргә бирешмәй. 5. Микроскопик тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, урта урыҫ тоҡомо менән сағыштырғанда солоҡ ҡортоноң томшоғо оҙонораҡ.

Профессор Кожевников башҡорт солоҡ ҡорто һәм балы тураһында экспедиция мәғлүмәттәрен Фәндәр академияһы хеҙмәттәрендә һәм Көнбайыш Европа журналдарында баҫтырып сығара һәм ил, сит ил ғалимдарының ҙур ҡыҙыҡһыныуын уята, башҡорт солоҡ бал ҡортоноң селекция-тоҡомсолоҡ эшендә ҙур әһәмиәткә эйә буласағын билдәләй ("Пчеловодство" журналы, 1947, № 6). Был изге теләк, ҡыуанысҡа күрә, теләк килеш кенә ҡалманы, "Шүлгән-таш" ҡурсаулығы "Алтын солоҡ" дәүләт тәбиғи заказнигы ойоштороп, 1997 йылдан Бөрйән солоҡ бал ҡортон ишәйтеү, уның йәшәү биләмәләрен киңәйтеү буйынса планлы эш алып бара.

Башҡорт бал ҡорто башҡа тоҡомдарҙан ҡуңыр һоро төҫө һәм эрерәк булыуы менән айырылып тора. Йәнә, күберәк көс айырыуы, һыуыҡҡа бирешмәүсәнлеге, алты-ете ай буйы оянан осоп сыҡмай тора алыу һәләте, варратоз, европа серегеге, нозематоз, токсикоз ауырыуҙарына бирешмәүсәнлеге менән. Балауыҙ яһау, манса йыйыу буйынса башҡорт бал ҡорто бөтә тоҡомдарҙан етеҙерәк, алдымыраҡ. Айырыуса йүкәнән бал йыйыуға ныҡ ҡулайлашҡан. Өҫтәлмә бал миҡдарын туплау ҙа уның мөһим үҙенсәлеге. Бал килеме көслө мәлдә башҡорт бал ҡорттары умартаның икенсе ҡатын ғына түгел, ә мисәтләнмәгән бала ятҡылығы күҙәнәктәрен дә татлы һут менән тултыра. Баллы кәрәҙ күҙәнәктәрен мисәтләгәндә күҙәнәктәге бал һәм уның балауыҙ ҡаплауысы араһында һауа ҡалдыралар. Бындай бал бик сифатлы була. Умартасылыҡ буйынса Бухареста 1965 йылда үткән XX халыҡ-ара конгреста башҡорт бал ҡорто диплом һәм көмөш миҙал менән бүләкләнә.



Башҡортостандың танылған умартасыһы Василий Николаевич Власов яҙыуынса, бал ҡорто ғәли йәнәптәре - тәбиғәттең ғәжәп бүләге. Солоҡтарҙа йәшәгән дәүерҙәрҙән бирле бал ҡорттары кешеләргә тоғро булып, сәләмәтлек эликсиры бүләк итә, ерҙә сәскәле үҫентеләрҙе һәм бөтә тәбиғәтте һаҡлай. Планетабыҙҙа экологик тотороҡлолоҡ булдырыуға тос өлөш индергән бал ҡортона кешеләр рәхмәтле. Япониянын Гифу ҡалаһында скульптор Осаму Тежема проекты буйынса бал ҡортона монумент ҡоролған. Уны асыуға бал ҡортона йыр һәм гимн яҙылған. Словакияла шулай уҡ бал ҡорто скульптурала мәңгеләштерелгән. Әүәл Рәсәйҙең умартасылыҡ шөғөлө үҫешкән бәғзе губерналарының һәм ҡалаларының гербтарында бал ҡорттары йәки умарта һүрәтләнделгән. Әйтәйек, Медынь, Тамбов ҡалаларының гербтарында өсәр көмөш бал ҡорто, Севастополь, Усть-Каменогорск ҡалаларының гербтарында бал ҡорттары менән умарта, Белоруссияның Игумена, Климовичи ҡалаларының гербтарында ла бал ҡорто төшөрөлгән булған. Башҡорт бал ҡорттарының һәм умартасыларының эшһөйәрлеген һәм бөйөклөгөн Урал мәрмәрендә мәңгеләштереү яҡшы булыр ине.

Башҡорт иленең тау-урман төйәгендә урынлашҡан Бөрйән районы биләмәләренең үҫемлектәр донъяһы үҙенсәлекле. Бында иң күп бал һуты биргән үҫемлек - ваҡ япраҡлы йүкә. Ул ике-өс аҙна сәскә атыу мәлендә "Бөрйән" бал ҡорто әллә күпме хуш еҫле тәбиғәт тәғәмен йыйып өлгөрә. Уның эшһөйәрлегенә хайран ҡалырлыҡ.

Рәсәй биләмәләрендә ҡырағай солоҡ ҡорто Башҡортостанда ғына һаҡланған. Ул "Шүлгәнташ" дәүләт ҡурсаулығында һәм "Алтын солоҡ" заказнигында ҡурсауға алынған. Беҙҙең заманда бик аҙ һандағы кешеләр, ғәйәт һирәк һөнәр оҫталары ғына солоҡсолоҡ шөғөлө һөнәренә эйә. Ә солоҡ балын яратыусылар, юғары баһалаусылар бихисап. Бөрйән, Белорет, Ишембай райондарында эре урман хужалыҡтары, ағас әҙерләүселәр аң-тоң белмәй байтаҡ солоҡ ағасын харап итте. Шул хәҡиҡәт: ҡырағай ҡорттарҙы, солоҡтарҙы тәбиғәттең асылын боҙмағанда ғына һаҡлап ҡалырға мөмкин.

Әлбиттә, хәҙер үткән быуаттар менән сағыштырғанда ҡырағай бал ҡорттары ла, солоҡтар ҙа, уларҙы ҡараусылар ҙа аҙ. Мәгәр быға бәйле һирәк һәм мажаралы хәлдәр булғылай. Бөрйән районында Хәмит исемле ҡәрҙәшебеҙ көҙөн утынға тип, ғәйәт ҙур ҡороған имәнде йығып, тракторға тағып өйөнә һөйрәтеп алып ҡайта һәм "Дружба" бысҡыһы менән уны түмәрҙәргә бүлгеләй башлай. Эргәһендә улы булышып йөрөй. Ҡапыл бысҡы һүнеп, туҡтап ҡала. Улы әйтә: "Атай, имәндә нәмәлер гөжләй". Хәмит ентекләп ҡараһа, бысҡы юлынан бал һарҡа, эстә бал ҡорттары ҡуҙғып, безләй, геүләй. Ул һаҡ ҡына солоҡто кәрәгенсә бысып алып, йәһәт кенә тишектәрен бөтәштерә һәм уны йәтешләп баҡсаһына ултырта. Был ғәжәп табышҡа Хәмит үҙе лә, ғаиләһе лә ҡыуана. Ботаҡлы имәнде бысып ауҙарғанда, алып ҡайтҡанда ла кәрәҙ боҙолмаған, бал ҡорттары туҙмаған. Балы иһә ашап туйғыһыҙ.

## Йүкә балы, сәскә балы...

Ҡурай, ҡымыҙ һымаҡ, башҡорт балы - башҡорт халҡының илгә, милләткә ҡот, дан-шөһрәт килтергән тылсымы. Тәбиғи матдәләренең төрлөлөгө, шифаһы, им-дауа үҙенсәлектәре, туҡлыҡлығы, тәме буйынса донъяла уның тиңе юҡ. Был Көньяҡ Уралдың, Башҡортостандың йәннәттәй еренән, үҙенсәлекле үҫемлектәр донъяһынан, тәбиғәт шарттарынан. Бал биргән үҫемлектәр төрө генә өс йөҙләп. Улар үҫкән, сәскә атҡан мөхит киң, иркен. Әйтәйек, Рәсәйҙә йүкә урмандары биләгән даирәнең өстән бер өлөшө - Башҡортостанда. Быға һәр тараф һоҡланырлыҡ һәм көнләшерлек.



Йүкә, ҡарабойҙай, ҡандала үләне, йылҡы борсағы кеүек бер төрлө үҫемлектәр сәскәһенән (монофлора), йәнә төрлө болон, туғай сәскәләренән (полифлора) йыйылған бал юғары сифатлы һанала. Умартасылыҡ белгесе Василий Власов "Башҡортостан балы" китабында яҙыуынса: "Өлгөргән стандартлы башҡорт балы 18-19 процент һыуҙан һәм 82 процентҡа тиклем шәкәрле ҡоро матдәнән тора. Унда 35 процент виноград шәкәре (глюкоза), 40 процент емеш шәкәре (фруктоза), 2 процент сахароза һәм 0,1 процент аҡһым, йәнә ферменттар, гормондар, егермегә яҡын аминокислота, минерал, хуш еҫ һәм төҫ биргән матдәләр бар".

Йүкә балы - иң билдәле, иң сифатлы балдарҙың береһе. Ҡайһы урында йыйылыуына бәйле тәме, төҫө төрлөсәрәк. Ғәҙәттә ул хуш еҫле, асыҡ һары төҫлө, йәки еңелсә йәшелһыу. Ҡуйырғаны иретелгән туң май һымаҡ йәиһә бөртөклө. Башҡорт йүкә балы аҡһыл гәрәбә кеүек һәм ҡеүәтле, татлылығы, хуш еҫлелеге буйынса Рәсәйҙә иң яҡшы һанала. Умартасылыҡ белгестәренең фекеренсә, өсдүрт йүкә ағасы бер гектар ерҙәге ҡарабойҙай биргән миҡдарҙа бал бирә. Йүкә сәскә атҡан мәлдә йүкәлекле төйәктәрҙә бер күс көнөнә ун-ун биш килограмм һут ташый. Сәскәләрҙә һут күп саҡта ул ҡояшта ысыҡ тамсылары кеүек ялтырай. "Бал ямғыры", ти бындай күренеште солоҡсолар. Башҡорт йүкә балы ләззәте, ҡөҙрәте менән хуш, бактерияларҙы һәм микробтарҙы ишһенмәҫ үҙенсәлектәре менән баһалы. Айырыуса һалҡын тейҙергәндә, үпкә ауырығанда килешкән им. Уны ашҡаҙан-эсәк юлдары шешкәндә, бөйөр, йөрәк ауыртҡанда, йәрәхәттәрҙе, бешкән урындарҙы дауалағанда ҡулланалар.

Төрлө-төрлө баллы үҫемлектәрҙең сәскә һуттарынан йыйылған һәм һәммәһенең ҡөҙрәтен туплаған бал да ифрат та шифалы һәм ҡиммәтле. Әйтәйек, яҙғы балда май-июнь айҙарында сәскәләнгән үгәй инә үләне, бәпембә, баллыҡай, тал, ҡарағат, саған кеүек егерменән ашыу үҫемлектең һуты һәм һеркәһе бар. Йәйге балда - йүкә, миләш, ҡыҙылхан, йылан көпшәһе, еҫле балтырған, фаягөл, ҡайын еләге, болон яраны, аҡ тумыртҡабаш, гөлйемеш, ҡурай еләге, әрекмән, мәтрүшкә, ҡымыҙлыҡ, арыҫлан ҡойроғо, ҡыҙыл көртмәле, һары мәтрүшкә, ҡуян кәбеҫтәһе, алтын тамыр кеүек бихисап үҫемлектәрҙең ҡөҙрәте. Уларҙың күбеһе - тәбиғи дауа сеймалы, үҙҙәре дарыу үләне. Ошо үҫемлектәрҙән йыйылған ҡатнаш бал, һис шикһеҙ, мөғжизәле дауалау үҙенсәлектәренә эйә. Ул кеше тәнендә матдәләр алмашыныуын яҡшырта, биохимик процестарҙы тиҙләтә. Балда уны оҙаҡ һаҡларға шарт тыуҙырған бактерияларҙы юҡ итеү үҙенсәлегенә эйә биоген стимуляторҙар бар.

Ҡарабойҙай балы ғәмәлдә Башҡортостандың дала яҡтары умарталыҡтарында йыйыла. Ҡыҙғылтыраҡ ҡуйы көрән, ҡуйы һары төҫтә, хуш еҫле. Унда аҡһымдарҙан, углеводтарҙан (глюкоза, гликоген, шәкәр...), майҙарҙан тыш, кеше организмы өсөн аҙ миҡдарҙа кәрәк булған тимер, кальций, фосфор, баҡыр, цинк, бор, йод, никель, кобальт кеүек микроэлементтар, шулай уҡ B1, B2, PP витаминдары һәм рутин бар. Һәйбәт антисептик булараҡ, ҡарабойҙай балы трофик сей яраларҙы, эренле йәрәхәттәрҙе, сиҡан ҡалҡыуын һәм башҡа тире ауырыуҙарын имләүҙә шифалы.

Тумалаҡ сәскәле клевер, йәғни тумыртҡабаш, туҡранбаш һутынан етештерелгән бал асыҡ һарғылт төҫлө, 41 процентҡа тиклем фруктозалы, яй ҡуйыра. Монофлор балдарҙан клевер балы иң яҡшыларҙың береһе һанала. Ул хәлһеҙләнгәндә, көсһөҙләнгәндә диетик ризыҡ, гинекология ауырыуҙарын, геморройҙы дауалауҙа йоғонтоло.

Ваҡ ҡына киртләс япраҡлы, һабаҡ буйлап сыҡҡан аҡ, һары сәскәле, хуш еҫле ҡандала үләне балы төрлө төҫлө: аҡ йәшелһыу төҫмөрләнешле, асыҡ гәрәбә сағылышлы... Фруктоза 40 процентҡа тиклем тәшкил итә, үҙенсәлекле еҫ аңҡыта, еңелсә генә әсе тәмле, татлы. Эсәктәр атонияһын дауалағанда юғары терапевтик йоғонтоға, йәнә эс йомшартҡыс, эс китергес тәьҫиргә эйә һәм шундай дарыуҙарҙы алмаштыра ала.

**Шулай итеп...**

**Башҡорт балы 1900 йылда Парижда, 1961 йылда Эрфуртта (Германия), 1971 йылда Мәскәүҙә үткән халыҡ-ара күргәҙмә-йәрминкәләрҙә алтын миҙалдарға, 2002 йылда Берлинда "Йәшел аҙна" халыҡ-ара йәрминкәһендә иң юғары наградаға, һуңғы йылдарҙа Санкт-Петербургта "Агрорусь", Мәскәүҙә "Алтын көҙ" күргәҙмә-йәрминкәләрендә алтын һәм көмөш миҙалдарға лайыҡ булды. Башҡорт балы мотлаҡ "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" исемлегендә булырға тейеш, тигәнгә бар республика халҡы ҡушыласағына шик юҡ.**

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**

**(Дауамы киләһе һанда).**

✓ *Рыҫбайҙы һәр урында ла һағалап торалар, барлығы 6 тапҡыр ҡулға алалар. Алтыһында ла ул ҡасып китә. Уға бер нисә тапҡыр аталар ҙа, тик һәр осраҡта ул, ниндәйҙер хикмәт менән, иҫән ҡалыуға өлгәшә.*



КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# БЫЛ ХАҠТА ЯҘЫУЫ АУЫР,

## яҙмайынса ла ярамай...



**Был яҙмаларҙың авторы Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, юстиция полковнигы Дәминдәр Рамаҙан улы Хәмитов. Ул хәҙерге Баймаҡ районының Буранбай ауылында тыуып үҫкән. Һуғыштан һуң Бөтә Союз юридик институтын тамамлай, төрлө урындарҙа судья булып эшләй, 1962 йылдан 1987 йылға тиклем БАССР-ҙың Юғары суд ағзаһы булып тора. 1980-1990 йылдарҙан алып ғүмеренең аҙағынаса Дәминдәр Хәмитов 1920-1950 йылдарҙағы сәйәси репрессиялар хаҡындағы документтарҙы өйрәнеүҙә ҡатнаша. Әлеге яҙмаларҙы матбуғатҡа уның кесе улы Ратмир Хәмитов әҙерләне.**

### Халыҡ белергә тейеш...

1930 йылдарҙа кулактарҙы ситкә һөрөү менән башланған сәйәсәт 1937 йылда Сталиндың шәхес культы булараҡ дауам иттерелә. Ул саҡта минең тыуған ауылым Иҫке Кинйәбулат (хәҙерге Буранбай) һәм уның тирәһендәге ауылдарҙың кешеләре лә золом ҡорбаны була. Унда ҡорбан булыусыларҙың күбеһененең бер ниндәй ҙә енәйәт ҡылмағанлыҡтан аҡланғанлығын белгәнгә күрә, бер нисәһенең "эшен" өйрәнергә тура килде. Шәхес культына бәйле бик күп мәғлүмәтте, ялған яла яҙғандар исемлеген күңелемдә генә йөрөтәм, уларҙы үҙем менән был донъянан алып китермен тип уйлайым. Сөнки улар хаҡында һөйләү-яҙыу элеккесә "тыйылған" булып ҡалаҫаҡ. Сөнки аҡланғандарҙың исемлеген матбуғат битендә баҫтырыу туғандарының күңел яраһын яңыртасаҡ, тынысланып өлгөргән йөрәктәрен ярһытасаҡ, аталарын ҡулға алғандан һуңғы ауыр йылдар, аяуһыҙ яҙмыштарҙы ҡайтанан иҫкә төшөрәсәк. Өҫтәүенә, ул йылдар шаһиттарының йөҙҙән бере генә бөгөн дә иҫән булыуы мөмкин. Ҡасандыр бер-береһенә дошман булғандарының балалары, ейәндәре туған-тумаса булып йәшәһә, был хәл уларҙың араһын боҙоу ғына булыр.

Миңә, юрист булараҡ, Башҡортостанда Сталин терроры ҡорбандарын реабилитациялау буйынса комиссияның эшендә даими ҡатнашырға тура килде. Әле бына үҙемә мәғлүм булған ҡайһы бер яҡташтарымдың аяныслы яҙмышы хаҡында яҙмаҡсымын. Улар араһында ауылдаштарым да булғанғамылыр, был хаҡта яҙыуы ифрат ауыр, шул уҡ ваҡытта яҙмайынса ла



ярамай. Дөрөҫлөк ҡасандыр бер әйтелергә тейешле.

Шуға күрә берәүҙең дә йөҙөн йыртмаҫлыҡ итеп кенә 1920-1930-сы йылдарҙа үҙебеҙҙең яҡта барған хәл-ваҡиғалар хаҡында бәйән итмәксемен. Тарихта 1937 йылда башланғаны билдәле булған золом машинаһы был төбәк халҡын 30-сы йылдарҙың башында уҡ ҡыра башлай. Быларын да халыҡ белергә тейештер тип уйлайым.

### Тарихи фактор

1929 йылдың 13 мартында нигеҙҙә дин эйәләре: мулла һәм мөәзиндәр ҡатнашлығында Иҫке Кинйәбулат ауылында йыйылыш уҙғарылған һәм ҡарар сығарылған. Унда муллалар, бер туған Йосоп һәм Закир Ғәйетбаевтар, мөтәулла Мөхлис Үтәбаев ҡатнашҡан. Йыйылышҡа Исхаҡ Алтынбаев рәйеслек иткән, президиум ағзаһы булып Хәлил Раев, йыйылыш секретары булып Мәлик Әминев торған. Йыйылышта ҡатнашҡан 50 кешенең барыһы ла унда ҡабул ителгән мөрәжәғәт-ғаризаға ҡул ҡуйған. Мөрәжәғәтте тейешле урынға еткерер өсөн делегат итеп Закир Ғәйетбаев менән Сәйғәфәр Халиковты (Сәид Йәғәфәр, уны ауылда "Сәпә" тип тә атап йөрөткәндәр) тәғәйенләгәндәр.

Йыйылышта ҡабул ителгән документта муллаларға һалымдың күп һалғанлыҡтан, уны кәметеү, мәсетте япмау һәм унда йөрөү, ғәйет ваҡыттарында намаҙ уҡыуҙы туҡтатмау тураһында һүҙ барған. Өлкәндәргә ҡушылып, район властарына Иҫке Кинйәбулат ауылы йәштәре лә хат яҙған. Йәштәр муллаларға ғәйет уҙғарырға мөмкинлек биреүҙе, уларҙың иректәрен ҡыҫмауҙы һораған.

Ауылда динде һаҡлап ҡалыу буйынса ойошторолған ошондай сараларҙың аҙағы бик насар тамамлана. Ошо уҡ йылда "...богомольники Старокинзябулатово хотят завоевать авторитет..." тигән хәбәр таралып китеп, 1930 йылдың 20 майында ошо төбәктә 58 кеше ҡулға алына, быларҙың яртыһы, дөрөҫөрәге, 28 кеше атыла (атылғандарҙың 8 кешеһе Иҫке Кинйәбулат ауылыныҡы), ҡалғандары төрмәгә ябыла йә ҡулак булараҡ, ситкә оҙатыла.

Иҫке Кинйәбулат ауылы халҡына властарҙың "ҡаты үсле" булыуы был ауылдың тарихына бәйле. Алдар, Батырша, Салауат яуҙарында, 1812 йылғы Ватан һуғышында был ауыл ир-уҙамандары айырыуса ғәйрәтлек күрһәтә. Ауылдың яҙма тарихҡа билдәле тәүге исеме - Әликәс. Әликәс Һөйөндөк (ревизия мәғлүмәттәрендә Әликәс "Алкаш" тип күрһәтелгән) һәм уның улы Бикбулат 1755 йылғы Батырша ихтилалында ҡатнаша. Әликәстең тағы бер улы Кинйәбулат Салауат яуында ҡатнаша. Ауылдың тарихҡа билдәле икенсе исеме шул Кинйәбулаттан килә. Хәҙерге исеме - ошо уҡ ауылда тыуып үҫеүсе Буранбай - сәсән һәм йыраусы Буранбай Ҡотдосовтан килә (мин уның ейәне Йәҙгәрхужаның ҡыҙы Хәки-мәнең ейәне булам).

Шулай итеп, ул саҡтағы милиция (ОГПУ) хеҙмәткәрҙәренең беҙҙең ауылға шул тиклем "ҡаныҡыуы"н ошондай тарихи фактор менән генә аңлатып булалыр. Икенсенән, был ауылда ул саҡта бандит исеме тағылған Ғиниәт Рыҫбаевтың тыуып үҫеүе лә золомға сәбәпсе булғандыр. Хәҙерге көндә Рыҫбаевты күреп-белеүселәр иҫән булмаһа ла, уның фотоһы һәм уның хаҡындағы мәғлүмәттәрҙең ҡайһы берәүҙәрҙә һаҡланғанын беләм. Ләкин Рысбаевтың иҫкә алыуҙан берәр төрлө хәл була ҡалһа, тағы ла яуапҡа тарттырырҙар тип ҡурҡаларҙыр. Сөнки Рысбаевтың ауылдашы була тороп, уны тотоп биреүҙә ярҙам итмәгәне, уның менән бәйләнеш тотҡаны өсөн бер ғәйепһеҙ 28 кешене атыу фактын ауыл халҡы яҡшы белә.

### Коммунизм кәрәк булғанмы?

Ошо уҡ ауылдан Дәүләтша Байтуринға, Әбделхаҡ Ғәйетбаевҡа, Исхаҡ Алтынбаевҡа ҡарата билдәләнгән үлем язаһы ун йыллыҡ төрмә менән алмаштырылған. Белеүемсә, лагерҙа бик күп михнәт күрергә тура килһә лә, уларға имен-һау әйләнеп ҡайтырға насип була. Абдулла Хәмитов та ун йылға ебәрелгән, ә 78 йәшлек Ситдыҡ Ғөбәйҙуллин биш йылға Себергә оҙатылған. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, был кешеләрҙең береһе лә енәйәт эшләмәгән. Уларҙың һәммәһе лә ялған күрһәтмәләргә, уйҙырмаларға нигеҙләнеп, бер ғәйептәре лә булмаған көйө атылған, йә иректәренән мәх-рүм ителгән.

58 кешенең барыһы ла бөгөн аҡланған һәм, бик һуңлап булһа ла, ғәҙеллек кире ҡайтарылған. Был бер төркөм кешенең енәйәтен ойоштороусы итеп Закир Ғәйетбаев танылған булған. Уның атаһы Баҡый хәҙрәт булған. Ул 1888 йылда Иҫке Кинйәбулат ауылында тыуған, үҙе ауыл муллаһы, ҡатыны Нәфиғә, улы Бәшир, ҡыҙы Сәкинә, 1930 йылдың 27 февралендә ҡулға алынған. Уны енәйәт эшләүҙә ғәйепләрлек дәлил табылмаған. Фәҡәт үҙе мулла, атаһы хәҙрәт булғаны өсөн генә атыу язаһына дусар ителгәндер, тигән берҙәнбер фекергә, теләһәк-теләмәһәк тә, килергә була. Бындай фажиғәле хәлдең килеп сығыуы, тикшереп тормайынса, судһыҙ-ниһеҙ, ғәйепһеҙ кешеләрҙең яҙмышын йәшерен хәл итеү ул ваҡыттағы эске эштәр органдарының намыҫына бәйләнгән.

Муллалар бер кемдә лә насарлыҡҡа өндәмәгән, киреһенсә, йәштәрҙе тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнаған. 70 йылдан артыҡ коммунизм төҙөйбеҙ, тип көнтөн ал-ял белмәй эшләһәк тә, күпме көтһәк тә, коммунизм таңдары балҡып атманы, кешеләрҙең тормошо бер ҙә яҡшырманы. Хәҙер килеп, 30-сы йылдарҙа емерелгән мәсеттәрҙе, сиркәүҙәрҙе кире аяҡҡа баҫтырабыҙ, дингә ҡайтабыҙ. Иншалла, донъялар имен торһа, тауҙан түбәнгә тәгәрәгән ил арбаһын туҡтата алһаҡ, йәмғиәтебеҙҙә ыңғай үҙгәрештәр булыр, тормошобоҙ яҡшырһа, коммунизм тигән хыялдың кәрәге лә булмаҫ.

Үҙ ваҡытында ҡулға алынған ауылдашым Ғөбәйҙуллин Ситдыҡ Заман улының тикшереүсе һорауына яуап итеп: "Мин үҙ көсөм менән, туғандарым ярҙамында бер өйөр йылҡы тоттом, өс бүлмәле, ишектәре айырым бер өй, тағы бер өй һалдырҙым. Малымдың барыһын да, өйҙәремде лә советтар алды, хәҙер минән һеҙгә нимә кәрәк, өҫтөмдәге тире тунымды, киндер күлдәк-ыштанымды һалып бирәйемме? Яланғас ҡалдырһағыҙ ҙа, ризамын. Тик өйөмә ҡайтып үлергә рөхсәт итегеҙ. Совет власына насарлыҡ эшләмәнем һәм эшләмәйәсәкмен, ҡартайғанмын", тип яҙғаны иҫкә төштә. Ауыл халҡы Ситдыҡ бай тураһында:"Уның малынан башҡа күҙгә күренерлек бер нәмәһе лә булманы, үҙе ҡартайғас, берике батрак ялланы, уларға яҡшы мөғә-мәләлә булды",- тип һөйләй торғайны. Ситдыҡ ҡарттың хәҙерге Ҡаратал ауылы янында утары булған, ул ерҙе уға Столыпин реформаһы сыҡҡас биргәндәр. Быға ҡәҙәр 100 йыл буйына утарҙың хужаһы Хәмит ҡарт булған. Ситдыҡ ҡарттың өйөн мәктәп иткәс, беҙ шунда уҡының. Хәҙер иһә уның өйө башҡа өйҙәр янында меҫкен булып күренә. 1930 йылдың апрелендә был өйгә тентеү үткәргәндәр. Унда Баймаҡтан милиция начальнигы Солтан Фәйзуллин, ОГПУ работнигы Перочинский булған. Йорт хужабикәһе Йомабикә инәй тентеүселәргә: "Бөтә байлығымды алығыҙ, әммә бабайға теймәгеҙ, уны ҡалдырығыҙ", - тип әйткән. 78 йәш-лек Ситдыҡ бай 5 йылға һөр-гөнгә ебәрелгән. Ололар әйтеүе буйынса, ул был язаны үткәрепме, әллә алданыраҡ ҡайтыпмы, үлгән булырға тейеш.

### "Рыҫбай бандит түгел"

1920 йылдар аҙағында Иҫке Кинйәбулат ауылынан Ғиниәт Рыҫбаев атлы ир-уҙаман Бөрйән, Мораҡ, Верхотор урмандарында Совет власы эҙәрлекләүенән ҡасып йөрөгән. Уға һәр урында аҙыҡ-түлек менән, ҡуныр урын, ат биреп, ярҙам итеп торғандар. Ҡайһы бер ауылдаштары уның менән аралашҡаны өсөн судһыҙ-ниһеҙ атылған. Уны "бандит Рыҫбаев" тип эҙәрлекләгәндәр, әммә Рыҫбаев бандит булмаған. Ул бер кемде лә таламаған, юлбаҫарлыҡ менән шөғөлләнмәгән. Ул Башҡорт милли хәрәкәтендә йөрөгән, Әхмәтзәки Вәлиди ғәскәрендә 4-се Һаҡмар атлылар полкының командиры булған. Аҙаҡтан ауылына ҡайтып йәшәгән. Сөләймән Мырҙабулатов ихтилалында, Хажиәхмәт Унасов еткәселегендәге хәрәкәттә лә уның ҡатнашыуы билдәле. Ә инде Башҡорт ғәскәрендә йөрөүселәрҙе эҙәрлекләү башланғас, 1929 йылда уны ҡулға алалар һәм Йылайыр төрмәһенә (исправдомға) бикләйҙәр. Рыҫбаев унан ҡасып китә һәм Ямаш утарында йәшәгән ҡәйнәһе янына төндә килеп, ашап-эсеп, көндөҙҙәрен урманда йәшеренеп йөрөгән (дөрөҫөн әйткәндә, уның яҙмышы данлыҡлы ауылдашы, сәсән Буранбай Ҡотдосовтың яҙмышына оҡшаш). Ғиниәт ҡәйнәһе өйөнә килә алмаған сағында уға аҙыҡ-түлекте урмандағы йәшеренгән урынға Лоҡман Раев атлы кеше ташый. Рыҫбайға тағы ла ауылдаштары Закир Ғәйетбаев, Хәлил Раев, Мәлик Әминев, Вәсих Юлъяҡшин, Мөхәмәт Байрамғолов, Хажим Хәмитов, Сәйғәфәр Халиков, Яҡуп Үтәбаев атлы ир-уҙамандар ярҙам күрһәтә. Уларҙы, барлығы 8 кешене, 1930 йылдың 20 майында аталар. Ғөмүмән, Рыҫбаевтың исемен телгә алған өсөн генә күптәр "халыҡ дошманы" мөһөрө тағылып атыла, һөргөнгә ебәрелә.

Рыҫбайҙы һәр урында ла һағалап торалар, барлығы 6 тапҡыр

**✓ Баймаҡ, Күгәрсен, Бөрйән, Әбйәлил райондары ауылдарынан 123 кеше ҡулға алынып, судһыҙ-ниһеҙ атылған, йә лагерға ебәрелгән. Уларҙың барыһы ла милләте буйынса башҡорт булған.**



ҡулға алалар. Алтыһында ла ул ҡасып китә. Уға бер нисә тапҡыр аталар ҙа, тик һәр осраҡта ул, ниндәйҙер хикмәт менән, иҫән ҡалыуға өлгәшә. Хәтеремдә, бала сағымда ауылда "Рыҫбай ике йөрәкле булған, шуға уны үлтерә алмағандар", тигән хәбәр таралғайны. Беҙ, 6-7 йәшлек малайҙар, Ғиниәт Рыҫбаевтың улы Ғатауҙан "Атайың, ысынлап та, ике йөрәклеме?" тип һорай торғайнык. Ғатау "Белмәйем", тигәндә аңлатып, башын ғына һелкә торғайны.

Элекке полк командирының һуңғы, етенсе тапҡыр тотолғандан артабанғы яҙмышы билдәле түгел. Күрәһең, уны милиция хеҙмәткәрҙәре тотҡан ваҡытта атып үлтергәндәр. Әгәр ҙә ул ҡайҙалыр оҙатылһа йә ниндәйҙер ҡарар нигеҙендә атыуға хөкөм ителһә, был хәл тарихи документтарҙа сағылыш табыр ине.

## "Урмансылар эше"

Архивта "Урмансылар эше" тип теркәлеп ҡалған эш тә урманда ҡасып йөрөүсе Ғиниәт Рыҫбаевты эҙләүгә бәйле. Урманда бесән эшләп ятыусы Әсмәндиәр Хәмитовтың ҡыуышында кемдер берәү Рыҫбай бандитҡа оҡшаған кешене күреп ҡалған. Ҡыуышта тағы ла Ғәбсабир Хәмитов һәм Һөйөндөк Байрамғолов тигән кешеләр булған. Тиҙҙән Әсмәндиәр һәм Ғәбсабир Хәмитовтар ҡулға алына һәм 10-ар йылға иркенән мәхрүм ителә. Әсмәндиәр Эйек, Ҡыҙыл йылғаларында һал ағыҙыуҙа йөрөгән.

Байрамғолов Һөйөндөк колхозда етәксе вазифалар башҡара, ферма мөдире, колхоз рәйесе ярҙамсыһы булып эшләй. Көслө ихтыярлы кеше була ул, "мин берәүҙән дә совет власына ҡаршы насарлыҡ эшләүе тураһында белмәйем", тип яуап бирә ул һорау алыусыларға. Уға тештәре үтмәй, ул репрессияға эләкмәй ҡалып, Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, үҙе теләп һуғышҡа китә һәм һәләк була.

"Урмансылар эше" буйынса барлығы хәҙерге Баймаҡ, Күгәрсен, Бөрйән, Әбйәлил райондары ауылдарынан 123 кеше ҡулға алынып, судһыҙ-ниһеҙ атылған, йә лагерға ебәрелгән. Уларҙың барыһы ла милләте буйынса башҡорт булған.

## "Йылҡы заводы эше"

"Йылҡы заводы эше" буйынса хөкөмгә тарттырылған ауылдаштарым Нәжметдин Алтынбаев һәм Исламғол Нәүширбановтар тураһында матбуғат биттәрендә яҙғайным инде. Алтынбаев Н.Т., 1884 йылғы, ғаиләһендә 4 балаһы булған, Ленин исемендәге колхоз ағзаһы, 1937 йылдың декабрендә НКВД-ның "Өсәү" ҡарары менән атыу язаһына дусар ителгән. Был ҡарар 1938 йылдың 17 февралендә 20 сәғәт 40 минутта үтәлгән. Был көндә атылғандарҙың һәммәһен Өфөнөң Сергеевск зыяратына алып барып, бер соҡорға күмгәндәр. Акт төҙөлгән, уға сержант Ковалович ҡул ҡуйған. Н. Алтынбаев 46-сы һанлы йылҡы заводы директоры Йосоп Ҡунаҡбаев ойошторған контрреволюцион ойошмала актив ҡатнашыуҙа, уның ҡушыуы буйынса был ойошмаға Нәүширбановты, Абдулла Хис-мәтуллинды һәм башҡаларҙы (барлығы 5 кеше) йәлеп итеүҙә ғәйепләнгән. Уға Ҡунаҡбаев ҡорал бирергә вәғәҙә иткән, ә үҙенә бер эйәрле ат әҙерләргә ҡушҡан: "Тиҙҙән совет власына ҡаршы сығасаҡбыҙ, японлар һуғыш башлауҙы ғына көтөргә кәрәк", - тип әйтә була. Асылда иһә, Баймаҡ районы территорияһында бер ниндәй ҙә контрреволюцион ойошма булмаған. Был эш буйынса ҡулға алынғандарҙан туҡмау юлы менән, үлтереү менән ҡурҡытып, өсәр тәүлек аяғөҫтә баҫтырып, булмаған ғәйебен таныуҙы талап иткәндәр. Йәберләнеүҙән һәм туҡмауҙан хәлһеҙләнеп, иҫтән яҙған кешеләрҙең өҫтөнә һалҡын һыу һибеп, ваҡытлыса аңына килгән арала алдан уҡ эште тикшереүселәр үҙҙәре яҙған протоколға ҡул ҡуйырға мәжбүр иткәндәр. Нәжметдин Алтынбаев та туҡмалыу һәҙәмтәһендә үҙен-үҙе енәйәт эшләүҙә ғәйепле һанаған.

Нәүширбанов И.И., 1896 йылда тыуған, Ленин исемендәге колхозда бригадир булып эшләгән, 4 бала атаһы, ҡулға алынған ваҡытта Зәбих, Фәйзрахман, Шәмсинурҙан башҡа ун ғына көнлөк Әмир атлы малайы ла булған. Ул Ғәйнислам Буранбаевтың бер туған ҡустыһы, революцияға ҡәҙәр мировой судья булған. Шулай уҡ ҡаты язалауҙарҙы күтәрә алмайынса, булмаған ғәйебен танырға мәжбүр булған. Граждандар һуғышы ваҡытында Алтынбаев та, Нәүширбанов та аҡтар менән бергә совет власына ҡаршы көрәшкән, тип тә күрһәтелгән. Бәлки, улар Зәки Вәлиди ғәскәрендә йөрөгәндер. Быны асыҡларға кәрәк.

Улар менән бергә ауылдаштары Йәрмөхәмәт Юлъяҡшин да ун йылға иркенән мәхрүм ителгән. Уның да ғәйәбе бер ниндәй ҙә дәлил менән нығытылмаған. Тағы ла бер ғәжәпләнерлек факт. Исламғол Нәүширбановҡа тәғәйенләнгән яза СССР НКВД-ның айырым кәңәшмәһенең 1940 йылдың 25 мартындағы ҡарары менән 10 йылдан 3 йылға тиклем кәметелгән. Был ҡарар нигеҙендә ул 1940 йылдың 9 ноябрендә тыуған ауылына ҡайтырға тейеш булған. Ләкин Исламғол ҡайтмаған, бәлки, ҡарар уны эҙләп тапҡансы үлгәндер, йә был ҡарар үҙе атылған Ежов ваҡытында сығарылғанға, ул урындағы лагерь етәкселере тарафынан үтәлмәгәндер, тип фаразларға ҡала. Улай тиһәң, шундай уҡ шарттарҙа Темәстән срогы кәметелгән А.М. Сәлихов тигән кеше ауылына әйләнеп ҡайтҡан. Ә бына Байым ауылынан шулай уҡ 10 йыл хөкөмө 3 йылға кәметелгән Х.Х. Байымов тигән кеше төрлө лагерҙарҙа тәүге бирелгән язаны тулыһынса үтәп, 1947 йылдың 30 ноябрендә генә тыуған ауылына әйләнеп ҡайта алған.

"Йылҡы заводы эше" буйынса хөкөм ителгәндәрҙең эше яңынан тикшерелеп, хөкөм ителгәндәрҙән 60 кеше 1957 йылдың 10 июнендә БАССР Верховный суды Президиумы ҡарары менән тулыһынса аҡланған, ә ҡалған 28 кеше 1959 йылдың 6 мартында реабилитацияланған.

Ул фажиғәле йылдарҙа законһыҙлыҡ хөкөм һөргән. Атылғандарҙың туғандарына "яза үтәгән ваҡытта фәлән йылда үлде" тип алдағандар. Яза срогын үтәүселәрҙе лә ирекҡә сығармағандар, ҡарарҙар ваҡытында үтәлмәгән. Мин Ҡаратал ауылында йәшәгән Исмәғил Назаровтың һорауы буйынса "Йылҡы заводы эше" буйынса 10 йылға хөкөм ителгән атаһы Тажетдин Хоҙайназаров яҙмышы менән ҡыҙыҡһындым. Уға ҡарата яза үтәүҙән ҡотолдороу тураһындағы 1940 йылдың мартындағы ҡарар 4 ай буйына үтәлмәгән. "Эш" кә "Т.Ғ.Хоҙайназаровтың 1940 йылдың 3 июлендә үлеүе сәбәпле ҡарар үтәлмәне", тигән ҡош телендәй генә справка теркәлгән. Хоҙайназаров Магадан ҡалаһында булған.

## Әсәт Ҡужаҡаев

Сталиндың шәхес культы йылдарында репрессияланған кешеләр араһында Иҫке Кинйәбулатҡа ҡүрше Сыңғыҙ ауылы кешеһе Әсәт Ҡужаҡаев та бар. Совет власының тәүге йылдарында ул Баймаҡ, Әбйәлил райондарында яуаплы постар биләй. Ҡулға алынғандан һуң ОГПУ вәкиле исеменә хат яҙып, ул үҙенең ни өсөн яуапҡа тарттырылыуын аңлатыуҙы һорай. Совет власы өсөн актив көрәшеүселәрҙең береһе булараҡ, үҙен тиҙҙән ҡайтарып ебәреүҙәренә ышана. Төрлө инстанцияларға мөрәжәғәт итеп, үҙенә совет гражданы хоҡуҡтарын кире ҡайтарыуҙы үтенә.

Әммә уның һүҙенә ҡолаҡ һалыусы табылмай. Уны 1930 йылдың 20 мартындағы ҡарар менән атыуға хөкөм итәләр. Ҡарар шул көндә уҡ бойомға ашырыла.

Әсәт 13 йәшендә етем ҡала. Хужалыҡты үҙ көсө менән алып бара. 1912-1918 йылдарҙа Баймаҡ баҡыр иретеү заводына утын әҙерләп оҙатыу менән шөғөлләнә. 1918-1919 йылдарҙа ауыл советы рәйесе, 1919-1920 йылдарҙа Бөрйән-Түңгәүер кантонында вербовщик, Баймаҡ волосында бүлек мөдире булып эшләй. Бер үк ваҡытта ул бандиттарға ҡаршы көрәш комиссияһы рәйесе булып һанала. 1921 йылғы аслыҡ осоронда уны аҙыҡ-түлек бүлеү комиссияһы етәксеһе итеп ҡуялар. 1922 йылдан башлап 1930 йылдың 4 мартында ҡулға алынғанға тиклем Башҡортостан урман тресының Ҡыҙыл йылғаһындағы һал ағыҙыу конторяһы начальнигы булып эшләй, хәҙерге Әбйәлил районының Амангилде ауылында йәшәй. Ғаиләһендә өс бала була. Бәлки, улар иҫәндер, моғайын, ейәндәре лә барҙыр.

**Дәминдәр ХӘМИТОВ,**
**юстиция полковнигы.**

**Шулай итеп...**

**Әликәс-Иҫке Кинйәбулат-Буранбай ауылы халҡыбыҙ тарихының "торомбаш яҙмышлы" ауылынан иҫәпләнә. Ундай ауылдар меңәрләгән. 1755 йылда Батырша яуы еңелеп, ихтилал етәкселәренең береһе 76 йәшлек Әликәс Һөйөндөк һәм уның яуҙаштары ҡулға алынғандан һуң Әликәс ауылы йөҙәрләгән Бөрйән ырыуы ауылдары менән бергә яндырыла. Аҙаҡ ул Иҫке Кинйәбулат исеме менән киренән ҡалҡҡас, шул уҡ ауылдағы балалары, ҡатыны, туғандары янына ҡайтыр хоҡуғы булмаған Буранбай сәсәндең һағышы халҡыбыҙ йыр сәнғәтенең феномены булған "Буранбай", "Сәлимәкәй", "Тәфтиләү" кеүек йырҙар булып яңғырай. Ә XX быуатта иһә Ғәзраил был ауыл халҡын ана нисек, ҡәһәрле "шәхес культы" золомонан күпкә алдараҡ аулай башлай.**

*ЗАУЫҠ*

**Мөнир ИШБУЛАТОВ**

# ЙОНДОҘ ЭСТАФЕТАҺЫ

**(Поэманан өҙөк)**

***Бөйөк Ватан һуғышы осоро малайҙарының ҡаһарманлығы алдында башымды эйәм.***

I

Иҙел тулҡынында төн тирбәлә,
Томан шыуа өйкөм ҡамышҡа.
Әйтерһең дә төнгө наҙға сумып,
Аҡҡош менән аҡҡош ҡауыша.

Күк даръяла көмөш ҡыйыҡ төҫлө
Ай бәүелә ятып болотҡа.
Йондоҙ-күҙҙәр биҙәп күк көмбәҙен,
Сер иленә әйҙәй алыҫҡа.

Кемдәр генә йәшлек таңдарында
Төпһеҙ күккә ҡарап тормаған.
Һөйгән йәре өсөн хыялында
Йондоҙ тәхеттәрен ҡормаған.

Һәр бер быуын тәүге һөйөү хисен
Ҡош юлына ҡарап ашырған.
Үҙ йондоҙон эстафета итеп
Яңы ғашиҡтарға тапшырған.

Бөгөн иһә Иҙел ярҙарында
Беҙҙең ҡыҙҙар, беҙҙең малайҙар.
Беҙ тапаған һуҡмаҡтарға сығып
Үҙҙәренә йондоҙ һайлайҙар.

II

Беҙ булманыҡ яуҙа,
Тәнебеҙҙе
Имгәтмәне дошман ҡоралы.
Беҙҙең быуын ул саҡ сабый ине,
Ә шулай ҙа беҙ ҙә яралы.

Ҡитте һалдат,
Йәшәү рухын даулап,
Именлеген һаҡлап йортоноң.
Үҙ иңенән алып,
Беҙгә һалып
Бәрәкәтен нигеҙ ҡотоноң.

Ил яҙмышын ҡурсып ҡара көстән,
Аттырырға Еңеү иртәһен,
Аҡ диңгеҙҙән Ҡара диңгеҙгәсә
Йыртып инде һалдат ер тәнен.

Беҙгә баҡты оло өмөт менән
Планетаның бөтә ҡитғаһы.
Бөгөлмәне ҡара дауылдарҙа
Ун йәшлек ир - донъя тотҡаһы.

Китап серен ситкә ҡуйып торҙоҡ,
Икмәк төмен тойҙоҡ - ер һерҙөк.
Дәфтәр юлы итеп бураҙнаға
Өмөт орлоҡтарын төшөрҙөк.

Яумаһа ла Урал итәгенә
"Фердинант"тың суйын туптары,
Етек сәсле тилбер малайҙарҙың
Һирәгәйә төштө сафтары.

Тапҡыр телле сәсән ҡорҙашыбыҙ
Йөгө менән ауҙы ҡаранға.
Бейеүсебеҙ ҡалды һыңар аяҡ,
Юл юғалтып төнгө буранда.

Ай ҡыҙына ғашиҡ дуҫыбыҙҙың
Ҡыйыҡ ере ҡалды һөрәһе...
Ҡара хәбәр бер көн
Дүрт агайҙан, -
Шартлап һүнде бала йөрәге.

Быуын талып ауған саҡтарҙа ла,
Ил шөһрәтен ергә йыҡманыҡ.
Атайҙар һәм улдар бер фронтта
Фашизмды бергә туҡманыҡ.

Бармаһаҡ та утлы атакаға,
Илебеҙҙең булдыҡ һалдаты.
Хаҡлы шуға беҙҙең эшсән ҡулда
Аҡ бәхетле тормош мандаты.

Аҡыҡ төймә ҙурлыҡ йөрәктәргә
Ер шарындай хыял һыйҙырып,
Үтә инек киске урамдарҙан
Һаҡау телле гармун һыҙҙырып.

Һары таңдан эшкә йүгергәндә
Ялҡын баҙрап ҡояш ҡалҡыуы.
Була ине беҙҙе һөйә-һөйә
Мәскәү йондоҙоноң балҡыуы.

Өмөт булды беҙҙең йондоҙобоҙ,
Ил-Әсәбеҙ ныҡлы таяныс.
Дошман баҫҡан йорттар кире ҡайтһа,
Башҡорт өйө өсөн ҡыуаныс.

Баҫыуҙарҙа үттек тормош фәнен,
Асманаҡ та китап кистәрен.
Һабан, тырма,
ураҡ менән яҙҙыҡ
Ватан тарихы
ның биттәрен.



*✓ Шулайтып, ҡарап йөрөһәм, бер тимер ишек күреп ҡалдым. Асып ебәрһәм... һыртын ҡуйып, Гитлер тора. Миндә эше лә юҡ, ҙур бер тимер һандыҡтан икенсе тимер һандыҡҡа аҡса бушатып тора.*

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

# ҺАЛДАТ ӘКӘМӘТТӘРЕ,

## йәки Кирам ағай менән Әхмәтулла ағайҙың һуғыш хәтирәләренән



**Мәғлүмдер ки, һәр ауылдың үҙ мәрәкәсеһе була. Уны хатта ауыл Хужа Насретдины тип тә йөрөтәләр. Ундай кешеләрҙең күптәре: "Тукта әле, кешегә бер ҡыҙыҡ яһайым. Көлөшөп алһындар әле," - тип әйтеп тә тормай. Юҡ, киреһенсә, уларҙың етди ҡыланыуы ла, шапырына биреп, булмағанды булды, тип, яһап һөйләүе лә көлкөгә сәбәпсе булыусан. Бына шундайҙарҙың барыһын да кәүҙәләндереүсе яҡташтарым хаҡында бер ике кәлимә.**

### Кирам ағайҙың түчнәй ваҡытты түчнә әйткәне

Беҙҙең ауылдың күршеһе Иҫке Монасип (Һарт) тигән ауылда Исмағилев Кираметдин тигән ағай бар ине. Аҙаҡ мәғлүм булыуынса (ысынмылыр, бушмылыр), һуғышта ул ерләү (похоронный) командаһында хеҙмәт иткән. Әммә яуҙан ҡайтҡас (яңылышмаһам, яраланыпмы, нисек, Еңеүгә тиклем үк ҡайтып, ферма мөдире булып эшләй ине), бынан тегеһен дә, быныһын да һорашалар, яу хәлдәрен белешәләр. Ул ваҡытта ауылда радио юҡ, ысвит юҡ, сәғәт юҡ. Бөтә яңылыҡты килгән-киткәндән дә, үткенсенән һәм телефонлы кәнсәләрҙән белешеп тора халыҡ. Кирам ағай яуҙан ҡайтып төшкәс, ауылда быны ҙур ваҡиғалай күреп, былай тип һөйләнгән халыҡ:

- Ул һуғыштан кеҫә сәғәте алып ҡайтҡан...

- Уның ҡул сәғәттәре лә бар икән...

Тура килгәнендә, кәрәкһә-кәрәкмәһә лә, ауылдаштары бынан ваҡыт һораша икән. Әллә ҡайҙан уҡ ялтырап күренеп торһон өсөн, ене төрөлгән беләгендәге ат башындай ҡул сәғәтенә ҡарап ала Кирам ағай:

- Аһ, быныһы туктаған, ахыры, - тип кәләфейенең сәғәт һала торған кескәй кеҫәһенә тығыла. Унан сылбырлы сәғәт сығарып, ҡарап ала ла:

- Атаҡ, быныһы артта ҡалған икән, - тип ҡуя, ти. Шунан инде ваҡыт һораусыға һыртын ҡуйып, эске салбарының кеҫәһенә тығыла, унан - өсөнсөһөнә. Һуғыштағы хеҙмәтенең хикмәте: сәғәттәре һанынса кәләфейе, кәләфейе һанынса - сәғәте. Һуңғы сәғәтен һелкеп-һелкеп тора ла:

- Әллә контузия ғәләмәте, әллә ни. Заводить итергә онотола ла ҡуйылына, - тип, һуңғы сәғәтен иң эстән кейгән салбары кеҫәһенә тыҡҡас, ҡояшҡа күҙ һалып:

- Түчнәй ваҡыт - бер! - тип ҡуя торған булған, ти (Немецтың штампланған сәғәттәрен йыйған да йыйған имеш, ағайыбыҙ).

### Кирам ағайҙың Кутузов менән бергә хеҙмәт иткәне

Һуғыш хәлдәре хаҡында һүҙ сыҡҡанда, шыттыра биреп һөйләргә әүәҫ икәнен белеп алған егеттәрҙән берәү:

- Кирам ағай, һуғышта күпте күргән кешеһең, - тип һалпы яғына һалам ҡыҫтыра биреп, һүҙ башлауға, Кирам ағай:

- Күреләнде инде, күреләнде, - тип ҡуя икән, тамағын ҡыра биреп.

- Кутузовты күрергә тура килмәнеме?

- Күк тура килмәһен! Шәп кеше ине. Осраған һайын: "Йә, Кирам ағай, хәлдәр нисек? Еңгәй хат яҙамы? "- тип һорашып тора торғайны. - Урыҫ булһа ла, үҙ башҡорттондан артыҡ ине...

- Теге, Верховныйҙың йөҙ грамын да бергә күтәргән сағығыҙ булғандыр әле?

- Бына һинең менән мин ултырған һымаҡ яҡын ултыр ҙа, күк булмаһын! Булды. Ҡайһы ваҡытта; "Кирам ағай, киленеңде уйҙап, эс бошоп китте әле," - тип, Верховныйҙан үҙенә тейгән өлөштө лә минең кружкаға ҡоя ла: "Йә берҙе йырлап ебәр әле, яратам мин башҡорт йырҙарын", - тигән булыр ине. Мин ҡайтҡанда, илап тороп ҡалды, бахыр...

Шулай итеп, Кирам ағай улайбылай ғына кеше түгел ине. Уның хеҙмәттәше Кутузов булған, Кутузовтың серҙәше Кирам ағай үҙе булған.

### Әхмәтулла ағайҙың әфисәрский повар булғаны

Һуғыштан һуң колхоз эше менән ҡырҙа ятҡандамы, ҡайҙа, беҙҙең Нәбиҙән Хисмәтуллин Әхмәтулла ағай нәүбәт буйынса әҙерләгән аш-һыуҙы ауыҙ иткәндә, егеттәр быны бик маҡтай икән.

- Ошо Әхмәтулла ағай әҙерләгән аш гел тәмле була ул.

- Теленде йоттороп, өнһөҙ ҡалдырмалы инде!

- Аштың ашы кем ҡулы тейеүгә ҡарай шул ул!

- Ә кәк же, әфисәрский повар дәрәжәһенә тиклем үрләгән кеше әле ул был дәдәгеҙ, - тип әйтер булған дежур ашнаҡсы бындай саҡта. Йүкә шына үҙенең тәьҫир итеү һөҙөмтәһен күрһәткән саҡтарҙа Әхмәтулла ағай ашнаҡсы бурысын нәүбәтһеҙ ҙә атҡарыр булған ...

### Әхмәтулла ағайҙың Гитлер менән осрашҡаны

Әхмәтулла ағай һуғышта күпте күргән. Хатта Гитлер менән осрашҡан кеше ул. Был турала бына нисек һөйләр булған ул.

... Немецты өтөп алып киттек бит инде бер ваҡыт. Көнөнтөнөн ҡыуылына был кафырҙы. Һыпырталар ғына. Шулайтып, Берлинға ла барып инелде. Кругом - атыш та ҡыҫҡырыш. Тегенән дә аталар, бынан да, ҡыйыҡтан да, аҫтан да. Бер мәл атыш бәләкәй тымғайны, кит тә бар мин теге Рейхстаг тигәндәрен ҡарарға. Политруктар аңлатҡандан беләм бит инде. Ул где-то Центрҙа булырға тейеш. Тик яңылышмаҫҡа ғына кәрәк. Ҡала һиңә - ауыл түгел. Өйҙәрҙе берберeһенә оҡшатып һалалар. Рейхстаг тигәне кеүек йорт та булыуы бар бит. Ҡалайтһам иттем, немецтең бер гәзитенең өҙөгөн табып алдым. Ҡараһам, мин эҙләгән йорттоң һүрәте тора. Карта буйынса бараммы ни! Һүрәтте тотоп алынылған, китеп барыла, китеп барыла, туктамайса һис тә һис. Танының бит тегене. Хәҙер уратып ҡарап йөрөйөм быны, ҡарап йөрөйөм. Шулайтып, ҡарап йөрөһәм, бер тимер ишек күреп ҡалдым. Асып ебәрһәм... һыртын ҡуйып, Гитлер тора. Миндә эше лә юҡ, ҙур бер тимер һандыҡтан икенсе тимер һандыҡҡа аҡса бушатып тора. Аҡсала эш юҡ. Эстән генә: "Эһ-һә, элэктеңме, спулыш!" - тип, тегенең ата-инәһен дә телгә ал да мин, бара килеп быныҡ к...тенә тип тә ебәр! Типкән ыңғайға, теге кәксәйеп китте лә башы менән оло тимер һандыҡты төкөнө. Кәксәймәҫ ерҙән кәксәйерһең! Төкөмәҫ ерҙән төкөрһөң! Һуғыш башындағы кеүек обмоткалы ботинка түгел ине шул ул ағайығыҙҙың аяғында. Әфисәрский күн итек. Етмәһә, уның өр-яңы сағы. Дағаһы ла ине. Мин типкәс, теге ништәй инде? Әбижәтсә итә: "Ошо Хисмәтуллин булһа, к...тҡә тибер ҙә йөрөр ул!" - ти.

Типтем шул. Ҡайҙа тибергә һорап тора буламмы?!

### Әхмәтулла ағайҙың осоусы була яҙғаны

- ...Шулайтып, һуғышып йөрөп ятыла. Бер мәлде миңә хәбәр итәләр, комполканың связнойы һине эҙләй, - шулай тип башлана, ти, Әхмәтулла ағай сираттағы яу хәтирәләрен.

- Шунан, шунан, - тиҙәр икән егеттәр.

- Шунан ни, бойороҡ бирәм: "Әйтегеҙ унда! Керһен, рас мине эҙләгәс".

Керә связной:

- Иптәш Хисмәтуллин, һине срочно штабҡа саҡырталар, - ти, честь биреп тороп.

Барҙым штаб тигәндәренә. Ҡараһам - күм-м-ә-ә-к йыйылышып киткәндәр. Аҡ халатлылары ла бар. Петлицаһына генерал йондоҙо таҡҡандары ла бар. Генералдарҙың өс йондоҙлоһо үҙе тороп күрешә лә:

- Йә, иптәш Хисмәтуллин, хеҙмәт барамы? Йонсотмаймы, асыҡтырмаймы?

- Никак нет! - тим. "Йонсорға ваҡыт юҡ әле ул, немец теңкәгә тейә", тип әйтергә итәм дә ул, тартындыра. Не положено, етмәһә. Оҙон тәбәрәккә төшөп, гәпләшер ваҡыт түгел.

Шунан былар минең иңемде, буйымды, ауырлығымды үлсәп тороп, ҙу-у-ур ҡаҙан эсенә ултырттылар. Шул хәтлем ҙур ул ҡаҙан. Әгәр унда аш бешерһәң, ошо беҙҙең өс ауылдан торған Сталин колхозы халҡы туйыр ине. Шул арала ҡумаҡлап тороп тотондолар бит былар ҡаҙанды өйрөлтөргә. Эй өйрөлтәләр, эй өйрөлтәләр. Шунан һорайҙар:

- Башың әйләнәме, иптәш Хисмәтуллин?

Шунан тағы тотондо былар өйрөлтөргә, шунан тағы һорайҙар:

- Башың әйләнәме, иптәш Хисмәтуллин?

- Юҡ, - мин әйтәм.

- Улай булғас, һин лутщик, иптәш Хисмәтуллин! - тинеләр.

- Слушаюсь! - тигән булдым генералға.

- Шунан, шунан?

- Шунан ни, һуғыш ҡыҙып китте. Минең ҡайғым да онотолдо, ахыры. Тегеләй булһа, бер нәмә итеп, ярапалан менән ҡайтып төшөләнә ине, ҡустылар, Нәбигә...

**Бөрйән районы Иҫке Монасип һәм Нәби ауылдарында ишеткәне буйынса, Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ баҫмаға әҙерләне.**

*БАЛАҢА УҠЫ!*

## КИРБЕС

Борон заманда йәшәгән, ти, Морат исемле ярлы кеше. Ул Аллаһҡа ныҡ ышанған һәм бик әҙәпле булған. Бер ваҡыт өй стенаһын ремонтлағанда ул кирбес формаһындағы алтын тапҡан. Шатлығының сиге булмаған уның.

"Һиһайәт, ярлылыҡтан ҡотолдом! Үҙемә ҙур йорт төҙөп ултыртасаҡмын, иҙәндәре ап-аҡ мәрмәрҙән буласаҡ... Баҡсаһында матур гөл-сәскәләр үҫеп, күҙҙең яуын алыр. Төрлө емеш бирґән ағастар ултыртырмын, уларҙың ботаҡтарында матур - матур ҡоштар һайрап ултырыр, бар ғәләмгә моң таратыр",- тигән татлы уйҙар менән Морат йоҡоға сумған.

Икенсе көнөнә төшөндә тағы ла матурыраҡ нимәләр күргән: йәнәһе, уның өйө тулы хеҙмәткәрҙәр...

Көн һайын шулай хыял диңгеҙендә йөҙөп, Морат бар донъяһын онота: ашамай ҙа, намаҙҙы ла онота, барлыҡ сауаптарҙы биргән Аллаһы Тәғәлә хаҡына рәхмәт сүрәләре лә уҡымай.

Бер ваҡыт ҡала буйлап йөрөгәндә Морат зыярат ситендә кирбес һуҡҡан бер кешене осрата. Был кеше ерҙән балсыҡ ҡаҙып алып, уны һыу менән ҡушып, кирбес өсөн формаларға һалып тора икән. Ике ир һөйләшеп китә һәм эшсе Моратҡа ныҡлы кирбестәр эшләүҙең серен аса:

- Зыяраттағы балсыҡтан эшләнгән кирбестәр ныҒыраҡ була һәм оҙаҡ хеҙмәт итә.

Был һүҙҙәр Морат өсөн аяҙ көндә күк күкрәү кеүек яңғырай.

- Эх, ахмаҡ! Һинең ҡалдыҡтарыңдан да бит кирбес эшләрҙәр, килер шул көн! Ҡулыңа алтын килеп эләккәйне, һин башыңды юғалттың. Намаҙҙы ла, сүрәләрҙе лә онотто. Аҙым һайын һин үлемгә яҡыныраҡ була бараһың. Хыялдарыңды онот! Аллаһы Тәғәлә ебәргән сауапты дөрөҫ ҡуллан, теләһә нимәгә әрәм итмә!

Шул ваҡыт көндөҙгө намаҙға саҡырыу ишетелә. Морат күп уйлап тормайынса, ихлас йылмайып, мәсет яғына юллана...

Морат Бәйғәмбәрҙән: "Уххуд тауындай алтыным булһа, уның миндә өс көндән артыҡ тороуын теләмәҫ инем", - тигән хәҙисен тәүҙән үк белһә икән дә бит...

**✓Ғайса бәйғәмбәр ғәләйһиссәләм, беренсе булған аҙаҡҡа ҡала, тигән. Уның асыштарының береһе ошолай яңғырай: "Баҫалҡылар фатиха алғанға күрә, уларға ер мираҫ булыр".**



ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

# КӨМӨШ ҺАУЫТТАР ҘА...

## һаулыҡҡа зыян килтерә

**Химия күҙлегенән ҡарағанда, борщ, рассольник, солянка кеүек аштар һәм башҡа төрлө тоҙло һәм әсе аҙыҡтар нимә һуң ул? Һелтеләрҙең көсһөҙөрәк ҡатнашмаһынан башҡа бер ни ҙә түгел. Әгәр ҙә был аҙыҡ төрҙәрен металдан эшләнгән һауытта бешерһәң, улар үҙ-ара тәьҫир итешеп, кеше өсөн зарарлы тоҙҙар барлыҡҡа килтерергә, әкренләп организмға өҫтәлә барып, уны ағыулай башларға мөмкин. Нимә эшләргә? Үҙебеҙ ҡулланған һауыт-һаба тураһындағы кәңәштәргә ҡолаҡ һалырға кәрәк.**



Алюмин һауыттар оҙаҡ ваҡыт зарарһыҙ һаналды. Әммә 80-се йылдарҙағы тикшеренеү һөҙөмтәләре күп төрлө һелтеләрҙең хатта көсһөҙ генә ҡатнашмалары ла аҙ ғына йылытҡанда ла иондар һәм тоҙҙар барлыҡҡа килтереп, алюминийҙы ҡаҡшатыуын күрһәтте. Шуға күрә лә бындай кәстрүлдә щи һәм башҡа төрлө әсе ашамлыҡтар бешерергә ярамай, әммә йәшелсә быҡтырырға һәм ҡыҙҙырырға, һөт ҡайнатырға мөмкин. Шулай ҙа бындай һауытты көн һайын ҡулланыу зарар килтереүе ихтимал.

Тутыҡмай торған ҡоростан эшләнгән һауыт-һаба ныҡ та һәм уңайлы ла була. Бигерәк тә сит илдә сығарылғандары өҫтөнлөк менән ҡулланыла. Әммә 90-сы йылдарҙағы тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләрен ишеткәс, Көнбайыш халҡы бындай һауыт-һаба төрөнә һыуына төшә. Баҡтиһәң, тутыҡмай торған ҡорос составына ингән никель онкологик сир тыуҙырыусы канцероген үҙенсәлеккә эйә булған көслө аллерген булып тора икән. Рәсәй нормативтары буйынса иһә тутыҡмай торған ҡоростан эшләнгән әйберҙәр хәүеф янамай. Әммә дермотоз, тире һәм лайлалы урындарҙың ҡутырлау осраҡтары йышайҙы. Шуға күрә бындай һауыт-һаба менән һирәк ҡулланырға һәм унда әсе ашамлыҡтар бешермәҫкә кәңәш ителә. Бындай металдан эшләнгән батмустар, кәнфит һауыттары ғына бер ниндәй ҙә зарар килтермәй.

Бөгөн "Цептер" тип аталған швейцар фирмаһының һауыттары көслө рекламалана. Ул бик матур һәм аҙыҡ-түлектең тәбиғи тәмен яҡшы һаҡлай. Әммә был һауыт эшләнгән ҡорос составына хром һәм никель инә, шуға ла уға ҙур һаҡлыҡ менән ҡарарға кәрәк.

Көмөш һауыт-һабаның шифалы үҙенсәлектәре хаҡында фекер киң таралған. Шул уҡ ваҡытта көмөш иондары һыуҙағы ауырыу тыуҙырыусы микрофлораның артыу кимәлен әүҙем туҡтата килеүе ғәҙел раҫлана килә. Ә шулай ҙа көмөш иондары менән байыҡтырылған һыуҙы оҙайлы ҡулланыу кешенең нервылар системаларына кире тәьҫир итә, башты ауырттыра, аяҡта ауырлыҡ тойғоһо тыуҙыра, күреү һәләтен насарайта. Йылдар буйына өҙлөкһөҙ көмөш һауыт-һабанан ашау һәм эсеү гастроэнтерит һәм бауыр циррозы сирҙәренә дусар итеүе ихтимал.

Тап шулай уҡ баҡыр, еҙ йәки бронзанан эшләнгән боронғо һауыт-һабалар менән дә һаҡ ҡулланығыҙ, сөнки улар өҫтөндә әсе аҙыҡ-түлек менән үҙ-ара тәьҫир итешеүсе йәшел йәки һорғолт төҫтәге окись ярыһы барлыҡҡа килә. Бындай һауытты ныҡ итеп таҙартып, тоҙ һәм һеркә ҡатнашмаһында мансылған сепрәк менән һөртөп, һуңынан эҫе һәм һалҡын һыуҙа яҡшы итеп йыуырға кәрәк.

Күптән түгел һауыт-һаба өсөн материал булараҡ "киләсәк метал"ын - титанды ҡуллана башланылар. Унан эшләнгән кәстрүл һәм таба тутыҡмай торған ҡоросҡа ҡарағанда күпкә еңел һәм шулай уҡ ныҡ. Әммә титандың әүҙем металл булыуын һәм ҡайһы бер аҙыҡ компоненттары менән тутыҡмай торған металға ҡарағанда ла нығыраҡ үҙ-ара тәьҫир итешеүен күптәр белмәй.

Ҡайһы бер Европа илдәре составына иң зарарлы свинец ингән һауыт-һаба (сәй, кофе сервиздары) эшләп сығара. Үҙҙәрендә уның менән ҡулланыусылар табылмаһа ла, уның ҡарауы, был һауыт менән беҙҙең баҙарҙар тулған. Бындай һауытты ҡулланырға ярамай. Тыштан уны зарарһыҙ һауыттан айырыуы ауыр, шуға күрә лә уны магазиндан һатып алғанда сертификатын талап итергә кәрәк.

Ә аҙыҡты нимәлә әҙерләргә һуң? Күпкә хәүефһеҙерәк булған эмалле, керамик һәм быяла һауыттар ҡулланыу яҡшыраҡ.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Беренселеккә ынтылғандар, ғәҙәттә, артҡа ҡалыусан

Күп кеше йыйылған банкет залына бер ир инә лә, оратор өҫтәле янына килеп, мәжлесте алып барыусының уң яғына ултыра. Шул арала уның янына йыйылыш рәйесе ашыға һәм уның ҡолағына үҙ урынына ултырмауы хаҡында шыбырҙап, залдың артҡы өлөшөндәге өҫтәлгә оҙатып ҡуя. Уның артынса залға икенсе кеше инә лә, тирә-яғын байҡағандан һуң, бүлмәнең иң һуңғы ситенән урын ала. Рәйес уның янына ашығып барып етә лә: "Һеҙ беҙҙең абруйлы ҡунағыбыҙ. Һеҙ өҫтәл башында минең янымда ултырырға тейешһегеҙ", - тип йылы итеп сәләмләй һәм уны тейешле урынға оҙатып ҡуя.

Арағыҙҙа үҙе өсөн генә йәшәгән; иң тәүҙә үҙенә урын ҡайғыртҡан; идара итергә яратҡан; үҙен төп фигура, тип һанаған; йыш ҡына тупаҫлыҡ күрһәткән, официанттарға һәм һатыусыларға кәмһетеп ҡараған; гел этеп-төртөп алға ынтылған; закондар һәм ҡағиҙәләр уның өсөн түгел, ә бүтәндәр өсөн, тип иҫәпләгән кемдәрҙе беләһең, шуларҙы иҫеңә төшөр әле. Ул, кешеләр тормошона хәүеф янауын уйлап та бирмәй, бер йүнәлешле юлдан ынтыла; сүпсарын автомобилдә китеп барған килеш ырғытып китә йәки урамдан атлап барған саҡта илтифатһыҙ рәүештә тротуарға ташлай.

Бындай кеше тәрән фекер йөрөткән кешеләргә мыҫҡыл итеп ҡарай. Бүтәндәр тураһында хәстәрлек күргән, ярҙамға мохтаждарға йәки фәҡирҙәргә иғтибарлы булған, балаларға һәм хайуандарға ихтирам менән ҡараған кешеләрҙән мыҫҡыллы көлә. Ғаиләһенә, күршеләренә һәм хеҙмәттәштәренә ҡарата ҡаты бәғерле була.

Ул һәр ваҡыт бөтә донъя ишетерлек итеп: "Тәүҙә миңә! Мин иң мөһим кеше!" - тип, иң беренсе ҡысҡыра. Сөнки уның маҡсаты шәхси ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүгә һәм үҙенең мөһимлеген раҫлауға ҡайтып ҡала. Ғәҙәттә, ул үҙенән бүтәндәрҙе биҙҙереүҙә генә уңышҡа өлгәшә. Уның "беренсе сиратта - миңә" тигән тормош позицияһы бер ниндәй ҙә ҡәнәғәтләнеү килтермәй.

Ғайса бәйғәмбәр ғәләйһиссәләм, беренсе булған аҙаҡҡа ҡала, тигән. Ул был турала йыш ҡына һөйләгән. Уның асыштарының береһе ошолай яңғырай: "Баҫалҡылар фатиха алғанға күрә, уларға ер мираҫ булыр". Ә баҫалҡы кешеләрҙе, ғәҙәттә, иң һуңғы сиратта ғына шәйләп ҡалалар. Улар ярһыулыҡ та, мин-минлек тә күрһәтмәй, тыныс һәм үҙ-үҙенә етерлек тормош менән йәшәй, сөнки улар үҙҙәре тураһында ғына хәстәрлек күрмәй, хәҡиҡәткә, ғилемгә ынтылыусан була.

Башҡа ваҡыт Ғайса бәйғәмбәр былай тип әйтә: "Сабый бала кеүек булығыҙ". Бәләкәй бала һәр ваҡыт һоҡланыусан һәм ҡыҙыҡһыныусан була. Ул ғүмере буйы нимәне өйрәнеп була, шуны өйрәнеү теләге менән яна. Йыуаштар һәм балалар беҙҙең йәмғиәттә мөһимлек дәрәжәһе буйынса иң һуңғылар иҫәбендә. Әммә балалар һәм фәҡирҙәр батшалыҡты мираҫ итеп ала. Улар тәүгеләрҙән була!

Ғайса бәйғәмбәрҙең тормошо бүтәндәргә өлгө булып торған. Үҙенең шәкерттәренең ҡаршылашыуына ҡарамаҫтан, ул, тубыҡланып, уларҙың аяғын йыуған. Унда үҙ көсөн аңлауҙан килеп тыуған мин-минлек тә, тәкәбберлек тә булмаған. "Беренсе һуңғы була. Ә һуңғы кеше беренсе була," тип ул беренсе әйткән, ә тәжрибә быны иҫбат иткән.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ



# БӘХЕТЛЕ ҒАИЛӘ ҺАБАҠТАРЫ

## Ысын атай-әсәй булыр өсөн, ысын кеше булырға кәрәк

Мин күптән кинотеатрҙа булғаным юҡ ине. Бер ваҡыт шишәмбе кис Джулиан кинотеатрҙа сәғәт етелә осрашып, Осеола Маккарти исемле ҡатын тураһында документаль фильм ҡарарға тәҡдим итте. Фильм "Донъяны яулаған кер йыуыусы" тип атала. Мин фильм тураһында ла, герой тураһында ла ишеткәнем юҡ ине. Әммә Джулиан был ҡатын тормошо тураһында белеү миңә файҙаға була, тигәс, ағайым менән кино ҡарай алыу бәхетенә шатланып бөтә алманым.

Джулиандың "Ғаилә лидерлығының дүртенсе һабағы"н биргән көндән алып алты аҙна уҙғайны. Был көндәрҙең үтеүен танымайынса булдыра алмайым. Ағайымдың кәңәшен тотоп, мин "таң һабантурғайы"на әүерелдем. Башта мин быны булдыра алмаҫмын, тип уйлағайным, әммә ғазаплы тәүге аҙналар үтеүгә, был минең өсөн ғәҙәти хәлгә әйләнде. Иртәнге сәғәттәрҙә мин тәбиғәт менән аралашырға, уйланырға һәм фәлсәфәүи китаптар ҡараштырырға ярата инем. Шулай уҡ был ваҡытты мин тыуасаҡ көнөмдө планлаштырыу һәм киләсәк тормошом хаҡында хыялланыу өсөн файҙаландым.

Иртәләрен йыш ҡына ҙур рауза баҡсаһына ҡарап, тәҙрә төбөндә ултырырға яраттым. Был минуттарҙа мин иртәнге тынлыҡ менән ләззәтләнә инем. Яңғыҙ ҡалып, әкренләп тормошомдоң тәрән мәғәнәһенә төшөнә башланым. Ғаиләмдең лидеры булып, был донъяға үҙ өлөшөмдө индерә алыуымды аңланым. "Беҙҙең бар бәхетһеҙлектәребеҙ яңғыҙ ҡалып, тыныс ҡына ултыра белмәүебеҙҙән килә", - тип ҡалай дөрөҫ әйткән француз фәйләсүфе Блез Паскаль.

Мин фекерләүҙең тағы ла юғары баҫҡысына күтәрелдем. Ошо алты аҙна эсендә миңә бик күп тәрән фекерҙәр һәм яңы тойғолар килеп ураны. Был донъяның матурлығын һәм шатлығын тойҙом һәм, ниһайәт, үҙемдең тәү тәғәйенләнешемә тап килә башлауыма инандым. Балаларыма һәм Джонға һөйөүемде элеккегә ҡарағанда күберәк бүләк итә башланым.

Ағайымдың "күңел йорто"н хәстәрләү тураһындағы кәңәшен тотоп, мин тағы ла дәртлерәк була барҙым һәм хистойғоларым менән идара итергә өйрәндем. Үҙемдең журналымды булдырып, тормошома ышаныслы рәүештә төҙәтмәләр индерә башланым һәм үҙемдең тәртибем менән аҡыллы идара итергә өйрәндем. Аҙна һайын үҙемә "ижади отпускылар" ойоштороу эске донъямды тағы ла яҡшыраҡ белергә ярҙам итә ине. Мин күп йылдар элек юғалтҡан тормош шатлығын яңынан ҡайтарҙым. Ағайым алдан әйткәнсә, үҙемде кеше булараҡ яҡшыртып, күпкә яҡшыраҡ әсәй була барҙым.

Кинозалға ингәс тә мин Джулианды күрмәнем. Ул миңә етенсе рәткә ултырырға һәм, әгәр һуңлай ҡалһа, урынын һаҡларға ҡушҡайны. Залда ут һүнде. Музыка уйнап ебәрҙе һәм фильм башланды. Ҡапыл кемдер минең ҡулыма ҡағылыуын тойҙом. Башымды күтәреп ҡараһам, ҡаршымда Джулиан тора.

- Һуңлауым өсөн ғәфү ит, һеңлем. Бүлмәмде йыйыштырып йөрөнөм, - тине ул йылмайып.

- Ярай инде, Джулиан. Мин инде яңғыҙыма ғына ултырырға тура килер, тип уйлағайным, - тинем мин, көлөп.

- Юҡ инде, Кэтрин. Мин аҙна буйы көттөм был кисте. Был иҫ киткес фильм, - тине Джулиан.

**Робин ШАРМА.**
**(Дауамы бар).**

# БЕҘ ЙЫР ЯҠЛЫ

Беҙ мәҙәниәт, сәнғәт өлкәһе кешеләре түгел. Беребеҙ "Гидравлика" заводында эшләй, икенсебеҙ - шәфҡәт туташы. Ә шулай ҙа сәнғәт донъяһына ғашиҡбыҙ. Башҡорт халыҡ йырҙарын, ҡурай моңдарын тыңларға яратабыҙ. Бына әле "Киске Өфө" гәзитендә Роза һәм Вил Кәримовтар яҙған "Башҡорт моңона ни етә!" тигән мәҡәләне уҡыныҡ. Үҙебеҙҙең иҫ киткес матур тәбиғәтебеҙ, унда йөшәүсе эшһөйәр һәм музыкаль халҡыбыҙ тураһында яҙылған йылы юлдар беҙгә бик яҡын. Авторҙарҙың фекерҙәренә ысын күңелдән ҡушылабыҙ һәм беҙҙең милли мәҙәниәтебеҙ тураһында хәстәрлек күргән, уның ҡомартҡыларын һаҡлап, уны артабан киләһе быуынға еткереү тураһында ҡайғыртҡан милләттәштәребеҙ барлығына ихлас ҡыуанабыҙ, ғорурланабыҙ.

Эйе, башҡортобоҙҙоң боронғо моңло көйҙәре лә, моңло ҡурайы ла, Башҡортостаныбыҙҙың иҫ киткес гүзәл тәбиғәте лә - барыһы ла әйтеп бөткөһөҙ мөғжизә ул! Беҙ шул мөғжизә араһында йәшәүебеҙ менән ғорурланабыҙ һәм милли мәҙәниәтебеҙҙе алға әйҙәүсе шәхестәр алдында баш эйәбеҙ. Башҡорт моңо, һис һүҙһеҙ, Башҡортостандың ете мөғжизәһе исемлегендә булырға тейеш, тигән фекерҙә ҡалабыҙ.

**Гүзәл һәм Сөнәғәт ӘСФӘНДИӘРОВтар.**

# ИРӘНДЕК АЙЫУЫЛАЙ АЛТЫН

**"Киске Өфө" гәзите һәм "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының "Сәләм" студияһы иғлан иткән бәйгелә мин дә ҡатнашып, үҙ тәҡдимемде индерергә булдым.**

Гәзит биттәрендә баҫылған мәҡәләләрҙе уҡып, һәр иртән "Сәләм" программаһын ҡарағандан һуң, ысынлап та, был бәйгенең халыҡ араһында киң майҙан алыуын, халыҡтың ете мөғжизәне асыҡлауҙа ихлас ҡатнашыуын күреп, һөҡланырға ғына ҡала. Халҡымдың үҙ еренә, тәбиғи ҡомартҡыларына, изге урындарына битараф түгеллегенә күңел һөйөнә.

Мин "Башҡортостандың ете мөғжизәһе"нә 1992 йылдың 22 майында Баймаҡ районы Күсей ауылы тракторсыһы Үтәғолов Радик тапҡан алтынды, йәғни "Ирәндек айыуы"н тәҡдим итәм.

Күсей ерҙәрендә алтын ҡаҙыу эштәре элек-электән башҡарылды. Күренекле алтын приискылары хужалары Рәмиевтарҙан алып үткән быуаттың 90-сы йылдарына тиклем алтын йыуылды. "Ирәндек айыуы" ла тап элекке алтын йыуған ерҙә - Һунар-Үҙәк рудниғынан ике саҡрым алыҫлыҡтағы баҫыуҙа табыла. Ауырлығы 4 килограмм 885 грамм 960 миллиграмм. Оҙонлоғо - 31 см, киңлеге - 18,5, ҡалынлығы - 1-1,5 см тирәһе. Ул 86,5 процентлы саф алтын, 6,5 процент көмөш тәшкил итә. Айыуға оҡшағанлыҡтан, "Ирәндек айыуы" тигән исем бирелә. Бөгөнгә көндә был самородок Башҡортостандың Милли банкыһында һаҡлана.

Тәбиғәттең был мөғжизәһе ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Күптәр был хәлдең ысын булыуына ышанманы. Нисек ер өҫтөндә шунса алтын ятһын, ти! Донъяла нисектер, әммә республикабыҙҙа бындай алтын табылды. Шуға ла ауылдаштарым исеменән "Ирәндек айыуы" ете мөғжизәнең береһе булырға тейеш, тип уйлайым һәм тәҡдимемде йәмәғәтселеккә еткерәм.

**Кәримә УСМАНОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

# ӘҮЛИӘЛЕК ҺӘМ... БӘНДӘБИКӘ КӘШӘНӘҺЕ

1. Әүлиә әбей Бәндәбикә кәшәнәһе лә - Башҡортостандағы мөғжизәләрҙең береһе. Бәндәбикә IX быуатта хәҙерге Күгәрсен районы Мәксүт ауылында һәм шул тирәләрҙәге ырыу-аралар менән етәксөлек иткән. Ырыуын әйҙәп, бәлә-ҡазаларҙан һаҡлап торған үтә лә аҡыллы, үҙ халҡының берҙәмлеген яҡлаусы, яҡлаусыһы ғына түгел, кәнәшсеһе лә булып, "Ерәнсә сәсән" легендаһында исеме бөгөнгө көндәргәсә һаҡланып ҡалған шәхес. Ул үҙ заманында иң алдынғы исемгә, "Әүлиә" исеменә лайыҡ булып, тарих биттәрендә быуаттар буйына һаҡланған. Бөгөн уның кәшәнәһе яңыртыла һәм быйыл бынан 42 йыл элек алып кителгән һөлдәһен яңынан ерләү тантаһаһы үтәсәк. Был үҙе бер мөғжизә.

2. Көйөргәҙе районы Яҡут ауылы эргәһендәге бәләкәй-бәләкәй тоҙлобатҡаҡлы күлдәр теҙмәһен дә мөғжизә тиер инем. Тоҙло күлдәрҙән 20 метр тирәһе алыҫлыҡта ғына бөтөнләй сөсө һыулы, томбойоҡтар атып ултырған күлдәр урынлашҡан. Унан уң яҡта 100 метр алыҫлыҡта балыҡҡа бай сөсө һыулы Туғыҙтимер йылғаһы аға. Һул яҡҡа 50 метр тирәһе китһәң, тештө ҡамаштырып торған һыуыҡ һыулы шишмә. Тирә-яғында аҙ-маҙ ҡалҡыулыҡтар, әммә урман, туғай юҡ. Ундағы ҡояштың байыуы ла, айҙың ҡалҡыуы ла - үҙе бер мөғжизә.

3. Йылайыр районында Имәнҡаҙыҡ тауы бар. Был үҙенең тарихы менән мөғжизәгә тиң. Бынан 450 йыл элек урыҫ батшаһына барыуҙан алда ете ырыуҙан аҡһаҡалдар ошо тауҙа йыйылып, оло кәңәш ҡорған. Бик күп кәңәшләшкәндән һуң, батшаға грамота төҙөп, барыр кешеләрен билдәләгәндәр. Оло юлға сығырға ҡарар итегәс, тау башына имән бағана ултырталар. Был Рәсәй батшаһы менән килешеүҙең имән ҡеүек ныҡ, оҙон ғүмерле булыуына бер ишара булып яңғыраған. Бына шул ваҡыттан башлап был тау Имәнтау исемен йөрөтә икән.

**Ләлә БИИШЕВА.**

**Шулай итеп, "Киске Өфө" гәзите"Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының "Сәләм" иждад берекмәһе менән берлектә иғлан иткән "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсы дауам итә.**

**Конкурс өс этапта үткәреләсәк. Иң тәүҙә (июнь аҙағына тиклем) Башҡортостаныбыҙҙағы мөғжизә булырҙай бар нәмәне - тәбиғәт объекттарын, тарихи, мәҙәни, сәнғәт әйберҙәрен барлап сығайыҡ. Һәр кем үҙе тәҡдим иткән объект тураһында һүҙ әйтә, уны яҡлай, тауыш бирә. Тауыш биреү хаттар аша ла, редакция телефоны - 252-39-99, 246-03-24, "Сәләм" иждад берекмәһе телефоны - 251-73-91, 251-90-44, шулай уҡ "Сәләм" иждад берекмәһе сайты - www.Saljam.ru аша ла атҡарыла. Икенсе этапта тәҡдим ителгән объекттар араһынан 14-е һайлап алына һәм артабан тауыш биреү дауам иттереләсәк. Был этаптың нисегерәк башҡарыласағын һуңыраҡ хәбәр итербеҙ. "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсында Башҡортостаныбыҙ өсөн визит карточкаһы булырҙай, уны донъяла танытырҙай, халҡыбыҙ өсөн үтә әһәмиәтле тәбиғи, мәҙәни, тарихи объекттар ҡатнашырға тейеш. Һеҙҙән хаттар, мәҡәләләр көтәбеҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

# БАШ ЭШЛӘТМӘК




**Горизонталь буйынса: 4.** Йылҡы малының туҡ эсәге. **7.** Компас билдәләгән йүнәлеш. **8.** Ямғыр ҡатыш яуған боҙло епшек ҡар. **9.** Тигр йылғаһының "әшнәһе". **11.** Ылыҫын ҡойоусы ағас. **13.** Сит ил милицияһы. **18.** Йортһоҙ-ерһеҙ кеше, берәҙәк. **24.** Келәт. **26.** Йөндән йәки сепрәктән һуғылған ҡаралты. **27.** Ҡәҙер, хөрмәт. **28.** Ниҙер булдырырға, эшләргә тигән күңел ынтылышы. **30.** Ҡамыр йәйә торған таяҡ. **31.** Йәстү нимә ул? **32.** Иң ҙур хайуан. **33.** Ташып барған көс, ғәйрәт. **36.** Эйәрҙең сандырҙан алып тартыла торған ҡайышы.

**Вертикаль буйынса: 1.** Ҡыҙыл йәки аҡ төҫтәге хуш еҫле, эре сәскәле, ҡаты ҡалын япраҡлы йылы яҡ ағасы. **2.** Умыртҡаларҙа туҡымалар араһын тултырып, тәндәге бөтә күҙәнәктәр аша үтеп йөрөгән төҫһеҙ шыйыҡлыҡ. **3.** Хужаның "ишәге". **5.** Үтәлергә тейеш булған васыят. **6.** Ниҙелер һуғып ҡаға торған һәлмәк ҡорал. **10.** М. Ҡолшәрипов, Ә. Әсфәндиәров фәне. **12.** Ҡолонға кейҙерә торған нуҡта. **14.** Теге донъяның бер өлөшө. **15.** Алыҫ Көнсығыш дингеҙҙәре балығы. **16.** Матди йәки рухи йәһәттән күтәреү рәүешендә күргән сара. **17.** Башҡа илгә ҡорал көсө менән ингән ғәскәр. **19.** Төрлө хистойғоно, ихтыяр телəкте, кисереште белдергән һүҙ. **20.** Тамаша тураһында белдереү. **22.** Быуын-быуындан донъя көтөп, йәшәп килгән урын, төп йорт. **23.** Артыҡ ыҙа килтергән, мәшәҡәтле кеше йәки мал. **26.** Бөркөттөң иң ныҡлы, көслө балаһы. **28.** Иғтибарҙы йәлеп итерлек күренеш. **29.** Япон халаты. **31.** Ил, кеше ҡаршыһындағы саф исем, яҡшат. **34.** Тауыҡ түшөнә "керә" торған ашлыҡ.

АТЫҢ КЕМ?

# МӘҒӘНӘЛЕ ИСЕМ ЭЙӘҺЕ...

## донъяға ҡот өҫтәй

























**Бала тыуа, донъяға яңы кеше килә. Баланың донъяға килеүе беҙҙең йәмғиәттә уға исем ҡушып, тыуыу тураһында таныҡлыҡ биреп беркетелә. Күп ата-әсәләр балаға исемде алдан уйлап, ололар, туғандары менән кәңәшләшеп ҡуша. Бала исемен ғүмере буйына йөрөтә, исем кеше булмышының бер сифатына, билдәһенә әйләнә.**

Бигерәк тә малайҙарҙың исеме йөкмәткеле булырға тейеш. Ир бала киләсәктә атай булырға тейешле кеше, уның исеме нәҫел-нәҫәпте дауам итә,балаларҙың исеме менән йәнәш ҡуйылып йөрөтөлә, ҡайһы бер осраҡта фамилияға ла әйләнә.

Башҡорт исемдәренең тәрбиәүи мәғәнәһен дә иҫтән сығармаҫҡа кәрәк. Бала бәләкәйҙән үҙ исеменең мәғәнәһен белеп, исемен яратып үҫһә, ул балала үҙенең милләтенә ҡарата ғорурлыҡ уяна. Юҡҡамы ни, ата-әсә балаһын "исеменә тап төшөрмә" тип иҫкәртә. "Исем кешенең яҙмышына тәьҫир итә, яҙмышын билдәләй " тигән ҡараш та йәшәгән борон халыҡтарҙа. Исем кешенең визит карточкаһы, шәхес таныҡлығы һымаҡ, ул шәхестең ниндәй илдән, ниндәй милләттән икәнен дә күрһәтеп тора.

Башҡорттоң да исеме, шәкөр, уның башҡортлоғон күрһәткән билдәгә әйләнә бара. Һуңғы ваҡытта Өфө мәктәптәрендә ҡолаҡҡа ятышлы, фәһемле исемдәрҙе ишетеү бик күңелле күренеш. Тимәк, башҡорт милләтенә, теленә һөйөү һүнмәй, арта ғына.

Бөгөнгө көндә беҙҙең 107 -се лицейҙа 70 башҡорт балаһы уҡый. Шулар араһында матур яңғырашлы, тәрән мәғәнәле исем йөрөтөүсе балалар күп. Дәрес ваҡытында уҡыусыларға Әхмәт,Кәрим, Ғәлихан, Искәндәр, Таһир, Алһыу, Айгөл, Нәилә тип өндәшеүҙәре ни тора! Исемегеҙ есемегеҙгә тап килеп , ҡоростай сынығып, ыласындай талпынып, ысын башҡорт рухлы булып үҫегеҙ, балалар.

**Лариса ВӘЛИШИНА,**
**107-се лицейҙың башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**



















ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

## ҠАЙЫН ЯПРАҒЫ

Учалы районында тыуып үҫкән, әлеге ваҡытта Өфөлә эшләүсе Башҡортостандың атҡаҙанған табибы Рәүилә Алмаз ҡыҙы Ҡолошова һөйләүе буйынса, уның әзәһе (өләсәһе) Баҙыян иҫән саҡта ауылдаштары һәм күрше ауыл кешеләре дауаханаға йөрөмәгән. Бөтә ауырыуҙарҙы ул төрлө ысулдар менән аяҡҡа баҫтырған, хатта аяҡ-ҡулдар һынған осраҡтарҙа ла ҡайын ағасының ҡаты ҡайырына һалып, күмелер ваҡытҡа бәйләп ҡуйып, аҙаҡтан ҡайын япрағына урап йүнәлткән. Шулай уҡ ревматизм, полиартрит, төрлө ялҡынһыныуҙарҙы ла ҡайын япрағы ярҙамында һауыҡтырған.

Ҡайын япрағын мотлаҡ май аҙағы - июнь башында, сайыры күп һәм составындағы белладонна көсәйгән сағында йыялар. Тоҡҡа тынҡыслап тултырылған япраҡтарға аяҡтарҙы тығып яталар. Йәрәге һау кешене бөтә тәне менән башын ғына ҡалдырып һалһаң да була. Ҡул йәки аяҡты ғына тығып ултырырға ла ярай. Тик япраҡтарҙы тәнгә һылаштырып ябырға кәрәк. Кеше күпме сыҙай, шул тиклем ята, шулай ҙа бер сәғәттән артыҡ ятыу кәңәш ителмәй, сөнки дауа көслө тәьҫир итә, тәнде нык һура.

Дауаны ауырыуҙың төрөнә ҡарап ҡабатлайҙар. Миҙгелгә бер нисә тапҡыр дауаланып өлгөрөргә була. Үҫмерҙәр үҫкән саҡта аяҡтары һыҙлаусан була, уларҙы бер тапҡыр ғына ҡайын япрағына урау ҙа һыҙлауҙы ҡул менән һыпырып алғандай юҡ итәсәк.

## БАЛА НЫҠ БУЛҺЫН ӨСӨН...

### мунса индергәндәр

Борондан башҡорттар мунса инеүгә ҙур әһәмиәт биргән. Бала тыуһа ла мунса яға һалып, тәүгеһенә ҙур балаларҙы ебәргәндәр. Ҡаты эҫеһе бөткәс, йомшаҡ былыу мунсала бәпесте йыуындырып алғандар. Мунса индереү ҡырҡ көн буйы дауам иткән. Тап шуға ла бала таҙа, ныҡ, көслө булып үҫкән.

Шулай уҡ ҡапыл һәм ныҡ һалҡын тейҙергән осраҡтарҙа мунсалағы еңел быу менән һауыҡтырғандар. Мәҫәлән, яҙын һыу ташҡанда янылыш боҙло һыуға төшөп һалҡын алдырған кешеләрҙе ете көн буйы мунса индереп, өйгә ҡайтҡас, толопҡа урап һалып шәбәйтеп алғандар. Миндекте бешекләй торған һауытҡа, ауырыуына ҡарап, төрлө-төрлө үләндәр өҫтәгәндәр.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ - ҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЭҘЛӘГӘН БӘХЕТЕҢ...

## күләгәнә оҡшаш

Беҙҙең бәхетһеҙлектәрҙең сере шунда: бәхетлебеҙме, юҡмы, тип уйланырға ваҡытыбыҙ күп.

**(Б. Шоу).**

Бәхет - ул үҙ яҙмышыңа күнеү һәм тормоштағы хәлең менән ҡәнәғәт булыу.

**(Эразм Роттердамский).**

Һин эҙләгән бәхет һинең менән килгән күләгәгә оҡшаш: артынан сапһаң - тоттормай, ҡасһаң - артыңдан ҡыуа төшә.

**(Ғәрәп халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ҡарт вафаты алдынан улын саҡырып алған да былай тигән:"Улым, мин һинең бәхетле булыуыңды теләйем. Бәхетле булыу өсөн ил гиҙ, хыялыңды нисек тормошҡа ашырырға икәнен әйтерҙәр" ,- тигән. Атаһы үлгәс, улы донъя гиҙеп сығып киткән. Бына ул бер йылғаға етә һәм яр буйындаябыҡ, ас, ҡарт ҡына бер ат йөрөгәнен күрә. "Һин ҡайҙа китеп бараһың, егет кеше?" тип һорай ат. "Бәхет эҙләп китеп барам, - ти егет. - Бәлки, һин уның ҡайҙалығын беләһеңдер?" "Йәш сағымда мине барыһы ла иркәләне, ашатты, эсерҙе, эшләтмәне, башҡалар хаҡында уйлап та бирмәнем, - ти ат. - Бына хәҙер ҡартайҙым, башҡаларҙың миндә бер эше лә юҡ. Шуға ла һиңә кәңәшем шул: йәшлегеңдә бөтә эште лә эшлә. Башҡаларҙың шатлығы менән шатлан. Хәстәрлектәрҙән ҡурҡма. Шул саҡта бар бәхет тик һинең эргәңдә булыр". Егет артабан китә һәм юл буйында бер йыланды күрә. "Ҡайҙа киттең, егет?" тип һорай йылан. "Бәхет эҙләп китеп барам". "Бына мин дә үҙемдең ағыуым менән ғүмер буйы ғорурландым, - ти йылан. - Минән барыһы ла ҡурҡа, тип уйланым. Юҡ, ҡурҡмайҙар, ә нәфрәтләнәләр. Һәр береһе мине үлтерергә теләй. Шуға ла мин хәҙер барыһынан да ҡасам. Һиндә лә бар ундай ағыу - ул һинең телең. Ҡара, телең берәүҙе лә сәбәпһеҙгә саҡмаһын. Ул саҡта һиңә берәүҙән дә ҡасырға тура килмәҫ һәм һин бәхетле булырһың..." Егет артабан китә һәм ҙур ҡошҡа тап була. Ҡош уның ҡайҙа китеп барыуы менән ҡыҙыҡһына. Егеттең яуабына ҡаршы ул ҡош шулай ти:"Һин күптән ил гиҙәһеңдер. Йөҙөңдө саң баҫҡан, кейемдәрең һәләмәгә әйләнгән. Кешеләр һинән йөҙ бора. Бәхет тә һинең эргәңдә туҡтап торорға теләмәҫ. Шуның өсөн һинең тирәңдә бар нәмәнең матур булыуына өлгәш. Ул саҡта бәхетеңде лә күрерһең".**

**Шул һөйләшеүҙән һуң егет кеше өйөнә әйләнеп ҡайтҡан. Хәҙер инде ул бәхет эҙләп ҡайҙалыр ситтә йөрөргә түгел икәнен ныҡлап аңлаған".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6066
Заказ 1839